ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

30-5 декабрь - ғинуар (аҡъюлай - һыуығай) 2017

№52 (782)

15 йыл

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

"Мин киң мәғлүмәт саралары яҡлымын..."



3,4

Яңы йыл һүҙе...



6

Байлығым, даным, дәрәжәм - башҡортса һөйләшкән балаларым!



8-9

Мәскәү сәхнәләрен яулап...



11

ТВ-программа 14

**МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!**

***Һәр кем күңелендә изгелек символы булып урын алған аҡ һаҡаллы Ҡыш бабайға ҡушылып, Яңы йыл алдынан һеҙгә тағы ла "Әйҙәгеҙ!" тип дәртле өндәшәбеҙ. Әйҙәгеҙ, аңлы, рухлы, көслө ихтыярлы һәм оптимист булайыҡ! Әйҙәгеҙ, рәхмәтле, изгелекле, аҡ уйлы булайыҡ! Әйҙәгеҙ, яҡшылыҡтар көтөп, шул яҡшылыҡтарҙың күберәк булыуына үҙебеҙ ҙә булышлыҡ итеп йәшәйек! Әйҙәгеҙ, еңеүселәр булайыҡ! Әйҙәгеҙ...***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## "Мөғжизәгә килә ышанғым..." ти шағир. Ә һеҙ уға ышанаһығыҙмы? Яңы йыл һеҙгә ниндәй мөғжизәләр килтергәне бар?

***Юлай МӘХМҮТОВ, шәхси эшҡыуар, Мәләүез ҡалаһы:*** Шағир мөғжизә барлығына шикләнеберәк ҡараһа ла, мин ышанам. Тормош үҙе бер мөғжизә, тиҙәр. Ысынлап та, быны күрә белергә һәм аңларға ғына кәрәк. Бигерәк тә Яңы йыл миңә бала саҡтағы кеүек үк, бөтә матур теләктәрҙе тормошҡа ашырыусы, мөғжизәләргә юл асыусы мәл булып тойола. Бының шулай икәненә бер нисә йыл элек инандым. Йылдың матур бер миҙгелендә ҡаты ауырыуға дусар булыуым хаҡында белдем. Үҙ эшемде асып, алдағы көндәргә ҙур өмөттәр бағлап йәшәп ятҡанда, был диагноз миңә йәшен атҡан кеүек тәьҫир итте. Күңелем төштө, тормошом ҡараңғыланды, бөтә нәмәгә ҡул һелтәнем, ғаиләмдән ситләштем. Дөрөҫөн әйткәндә, үлемгә әҙерләнә башланым. Минән айырмалы рәүештә, ҡатыным ҡул ҡаушырып ултырманы, этеп-төртөп мине дауалау курстарына йөрөттө, халыҡ дауаһын да өйрәнде, төрлө дауаханаларҙағы табиптар менән хат яҙышты. Сит телдә аралашыу өсөн махсус кеше лә тапты хатта. Шул арала төрлө фондтарға хаттар яҙып, социаль селтәрҙәр аша халыҡҡа өндәшеп, дауаланыу өсөн аҡса йыйҙы. Мин быларҙың барыһын да шикләнеп, хатта асыу менән ҡабул иттем, буш нәмә менән булыша, тип уйланым. Шулай ҙа уның тырышлығын хөрмәт итеп, бөтә әйткәнен еренә еткерә йөрөнөм, дауаландым, консультациялар алдым, операция эшләттем, сит илгә барып ҡайттым. Ләкин быларҙың бөтәһен дә автоматик рәүештә башҡарҙым, йүнәлермен, тип өмөт итмәнем.

Яңы йыл яҡынлашты. Бар донъяны ҡыуанысҡа ығы-зығы сорнап алды. Ғаиләм дауахананан һуңғы тапҡыр тапшырған анализдарҙың һөҙөмтәһен көттө. Миңә генә барыбер ине. 29 декабрь ҡатыным алдыма бер бит ҡағыҙ һалды ла, диванға ултырып, үкһеп илап ебәрҙе. Быға тиклем бер күҙ йәшен дә күрһәтмәгән кәләшемә ҡарап, аптырап киттем. Ҡалтыранған ҡулым менән ҡағыҙҙы алдым да ундағы аңлайышһыҙ һандар, һүҙҙәр араһында "Сәләмәт" тигәнде генә уҡый алдым...

Ошонан һуң да нисек Яңы йыл мөғжизәһенә ышанмаҫҡа мөмкин? Сиремдең сигенеүе үҙе бер мөғжизә булһа, янымда көслө рухлы ҡатыным булыуы шулай уҡ тылсымға тиң. Уның ышаныусы ғына мине аяҡҡа баҫтырҙы. Был ваҡиғаға әллә күпме йыл үтте, ләкин шул ваҡыттағы мөғжизәне бер ҡасан да онотмайым. Яңы йыл миңә хәҙер икенсе тапҡыр тыуған көнөм һымаҡ. Барыбыҙға ла ҡыуанысҡа, мөғжизәле Яңы йыл килеүен теләйем.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*БАЙРАМ МЕНӘН!*

# ЯҢЫ ЙЫЛ ТӘҘРӘ СИРТӘ

***Ҡар шығырлай, ел шыбырлай***
***Ҡыштыр ҡыштың тауышын.***
***Ҡарҙар көлә күҙҙе сағып, -***
***Был матурлыҡ табышы.***
***Ап-аҡ ҡарҙар Ерҙе паклай,***
***Нурлай йәнде саф аҡлыҡ.***
***Яңы йылға ишек ҡағам,***
***Киләсәккә юл асыҡ.***
***Ер әйләнә, Йылһан үҙе***
***Ваҡыттың карабында.***
***Кешеләр булып ҡалайыҡ***
***Кешеләр араһында.***
***Йәшел шыршы балҡый йортта,***
***Уттарында нур көлтә.***
***Мең яҙмышлы мең йорттарға***
***Яңы йыл тәҙрә сиртә.***

**Фәнил БҮЛӘКОВ.**



12+

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# МАШИНАНДЫҢ ФАЙҘАҺЫН КҮР

**Мин, әсәйем әйтмешләй, машина "ене" ҡағылған кешеләрҙең береһе. Мәктәптә уҡыған саҡта уҡ тимер атты "йүгәнләнем" дә, әле булһа "дилбегәһен" ебәргән юҡ. Машина йөрөтөү минең һөнәрем. Ул мине ашата, кейендерә, балаларҙы үҫтерә, сәйәхәт иттерә.**

Егерме йылдан ашыу алыҫ юлда йөрөүсе машина водителе булып эшләйем. Аҙналар буйы өйҙән ситтә булырға тура килһә лә, һөнәрем үҙемә ныҡ оҡшай. Юлда мин фекеремде туплайым, пландар ҡорам, үткән ваҡиғаларға һығымталар эшләйем, көндәлек ығы-зығынан ял итәм, тип әйтергә лә була. Рейстар араһындағы ял ваҡытының тәүге бер-ике көнө минең өсөн артығы менән етә. Өсөнсө көнгә руль артына ултырмаһам, үҙемде насар хис итә башлайым. Был - беренсенән. Ә, икенсенән, әзмәүерҙәй ир була тороп, ни ғәләмәт өйҙә ҡыл да ҡыбырлатмай ятырға мөмкин? Әлбиттә, рейстарҙан яҡшы эш хаҡы алып ҡайтам, бер нәмәгә лә мохтажлыҡ юҡ. Шулай ҙа аҡса артыҡ булмай. Ул ундай ҡағыҙҙар булыуын булһа, ҡуйыр урын табыла. Шуға күрә, ялдарымды ла файҙалы, йәки "килемле" итеп үткәрәм.

Профессиональ водитель булараҡ, эшмәкәрлегемде лә ошо йүнәлештә алып барам - машина йөрөргә өйрәнеүселәргә дәрестәр үткәрәм. Былның өсөн тәүге ваҡытта өй янындағы автомәктәп менән килешеү төҙөп, унда уҡығандарға ярҙам итә инем. Ләкин был осраҡта мин процентҡа ғына эшләнем, ә күпселек килем мәктәпкә китә ине. Шуға ла хәҙер үҙаллылыҡҡа күстем.

Ҡала шарттарында автомобилдә йөрөргә өйрәнеү ҡатмарлы эш - юл билдәләре лә, машиналар ҙа күп. Ә автомәктәптә уҡыусыларҙың күбеһенә уҡыу программаһында ҡаралған сәғәттәр һаны етмәй һәм улар өҫтәмә дәрестәр ала. Минең кеүек инструкторҙар иһә бындай "студенттарға" бик шат. Шулай уҡ хоҡуҡ танытмаһы алып та, оҙаҡ ваҡыт руль артына ултырмау сәбәпле, юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен, машинала йөрөү серҙәрен онотоп бөткәндәр ҙә мөрәжәғәт итә миңә. Ҡайһы берәүҙәр, айырыуса ҡатын-ҡыҙҙар, хоҡуҡ танытмаһы алып та, яңғыҙы ғына руль артында ҡалаға сығырға шөрләй. Уларға машинала йөрөү оҫталығын шымартырға булышлыҡ итәм. Күптәр өсөн автодромда имтихан тапшырыу иң ауыр этап. Ошо йүнәлештә практик күнекмәләр үткәреү ҙә күрһәтелгән хеҙмәттәрем рәтенә инә.

Руль артына яңы ултырыусыларҙы өйрәтеү өсөн махсус автомобиль һатып алдым. Уны һәр ваҡыт бөтә яҡлап тикшереп, туҙған деталдәрен алмаштырып, һылап-һыйпап ҡына торам. Кеше һаулығы, ғүмере өсөн яуаплы булыуымды бер ҡасан да иҫтән сығармайым - үҙемдең күңел торошона ла, машинаға ла иғтибар итәм. Ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында тынысһыҙланып, асыуланып торған сағым булһа, рулгә тотонмайым. Минең эске тулҡынланыуым уҡыусыма ла күсә һәм дәрестең һөҙөмтәһе булмай. Ҡайһы берәүҙәр үҙ машинаһында йөрөп өйрәнеүҙе хуп күрә.

Хаҡтарға килгәндә, 60 минутлыҡ дәрес өсөн 500 һум алам. Башҡа инструкторҙарҙың академ-сәғәт, йәғни 45 минут өсөн 400 - 600 һум алыуын иҫәпкә алғанда, был күп түгел. Бер дәрес кәмендә 2 сәғәт була. Бензин өсөн аҡсаны тәүге ике дәрестә алам, ә артабанғы дәрестәр өсөн түләтмәйем.

Бына ошондай бәләкәй генә "эшҡыуарлыҡ" менән шөғөлләнәм. Машинаһы булған һәр кем, ҡалала йәшәһенме ул, ауылдамы - был эшмәкәрлекте алып барырға мөмкин. Хәҙерге ваҡытта егеттәрҙең дә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың да "йығылып" ятып машина йөрөтөргә өйрәнергә теләүе менән кеүек уңғандарға буш ятмаҫҡа мөмкинлек бирә. Машинаны ятраһаң, уның файҙаһын да күрә белергә кәрәк.

**Йәмил БАЙТУРИН.**

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## "Мөғжизәгә килә ышанғым..." ти шағир. Ә һеҙ уға ышанаһығыҙмы? Яңы йыл һеҙгә ниндәй мөғжизәләр килтергәне бар?

**(Башы 1-се биттә).**

***Зөлфиә ИСРАФИЛОВА, хужабикә, Стәрлебаш районы:*** Паспортта йәш арткан һайын, Яңы йылдыҡына ғына түгел, ә, ғөмүмән, мөғжизәгә ышаныс кәмей. Шулай ҙа быltырғы Яңы йыл миңә ҙур мөғжизә алып килде. Өлкән ҡыҙым уҡыу йортон тамамлағас, сит илгә эшкә китте. Бер йылға тип юлланғайны, килеп тыуған хәл-ваҡиғалар тыуған йортонан биш йылға айырҙы баламды. Йыл һайын уның ҡайтырын көттөк, ләкин йәйы сыҡманы. Былтыр ҙа ҡайтырына өмөтөмдө өҙөп, Яңы йыл ҡаршыларға күңелһеҙ генә әҙерләнә башланым. Уның ҡарауы, ирем, улым һәм бәләкәс ҡыҙым ниндәйҙер ҙур күтәренкелек менән байрам ҡаршыларға йөрөйҙәр кеүек тойолдо. Күптән ҡуйылмаған ҡупшы шыршы өй түренә инеп ултырҙы, стенала ғаилә фотоһүрәттәренән торған стенд барлыҡҡа килде, ҡыҙым өҫтәлгә әллә нисә төрлө салат рецепты сығарып һалды, ирем менән улым ихата тирәһен ялтыратып ҡуйҙы, үҙҙәре шыш-быш һөйләшәләр. Аптыраһам да, әллә ни әһәмиәт бирмәнем.

31 декабрь иртән иртүк ҡыҙым менән байрамса өҫтәл әҙерләй башланыҡ, мунса тоҡандырып ебәрҙек. Көн төшкә ауышҡан мәлдә, юҡ йомошто бар итеп, ирем менән улым район үҙәгенә сығып китте. Өйҙә әүеш-теүеш иткәс, мунсаны ҡарарға тип сығып барһам, ҡапҡанан минең Америкалағы ҡыҙым инеп килә! Аптырауҙан ҡулымдағы биҙрәм төшөп китте. Ул "әсәй" тип килеп ҡосаҡлап алғанда ла иҫемә килә алмай тора инем әле. Уның бер үҙе генә түгел, ә буласаҡ кейәүҙе лә алып ҡайтыуынан икеләтә шаҡ ҡаттым. Бына ошондай мөғжизә килтерҙе былтырғы Яңы йыл. Шуға, бына әле лә ниндәйҙер мөғжизә көтөп, байрамға әҙерләнәм. Атай-әсәй өсөн ана шул ситтә йөрөгән балаларҙың ҡайтып төшөүе һәр саҡ мөғжизәләй, иң татлы бәхеттәй ҡабул ителә инде ул. Шулай булһын һәр саҡ!

***Шәһит ХАММАТОВ, М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актеры:*** Ҡыш - иң яратҡан миҙгелем. Яңы йыл иһә иң яратҡан байрамым. Ап-аҡ ҡар менән ергә ергә сафлыҡ килә, ниндәйҙер мөғжизә булырына ышаныс та арта. Мөғжизәгә ышанмайынса йәшәүе лә күңелһеҙ. Бигерәк тә Яңы йыл алдынан була торған мөғжизәләр көтөү тойғоһо күңелгә рәхәтлек бирә. Яңы йыл ҡаршылауға ваҡыт әҙерәк ҡалған һайын, кешеләрҙең йөҙө көләсләнә бара. Урамдар байрамса мәшәҡәткә сумған халыҡ менән тула. Кинәт "бәләкәсәйеп" киткән ололар йүгереп йөрөп бүләк хәстәрләй, һәр өйҙә күңелле ығы-зығы башлана. Былар ҙың барыһы ла мөғжизәгә булыуына ышанысты арттыра ғына.

Бала саҡта ниндәй мөғжизәгә өмөт иткәнлегенде аңлатып та булмай, ләкин түҙемһеҙләнеп Яңы йыл етеүен көтәһең. Үҫкән һайын уның сиктәре аныҡлыраҡ һиҙемләнә, өмөттәрең асығыраҡ һынлана, һине бәхетле итер мөғжизәне күңелеңдә үҙең формалаштыраһың да, шуны көтә башлайһың. Ә изгелектәр ҡылыу, ярҙамсыл булыу, атай-әсәйҙәрҙе онотмау, зарланмай йәшәү тылсымдың юлын асыусы төп сифаттар, тип һанайым.

Әгәр ҙә кеше мөғжизәгә ышана икән, тимәк, уның күңеле ҡатмаған, йөрәге туңмаған. Ә мәрхәмәтлелек, бигерәк тә бөгөнгө заманда, үҙе үк ҙур мөғжизә. Шуға күрә, дуҫтарым, мөғжизәгә ышанайыҡ, һәм ул мотлаҡ килер! Сәғәт төнгө 12 һуҡҡандан һуң да тылсымлы ваҡиғалар көтөүҙән туҡтамайыҡ, сөнки һәр яңы көн үҙе үк ғәжәйеп мөғжизә.

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ЭСӘР ҺЫУ КЕҮЕК КӘРӘК...



**Яңы йыл алдынан уҡыусылары күңеленә тура юл тапҡан "Киске Өфө" гәзите адресына ла хуплау һәм рәхмәт һүҙҙәремде еткергем килә.**

Яңы йыл байрамының ғәҙәте шул: һәр кем "Бәхет" тигән мөғжизәгә өмөт итә, инде күптән хыялланa белмәгәндәрҙең ҙә күңелендә яҡты бер нур балҡышы баҙлап китә. Ә "Киске Өфө" гәзите аҫыл һүҙҙәре, кәңәштәре аша үҙ уҡыусыларына ысынлап та хыял ҡанаттары үҫтерә. Һәр һанында тиерлек бәхетле булырға, уның өсөн күңел ҡоҙоғона күҙ һалырға өйрәтә, "Күңел төпкөләндә һине бәхетле лә, аҡыллы ла, иманлы ла, уңышлы ла итерҙәй ҡус, ихтыяр көсө ята, уят, файҙалан уны", тигәндә еткерә. Гәзиттең шул ишараһын аңлағандар бәхеттең үҙ янында икәнен, уны үҙ ҡулдарың менән булдырырға кәрәклеген инде күптән аңына һеңдергән. Мин үҙем инде 15 йыл иң яҡын дуҫым итеп, өйҙәш, фекерҙәш, яҡын дуҫ итеп алғанмын был баҫманы. Үҙем дә әллә ни бер ҡатлы, еңел әҙәм түгелмен, әммә баҫмаНың аҡыл һандығы миңә эсәр һыу кеүек кәрәк. Һәр һанында үҙемә йәшәйеш йүнәлеше, һорауҙарыма яуап табам. Юғары фекер ҡеүәһенә эйә булған зыялылар менән диалогтар, әңгәмәләр - үҙе бер белем, аҡыл, тарих китабы һымаҡ. Кемдер әйтмешләй, "Киске Өфө" биттәрендә сығыш яһаусы шәхестәребеҙҙең аҫыл фекерҙәре милләттәштәребеҙ өсөн - йәшәү программаһы, ә ил, республика өсөн милли идея булырлыҡ кимәлдә".

"Киске Өфө" халҡыбыҙ араһындағы иң өлгөлө ғаиләләрҙе эҙләп табып, уларҙың тәрбиәүи алымдарын еткерә. Балаларҙы, йәштәрҙе, ололарҙы тәрбиәләр төрлө ысулдар, алымдарға мөрәжәғәт итә. Яңы йыл республикала Ғаилә йылы тип нарыҡлана, тинеләр. Бына күрерһегеҙ, "Киске Өфө" үҙе бер тәрбиә мәктәбе булған ысын башҡорт ғаиләһе һабаҡтарын тағы ла әүҙемерәк яҡтыртасаҡ үҙ биттәрендә. Бер һүҙ менән әйткәндә, әйҙәгеҙ, "Киске Өфө"лә булып ҡаршылайыҡ яңы 2018 йылды ла. Яңы йыл менән!

**Зөлфиә СИБӘҒӘТУЛЛИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов республика халҡын яңы 2018 йыл менән ҡотланы. Унан алда Рөстәм Зәки улы 2018 йылды Ғаилә йылы итеп нарыҡлау тураһында Указ ҡабул итте. Документ Рәсәй Президентының "Рәсәй Федерацияһында Балалыҡ ун йыллығын иғлан итеү тураһында"ғы Указына ярашлы төҙөлдө һәм дәүләт ғаилә сәйәсәтен камиллаштырыуға, ғаилә институты абруйын нығытыуға һәм уға ярҙам итеүгә йүнәлтелде. 2018 йыл Рәсәйҙә Ирекмәндәр йылы тип иғлан ителде.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов баш ҡала халҡын һәм ҡунаҡтарын Яңы йыл һәм Раштыуа байрамдары менән ҡотланы. "Яңы йыл яңы ҡаҙаныштар, үҙ-ара аңлашыу һәм аралашыуҙан тыуған шатлыҡ, һәр өйгә бәхет алып килһен!" тине Ирек Ишмөхәмәт улы.

✓Мәскәүҙә ВДНХ павильонында "Берҙәм Рәсәй" партияһының XVII съезы эшләне. Уның төп темаһы - 2018 йылдың 18 мартында Рәсәй Федерацияһы Президентын һайлау. Башҡортостандан партия форумында 18 һайланған делегат сығыш яһаны. Делегацияны Башҡортостан Башлығы, "Берҙәм Рәсәй" партияһының Юғары Советы ағзаһы Рөстәм Хәмитов етәкләне.

✓Яңы йылға тиклем республикала тағы өс спорт объекты файҙаланыуға тапшырыла. Ул - 2018 йылғы футбол буйынса донъя чемпионатына тәҙәлгән уҡыу-күнекмә базаһы. Тағы ла ике спорт объекты -Туймазыла: "Туймазы-Арена" спорт боҙ комплексының икенсе сиратын төҙөү тамамлана. Шулай уҡ Ҡандра ауылында ла яңы физкультура-һауыҡтырыу комплексы асыла.

✓Яңы йыл каникулдарында Өфөлә боҙ ҡаласыҡтары буйлап теләүселәрҙе бушлай йөрөткән экскурсия маршруттары һәм метробустар хәрәкәте эше ойошторолған. Экскурсия автобустары хәрәкәте Конгресс-холдан башлана һәм шунда тамамлана: 30 декабрҙә экскурсия - көндөҙгө 3-тә, 1 ғинуарҙа - көндөҙгө 3-тә, 2-8 ғинуарҙа иртәнге 12-лә һәм көндөҙгө 3-тә башлана. Метробустар хәрәкәте "Ленин исемендәге майҙан"дан ("Кала советы") башлана һәм шунда тамамлана. Метробустар ике йүнәлештә йөрөй - ҡаланың көньяҡ һәм төньяҡ өлөшөнә.

КҮҘМӘ-КҮҘ...

# "МИН КИҢ МӘҒЛҮМӘТ САРАЛАРЫ ЯҠЛЫМЫН..."



**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Зәки улы Хәмитовтың республика һәм муниципаль киң мәғлүмәт саралары баш мөхәррирҙәре менән осрашыуы булып үтте.**

"Бөгөнгө һөйләшеүебеҙ мөмкин тиклем формаль булмаған форматта үтһә ине. Һеҙ, моғайын, алдан ниндәйҙер һорауҙар әҙерләгәнһегеҙҙер. Уларҙы ситкә ҡуйып, миңә ысын күңелдән үҙегеҙҙе ҡыҙыҡтырған һорауҙар бирергә тырышығыҙ", - тигән теләк белдерҙе Рөстәм Зәки улы. Ә һөйләшеүҙе башлап ебәреү өсөн иһә үтеп барған йылдың иҡтисади, социаль, мәҙәни өлкәләге ҡайһы бер күрһәткестәре буйынса рәсми мәғлүмәттәр килтерҙе. Ул рәсми мәғлүмәттәр артында, әлбиттә, халыҡтың кәйефе, уларҙың ризалығы йә ризаһыҙлығы сағылдырыла икәнен беләбеҙ. Ә быныһы инде, республика Башлығы билдәләүенсә, төрлө социологик һорау алыу мәғлүмәттәрендә күренә һәм был мәғлүмәттәр Башҡортостан халҡының иҡтисади кәйефе дөйөм алғанда насар булмауын күрһәтә.

- "Һуңғы ярты йылда матди хәлегеҙ үҙгәрҙеме" тигән һорауға респонденттарҙың 66 проценты йә яҡшырҙы (10 процент), йә үҙгәрмәне тип яуаплаған, - тине Рөстәм Зәки улы. - Был һан буйынса хәҙер Рәсәй Федерацияһында 12-се урында торабыҙ. Бөтәһе 85 субъект. Беҙҙән һуң был һорауға киҫкен яуап ҡайтарған 73 субъект килә. Бөтәһе лә уңышлы һәм һәйбәт тип әйткем килмәй. Әлбиттә, улай түгел, хәл ителмәгән мәсьәләләр байтаҡ. Беҙҙең көндәлек эшебеҙ бик күп темаларҙы сисеүгә йүнәлтелгән. Дөйөм алғанда, ил дә, республика ла алға бара. Кемгәлер был хәрәкәт тиҙлеге яй, аҡрын күренә, әммә ул бар һәм был факт. Быны инҡар итергә ярамай.

Әлбиттә, журналист республикала, илдә, донъяла барған бар ваҡиғаларҙың уртаһында итеп тоя үҙен һәм уның күңелендә, телендә тыуған һорауҙарға яуаптарҙы ла ул аҙмы-күпме сырамыта булыр. Шуға ла республика Башлығы дәрәжәһендәге етәкселәр менән осрашҡанда журналист тарафынан барыбер ҙә яуабын белеп етмәгән, икеләнгән йәки белгәнен аныҡлаштырырға теләгән һорауҙар бирелергә тейеш ине, тип аңлайым. Үҙем, мәҫәлән, был осрашыуға килер алдынан өс һорауҙы күҙҙә тоттом. Яуаптарын аныҡлаштырырға теләнем.

**Уның беренсеһе, әлбиттә, үҙемдең тыуған яғымда, хатта тыуған ауылым янында урынлашҡан Торатау тураһында булырға тейеш ине. Сөнки тау тирәләй тағы төрлө имеш-мимештәр ҡуйыра, яҡташтарым "Торатауҙы емерергә биреп кенә ҡуйырҙармы инде?" тип хафаланыуҙан туҡтамай.**

Борсоуҙарын баҫыу өсөн төркөм-төркөм булып йыйылып, тауыбыҙ янына барып ҡорбан салыуҙар, йыйылып, сығыштар яһап, ярһыуҙарын ҡандырыуҙар әленән-әле ҡабатланып тора. Һәр хәлдә, битараф түгелдәр. Ә шулай ҙа ошо мәсьәләлә республика етәкселәренең дә аныҡ ҡына һүҙе бик кәрәк, әлбиттә. Шуға ла ул һорауҙы был осрашыуҙа мин генә түгел, ә Ишембай районының "Торатау" гәзите баш мөхәррире Вәдүт Исхаҡовтың да күтәрергә ниәтләнеүе аңлашыла. Вәдүттең һорауына ҡаршы Рөстәм Зәки улы:" Ә кәрәкме ул Торатау Ишембай һәм Ишембай районы халҡына?" - тигән һорау менән яуапланы. "Әлбиттә, кәрәк!" тигәнде мин һәм осрашыуҙа ултырған күптәр күмәк тауыш менән күтәреп алды. Эйе, ниндәй генә төбәктә йәшәмәһен, халҡыбыҙ тауҙың изге икәнен, тәбиғәт ҡомартҡыһы икәнен белә һәм уны "Сода" өсөн сеймалға әйләндереүгә юл ҡуйырға ярамағанын хуплап, үҙ тауышын ишеттерә. Шулай итеп, һорау бирелде һәм шундай яуап алынды:

- Эйе, Башҡортостанда был мәсьәлә буйынса тейешле социологик һорау алыуҙар үткәрелде. Халыҡтың күпселеге, Торатау тәбиғәт ҡомартҡыһы, мәҙәни, археологик, геологик ҡомартҡы булараҡ кәрәк, тигән фекер әйтте. Ул, әлбиттә, Башҡортостан Республикаһы байлығы. Эйе, комбинат өсөн сеймал мәсьәләһе бик ҡатмарлы тора. Матбуғат конференцияларында был мәсьәлә бер нисә тапҡыр күтәрелде. Әле генә үткән БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай ултырышында депутат Рөстәм Әхмәҙинуров та БР тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрына ошо һорауҙы бирҙе. Мин дә шулайыраҡ яуап бирәм:

**бөгөн Торатауҙан тәбиғәт ҡомартҡыһы статусын тартып алыу өсөн хоҡуҡи нигеҙ юҡ. Был белдереү, барыһынан бигерәк, экология, тәбиғәтте һаҡлау юҫығынан барлыҡҡа килә. Тәбиғәт ҡомартҡылары бит ниндәйҙер уникаль объектты һаҡлау өсөн булдырыла. Һәм Рәсәй закондары тәбиғәт ҡомартҡыһы статусын юҡҡа сығарыуҙы күҙҙә тотмай.**

Ҡомартҡы, әлбиттә, ниндәйҙер тәбиғи сәбәптәр арҡаһында юғалыуы ла мөмкин. Мәҫәлән, ниндәйҙер урман тәбиғәт ҡомартҡыһы булып иғлан ителгән, ти. Янғын сығып, урман янды, юҡҡа сыҡты, ти, ул саҡта ҡомартҡы ла юҡҡа сыға. Йә Ҡыҙыл китапҡа индерелгән ниндәйҙер үҫемлектәр тора-бара юҡҡа сыҡһа, шулай уҡ ул ҡомартҡы булараҡ та юғала. Үткәрелгән тикшереүҙәргә ҡарағанда, был осраҡта Торатауҙа закон тарафынан һаҡланған бөтә нәмә, шул уҡ Ҡыҙыл китапҡа индерелгән үҫемлектәр ҙә, объект үҙе лә бар. Тимәк, Торатауҙан тәбиғәт ҡомартҡыһы статусын алыуҙың бер ниндәй законлы, хоҡуҡи варианттары юҡ. Был мәсьәләне хәл итеү өлкәһендә хоҡуҡи юҫыҡтан бер аҙым, бер миллиметр ҙа ситкә китергә ярамай.

Эйе, иҡтисади проблема бар, сеймал менән тәьмин итеү мәсьәләһен хәл итеү кәрәк, тигән аргументтар бар. Ләкин тәбиғәтте һаҡлау тураһындағы законда ла, әйләнә-тирә мөхитте һаҡлау тураһындағы законда ла, айырыуса һаҡлана торған тәбиғәт биләмәләре тураһындағы законда ла экология иҡтисадтан өҫтөнлөклө тип билдәләнгән. Шуның өсөн, менеджменттың да, милекселәрҙең дә, акцияларҙың мажоритар пакеты хужаларының да хәле ҡатмарлы. Беләһегеҙме, беҙ һәр ваҡыт Ғүмәр яткылығын эшкәртеү Торатауға альтернатива була ала, тигән фекерҙә булдыҡ. Ләкин "Башҡортостан сода компанияһы", сеймал яраҡһыҙ, тигән һылтау менән Ғүмәр яткылығынан баш тартты. Икенсенән, Файҙалы ҡаҙылмалар запасы буйынса дәүләт комиссияһы тарафынан бында химик сәнәғәт өсөн 50 млн тонна сеймал балансҡа ҡуйылған. Дөрөҫ, был документта сеймал "Башҡортостан сода компанияһы" өсөн яраҡһыҙ, уның техник шарттарына яуап бирмәй, тигән яҙыу ҙа теркәлгән. Ләкин бер урында ла һәм бер ваҡытта ла сеймал бер төрлө генә булмай. Мәҫәлән, нефть эшкәртеү заводтарын алайыҡ, улар бит еңел нефтте лә, ауыр нефтте лә эшкәртә. Барыһы ла технологик ҡоролмаларҙың көйләнешенән тора. Был осраҡта Ғүмәр яткылығында сеймал бар һәм ул химик сәнәғәттең бар талаптарына ла - составында CaCO3, магний окисы, тимер, кремний һәм башҡа матдәләр булыуы менән дә яуап бирә. Был яткылыҡтың милекселәре - "Ишембай эзбизе" ойошмаһының бер нисә сода етештереүсе илдәр менән консультацияһы күрһәтеүенсә, бөгөн донъяла сеймалға мөнәсәбәт тыныс, йәғни кальцинирланған сода өсөн теләһә ниндәй эзбизде файҙаланырға була. Бары тик тейешле технология һәм ҡоролмаларҙы көйләп алыу ғына кәрәк...

Өс сәғәт осрашыу аҙағына мин үҙемдең тағы ике һорауымды бирергә батырсылыҡ итеп, "Башҡортса һөйләшеп алайыҡ әле, Рөстәм Зәки улы", тип мөрәжәғәт иттем. "Әйҙәгеҙ, һөйләшәйек", тигән ризалыҡ ишеткәс, мәктәптәрҙә туған телде уҡытыуға ҡағылышлы теләгемде еткерҙем:

**"Һеҙ үҙегеҙҙең сығыштарығыҙҙа, туған тел иң тәүҙә ғаиләлә өйрәнелергә тейеш, тигән фекер әйтәһегеҙ. Әлбиттә, беҙ бының менән килешәбеҙ, балаһына туған телен өйрәтеү һәр атай-әсәйҙең изге бурысы. Әммә ғаиләлә туған телендә һөйләшкән бала мәктәптә лә туған телендә уҡымаһа, ул бит үҙенең туған теленән ситләшәсәк. Шуның өсөн беҙ милли мәктәптәрҙе үҫтерергә, нығытырға, хатта уларҙың һанын арттырырға кәрәк, тигән позицияла торабыҙ".**

**(Дауамы 4-се биттә).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Милли музейында "Яңы йыл менән!" күргәҙмәһе асыла. Ул музейға килеүселәрҙе Совет осорондағы яңы йыл уйынсыҡтары донъяһы менән таныштыра. Шыршы уйынсыҡтары тупланмаһына 300-ҙән ашыу предмет инә һәм XX быуаттың 30-80-се йылдарында яңы йыл уйынсыҡтары тарихын күҙәтергә мөмкинлек бирә. Уларҙы Өфө коллекционеры Владимир Буравцов тәҡдим итә.

✓Республиканың Федераль почта хеҙмәте идаралығы яңы йыл байрамдарында почта бүлексәләренең эш графигын хәбәр итте. 31 декабрҙә һәм 6 ғинуарҙа эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара. 1, 2 һәм 7 ғинуар - ял көндәре. 3, 4, 5, 8 ғинуар - ғәҙәти режим. Каникулдарҙа пенсиялар һәм пособиелар Рәсәй Пенсия фондының республика бүлексәһе менән килешеүгә ярашлы таратыла.

✓Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы яңы йыл алдынан һәм байрам көндәрендә поликлиникаларҙың нисек эшләүе тураһында хәбәр итте. Ведомствоның матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса, республика халҡына медицина ярҙамын ваҡытында күрһәтеү өсөн амбулатор-поликлиника бүлексәләре 2017 йылдың 30-31 декабрендә һәм 2018 йылдың 1-8 ғинуарында иртәнге сәғәт 8-ҙән көндөҙгө 4-кә тиклем эшләй. Саҡырыуҙар көндөҙгө 3-кә тиклем ҡабул ителә.

✓Дәүләт Думаһы һуңғы, өсөнсө уҡыуҙа 2018 йылдың 1 ғинуарынан ғаиләләргә беренсе йәки икенсе бала тыуғанда һәм уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алғанда айлыҡ адреслы түләү тураһындағы закон проектын хупланы. Ғаиләләр балаһына йәш ярым тулғансы аҡса ала. Шул уҡ ваҡытта граждандың беренсе ғаризаһы буйынса түләү бер йылға билдәләнә, ә уны оҙайтыу өсөн йәнә ғариза яҙырға кәрәк. Ул бер кешенең килеме төбәктә эшкә һәләтле халыҡтың 1,5 тапҡыр йәшәү минимумы кимәленән артмаған ғаиләләргә түләнә.

✓Учалы районының Яңы Байрамғол ауылынан 10 йәшлек Ләйсән Золотарева "Зәңгәр ҡош" телепроекты тамашасыларын һәм жюриҙы хайран ҡалдырыуын дауам итә. Был юлы "оркестр-ҡыҙ" шоу финалында Рәсәйҙең халыҡ артисы Евгений Миронов менән бергә сығыш яһаны. Артистар бергәләп Александр Пушкиндың әҫәрҙәрен һөйләне. Жюри Ләйсән Золотареваға йылы һүҙҙәрен йәлләмәне, ә алып барыусы Дарья Златопольская Башҡортостан артисына гитара бүләк итте - яҡташыбыҙ был көндө үҙенең 10 йәшен билдәләне.

КҮҘМӘ-КҮҘ...



# "МИН КИҢ МӘҒЛҮМӘТ САРАЛАРЫ ЯҠЛЫМЫН..."

(Башы 3-сө биттә).

- Мин дә шундай уҡ позицияламын, - тине Рөстәм Зәки улы. - Эйе, һәр бала үҙенең атай-әсәйенең телен белергә тейеш. Икенсенән, әлбиттә, туған телдәрҙе бар йүнәлештәрҙә лә иркеле үҫтереү өсөн шарттар тыуҙырыу мөһим. Беҙ оҙаҡламай ошо турала программа ҡабул итәсәкбеҙ, башҡорт телен үҫтереү буйынса фонд, грандтар булдырыласаҡ. Беҙ үҙебеҙгә башҡорт телен һаҡлау өсөн яуаплылыҡ алғанбыҙ. Беҙ башҡорт теленең позицияларҙы ҡаҡшауына йә насарайыуына юл ҡуя алмайбыҙ, сөнки ошонда, ошо республикала ғына был эште ойоштора алабыҙ. Һәм беҙ уны эшләйәсәкбеҙ. Әлбиттә, мин был мәсьәләнең яуаплылығын тоям, аңлайым һәм телде һаҡлау, үҫтереү өсөн ойоштороу, финанс, административ, тағы әллә күпме шарттар тыуҙырылырға тейешлегенә бар иғтибарымды йүнәлткәнмен. Былар ҙың барыһы ла аҡыллы итеп, конфликтлы ситуациялар булдырмайынса, үҙ-ара аңлашыу нигеҙендә тормошҡа ашырылырға тейеш...

**Ауылдарыбыҙҙы һаҡлау, йәшәтеү тураһындағы тағы бер һорауымды яңғыратмай булдыра алманым:**

"Бөгөн Рәсәй кимәлендә лә, беҙҙең республикала ла йәмәғәтселек институттарын тергеҙеү, граждандар әүҙемлеген көсәйтеү тураһында һүҙ бара. Ысынында, беҙҙең башҡорт халҡында элек-электән үҙойошоу күренеше ныҡлы урын алған булған. Бөгөн бына шул күҙәтелә ауылдарҙа. Властың ҡулы етмәгән күп эштәрҙе халыҡ ниндәйҙер йәмәғәт ойошмаһына берләшеп, үҙе эшләй башланы. Журналист булараҡ, республика буйлап күп йөрөлә, ауылдарҙағы рухи һәм иҡтисади көрсөк, мәктәптәр ябылыуы, эшһеҙлек, ир-егеттәрҙең эш эҙләп Себерҙәргә китеп олағыуы йөрәкте әрнетә ине. Бынан алты йыл элек ауылдарҙа шулай уҡ донъя үҙгәрештәренә борсолоп, йәне әрнеп йәшәгән битараф булмаған ҡатын-ҡыҙҙары "Ағинәй" ойошмаһына туплап, эшләй башланыҡ. Бөгөн республиканың бар райондарында ла тиерлек ағинәйҙәр ауылдарға йәм индерә, халҡыбыҙҙың йолаларын тергеҙә, экологик өмәләргә сыға, эскелеккә ҡаршы көрәшә, хатта Хәйбулла районы ағинәйҙәре ата-бабалар һөнәрҙәрен тергеҙеп, ир-егеттәрҙә шул һөнәрҙәргә ҡыҙыҡһыныу уятырға маташа. Ләкин бына ошо ағинәйҙәрҙең инициативаһы, энтузиазмы урындағы етәкселек тарафынан күтәрмәләнеп бармауы ғына аптырата..."

- Эйе, мин бындай урындағы инициативаларға булышлыҡ итергә лә, финанс яғынан ярҙам итергә лә ризамын, - тине Рөстәм Зәки улы. - Һеҙ әйткәндәр бик мөһим. Үҙойошоу, граждандлыҡ йәмғиәте, урындағы инициативалар - был бик яҡшы. Әгәр ҙә беҙ бөгөн ошоларҙы эшләмәһәк, кешеләрҙә инициатива уятмаһаҡ, алға табан аҡрын аҙымдар менән, һыныҡ һыҙыҡ буйлап хәрәкәт итеүҙе дауам итәсәкбеҙ. Миндә килеһе йылды Ғаилә йылы типме, Урындағы инициативалар йылы итепме иғлан итергә тигән дилемма булғайны. 2019 йылды Урындағы инициативалар йылы тип иғлан итербеҙ, тип уйлайым хәҙер. Урындағы инициативаларҙы хупларға, кешеләрҙе ысынлап та властың ҡулы етмәгән ошо кәрәкле эштәргә ылыҡтырырға кәрәк. Һеҙ, һис һүҙһеҙ, кәрәкле һорау күтәрәһегеҙ...

Ысынында, үҙемде борсоған ошо һорауҙарға яуап алыуымдан, дөрөҫөрәге, теләктәремде еткереп, хуплау һүҙҙәре ишетеүҙән ҡәнәғәт ҡалдым. Әлбиттә, ҡайһы бер коллегаларым биргән һорауҙарға аныҡ яуаптар алыу ҙа ҡыҙыҡлындыра ине.

**Мәсәлән, "Сибайский рабочий" гәзитенең баш мөхәррире Самат Азаматов тарафынан күтәрелгән бөгөн барлыҡ Урал аръяғы райондары халҡын борсоған мәсьәлә - Ҡытай компанияһы атҡарасаҡ цемент заводы тәҙәлешенә ҡағылышлы борсолоу-икеләнеүҙәрҙе беҙ ҙә ишетә-күрә йөрөйбөҙ бит. Берҙән, халыҡты был тәҙәлештең экологияға кире йоғонтоһо булыу-булмауы борсой, икенсенән, унда башлыса Ҡытай эшселәрен килтереп эшләтәсәктәр икән, тигән имеш-мимештәр ҡуйыра. Ә яуап шулай булды:**

- Беҙҙең территорияла экологияны бысрата торған етештереү предприятиелары тәҙәләүгә беҙ бер ваҡытта ла риза булмаясаҡбыҙ, - тине Рөстәм Зәки улы. - Экологик экспертиза яһаласаҡ, халыҡтың был тәңгәлдәге фекере иҫәпкә алынасаҡ. Халыҡ фекеренә ҡаршы барырға ярамай. Был беҙҙең бөтә эшмәкәрлеккә ҡағыла. Сибай халҡы бындай объекттар тураһындағы йәмәғәтселек тыңлауҙарында һәм фекер алышыуҙарҙа ҡатнашыр, тип уйлайым. Тәҙәлә ҡалғанда, был заводта Ҡытай эшселәре эшләйәсәк, тигән хәбәр ҙә халыҡты ҡуҙғытыуын беләм. Ҡытай белгестәре эште башлап ебәргәнсе генә эшләйәсәк, ә 90-95 процент эшсене урындағы халыҡ тәшкил итәсәк. Унан һуң, был заводты тәҙәү мәсьәләһе лә аҙағынаса хәл ителмәгән бит әле. Йәғни электр энергияһы буйынса мәсьәләне сисәһе бар. Сибай электр энергияһына былай ҙа ҡытлыҡ кисерә. Шуның өсөн тәүҙә ошо мәсьәләне хәл итергә, шунан ғына был инвестицион проекттың башҡа аспекттарына тотонорға кәрәк буласаҡ...

**Тәҙәләш, тигәндән, бөгөн республикала тәҙәлә торған йорттан торлаҡ алыуға аҡса һалып, үҙҙәрен алданған тип иҫәпләүселәр проблемаһы ла гәзәти хәлгә әүерелеп бара.**

Ундай кешеләр хәҙер өс меңгә еткән. Башҡортостан Башлығы осрашыуҙа билдәләүенсә, алданған өләшселәр мәсьәләһе республика етәкселеге өсөн өҫтөнлөклөләрҙең береһе булып тора, яҡын арала уны хәл итеү буйынса саралар күреү күҙаллана: "Торлаҡ тәҙәләшө өлкәһендә мутлашыусыларҙан зыян күргәндәрҙең өлөшө бөгөн 10 процентҡа етә. Был тема "2018 йылға күсә", уны республика ресурстары сығымдары менән хәл итергә тура килер. Беҙ бынын нисек эшләргә кәрәклеген уйларбыҙ, сөнки әлегә аныҡ ҡына ҡарар юҡ. Ләкин халыҡҡа ошо мәсьәләне йырып сығырға вәғәҙә бирәм", - тине Рөстәм Зәки улы.

**"Күптән түгел Мәскәү мэры Сергей Собянин, Рәсәй иҡтисады өсөн 15 миллион ауыл кешеһе артыҡ, улар яңы технологиялар индерелеүен иҫәпкә алғанда, етештереү өлкәһе өсөн кәрәк түгел, тигән фекер әйтте. Башҡортостандағы ауыл кешеләре лә беҙҙең иҡтисад өсөн кәрәкмәйме?" - тигән һорау бирҙе "Башҡортостан" гәзитенең баш мөхәррире Азамат Юлдашбаев.**

- Мәскәү мэры Сергей Собянин, моғайын, бөгөн ауылдарға шул тиклем күләмдә эшсе ҡулдар талап ителмәй, тип әйтергә теләгәндер. Бөгөн, киреһенсә, илдә кешеләр етешмәй. Шуға ла беҙ тыуым артһын өсөн көрәшәбеҙ. Ауылда ла артыҡ кешеләр юҡ. Тик уларҙы эш менән тәьмин итеү мөһим. Беҙ эш урындары булдырырға тейешбеҙ. Бөгөн ауылдарҙа хеҙмәт етештереүсәнлеге үҫешә. Элек 10 сәсеү комплексы эшләһә, бөгөн был эште 1 комплекс башҡара. Элек 3 комбайн башҡарған эште бөгөн 1 комбайн еңеп сыға. Бушаған эшсе ҡулдарға яңы эш биреү кәрәк. Мәҫәлән, ауыл кешеләрен хеҙмәт күрһәтеү өлкәһендә эшләүҙә лә йәләп итергә була. Ауылдарҙа ла кеше ял итә алһын өсөн кафе, ресторандар, башҡа предприятиелар булырға тейеш. Ҡайһы бер ауылдарҙа тыуған көндәрен дә кафеларҙа үткәргәндәрен беләм. Парикмахерский, стоматолог кабинеттары, ателье - былар һәр район үҙәгендә бар. Тимәк, ауылдарҙа ла цивилизациялы тормош нигеҙҙәре формалаша. Республика халҡының 38 процентын ауыл халҡы тәшкил итә икән, беҙ уларҙың нормаль йәшәйеше өсөн шарттар тыуҙырасаҡбыҙ...

**"Республика баҫмаларын уҡыйһығыҙмы, уларға ниндәйерәк баһа бирәһегеҙ?" тигәнерәк һорауға яуап ишетке килеп ултырыла ине. "Республика Башкортостан" гәзитенең баш мөхәррире Эльза Хорева ауыҙынан яңғыраны был һорау.**

- Әлбиттә, уҡыйым. Аналитик мәҡәләләрҙе, уйландыра, фекер тыуҙыра торған тәрән йөкмәткеле материалдарҙы уҡыйым. Телевизорҙан яңылыҡтар ҡарайым. Ярты күҙ менән, әлбиттә, сөнки унда гел бер төрләлөк өҫтөнлөк итә. Унда ла уйландыра торған аналитик сығыштарға ҡытлыҡ кисерелә. Бөгөн, әлбиттә, барыһында ла гаджеттарҙан, интернеттан буйһоноусанлыҡ һиҙелә. Ләкин беҙгә был буйһоноусанлыктан ҡотолоу кәрәк. Ул ауырыуға бирелмәү, нормаль, аҡыллы кеше булып ҡалыу мөһим. Һәр хәлдә, мин киң мәғлүмәт саралары яҡлымын.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баш мөхәррирҙәр менән өс сәғәткә һуҙылған осрашыуҙа һөйләнгәндәрҙең барыһы ла телгә алынмаһа ла, улар тураһында яҙып, һөйләп, үҙ уҡыусыларыбыҙға еткереп торабыҙ. Нисек кенә булмаһын, ошондай күҙмә-күҙ осрашыуҙарға етмәй икәне көн кеүек асыҡ. Рөстәм Зәки улы үҙе лә ошондай фекерҙә булыуын белдерҙе һәм: "Һеҙ ҙә иңегеҙгә оло миссия йөкмәгәнһегеҙ, кешеләр менән, йәмғиәт менән эшләйһегеҙ. Беҙҙең һүҙ ҙә әһәмиәтле, йоғонтоло, эшегеҙ ҡатмарлы. Артабан да осрашып, ошондай асыҡтан-асыҡ һөйләшеүҙәр үткәреп тороу бик мөһим", - тине ул осрашыу аҙағында.**

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔ Башҡортостандың баш ҡалаһында аэропорт яғына киткән юлда "Спутник" биҫтәһе янында ер өҫтө үткәүелен тәҙәү буйынса эштәр тамамлана. Хәҙер бында күпер эше белгестәре һәм махсуслаштырылған техника эшләй, биҙәү эштәре алып барыла. Ике яҡтан йөйәүләләр өсөн күпер йөрөй алмаған граждандар өсөн махсус лифттар менән йыһазландырылған. Үткәүелдең өҫкө өлөшө поликарбонат менән ҡапланған.

✔ Өфөлә "Башҡортостан гүзәле" матурлыҡ конкурсының финалы уҙҙы. Уҙып барған йылдың төп тажы өсөн республиканың төрлө мөйөштәренән 14 сибәркәй көс һынашты. Беренсе урынды Стәрлебаш районынан Гөлгөнә Баһаутдинова яуланы. Икенсе урында - Федоровка районынан Зөһрә Иҫәнғолова, өсөнсөлә - Хәйбулла районынан Айгөл Юнысова. Ошо өс ҡыҙ үҙҙәренең һылыулылығынан тыш, тамашасыларҙың һорауҙарына яуап биреп, отҡорлоғон да күрһәтте. Бүләк фонды ярты миллион тәшкил итте.

✔ Был шәмбелә "Ит-Фест" фестивале ике урында - Өфөнөң Көньяҡ һәм Төньяҡ өлөшөндә ойошторола. Шәмбе Конгресс-холл янындағы майҙанда - ит һәм балыҡ деликатестары йәрминкәһе, амфитеатрҙа иһә күңел асыу программаһы була. Телеүҙәктәге йәрминкәгә 13 билдәле республика етештереүсеһе - ике ҙур предприятие һәм фермер хужалыҡтары килә. Черниковкалағы Орджоникидзе исемендәге һарай майҙанында традицион ит йәрминкәһе уҙа.

✔ Дыуан районында яңы етәксе тәғәйенләнде. Ул - "Башҡортостан Республикаһының радиотелевизион тапшырыу үҙәге" Рәсәй телевизион һәм радиотапшырыуҙар селтәренең федераль дәүләт унитар предприятиеһы филиалы директоры урынбаҫары Фаил Мөхәмәҙиев, тип хәбәр иттеләр район хакимиәтенән.

✔ "Башҡортостан" дәүләт концерт залында Башҡортостан Республикаһы Башлығы шыршыһы уҙҙы. Байрамға 780 бала йыйылды. Башҡортостандың мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова балаларҙы Яңы йыл менән ҡотланы. Байрамда балалар милли брендтар менән танышты. "Яңы йыл тауышы" шоуында башҡорт айыуы, Бөрйән Бал ҡорто ла ҡатнашты. Ҙур декорациялар, сағыу костюмдар, 3D-проекция, төрлө номерҙар, йәш сәхнә йондоҙҙары Руслан Хайсаров, Фиргәт Ғарипов, Милена Сираева һәм башҡа артистар - республиканың төп шыршыһы шулай хәтерҙә ҡалды.

БАШ ҠАЛАМ

**Алыҫ Себер тарафтарында тыуып үҫһәм дә, әлеге ваҡытта Өфөлә йәшәүемә һөйөнөп бөтә алмайым. Был ҙур ҡала бөтә яҡлап та күңелемә яҡын. Ун йыл ғүмер итеү дәүеремдә ҡаланы тотошлай йөрөп сыға алмаһам да, бик күп урындарында булдым.**



# ҺИНДӘ ЙӘШӘҮЕМӘ...

## һөйөнәм, Өфөм!

Һуңғы ваҡытта ҡаланың йөҙө ныҡ үҙгәрҙе. Йәшелләндереүгә ҙур иғтибар бүленә. Таҙалыҡ йәһәтенән дә күп ҡалаларҙың танауына "сиртә" беҙҙең Өфөбеҙ. Шулай ҙа ҡайны бер әҙәмдәрҙең сүп-сарҙарын махсус урынға алып бармайынса, подъезд төбөндәге бәләкәй генә һауыттарға тығыҙлап тултырыуы аптырата ла, ғәжәпләндерә лә. Иртән ташлап китәләр ҙә, кисен балаларын алып сығып, шул тирәлә ял итеп йөрөйҙәр. Ярай ҙа, урам һепереүселәр шәп, бер нәмә ҡалдырмайынса таҙартып ҡуялар.

Быйыл йәй Өфөнөң төрлө урындарында арт-объекттар һаны артты. Ни өсөндөр беҙҙең халыҡ күпселек осраҡта һәр яңы нәмәгә ҡаршы сыға. Әлеге осраҡта ла, баш ҡала халҡы яңы арт-объект ҡалҡып сыҡҡан һайын, үҙенең ризаһыҙлығын белдерә. Ә нимәһе менән улар халыҡҡа ҡамасаулай һуң? Миңә ҡалһа, улар ҡалабыҙға йәм генә өҫтәй, йәнлелек бирә.

Һәр ҡаланың үҙенә генә хас үҙенсәлеге була. Мәҫәлән, Мәскәүҙең "Ҡыҙыл майҙан"ы, Ҡаҙандың Ҡәлғәһе (Кремель) һәм башҡалар. Беҙҙә иһә ошондай уҡ урын - Салауат Юлаев һәйкәле. Ҡалаға килгән һәр турист милли геройыбыҙға ҡуйылған һәйкәлде күреп, уның янындағы "Ватан" паркында булып китә.

Өфөлә йәйәүлеләр өсөн урам булдырыу кәрәклеге хаҡында күптән әйтәләр, ләкин был идея әле булһа тормошҡа ашырылмай. Ошо проектты башҡарып сығыу яйы табылһа, ҡалала тағы ла бер күренекле урын барлыҡҡа килер ине. Шулай уҡ Өфөнөң яңы урамдарына исем биреүҙә халыҡтың фекеренә ҡолаҡ һалыуҙары яҡшы ҡала хакимиәтенең. Исемдәргә килгәндә иһә, Башҡортостандың баш ҡалаһында башҡорт халҡының арҙаҡлы шәхестәренең исемдәрен мәңгелләштереү мөһим.

Өфө тик Киров, Совет һәм Ленин райондарынан ғына тормай. Ҡаланың башҡа райондарына иғтибарҙы арттырыу урынлы булыр ине. Мәҫәлән, Орджоникидзе районында урынлашҡан йорттар араһындағы юлдарҙың күбеһе төҙәтеүҙе көтә. Ярым емерек йорттар күплеге лә күҙгә ныҡ ташлана. Улар урындағы асарбаҡтарҙың йыйылыр урынына әйләнеп бөткән. Ярыҡ тәҙрәле, стеналары ҡубып төшөп торған бындай йорттар янында күп ҡатлы, заманса, төҙөк йорттар ҙа бәҫһеҙләнә кеүек. Емерек йорттарға килгәндә, уларҙы хатта үҙәк урамдарҙа ла осратырға мөмкин. Мәҫәлән, Аксаков урамы буйлап барған һәр кеше бындай йәмһеҙ күренешкә шаһит.

Маршрут таксиҙар тураһында ла әйтеп үтергә кәрәк. Ни өсөн Октябрь проспекты буйлап бер-береһенең маршрутын ҡабатлаусы ярым буш автобустарҙың иҫәбе-һаны юҡ, ә, мәҫәлән, Комсомол урамы аша йәки МВД мәктәбе яғына улар бик һирәк йөрөй? Ошо мәсьәләне нисектер көйләү ҡалабыҙҙа йәшәүҙе тағы ла уңайлыраҡ итер ине.

"Аҡбуҙат" ипподромын яратам. Ситтән килгән ҡунаҡтарымды, тура килгәндә, һәр ваҡыт ат сабышын күрһәтергә алып барам. Әгәр ҙә ат сабышы булмаған көнгә тура килһәк, атта йөрөтөп алып ҡайтам. Барыһына ла оҡшай бындай ял.

Өфөнөң барлыҡ парктары ла тик маҡтауға лайыҡ. Ҡараулы, йәйҙәрен йәшелеккә төрөнөп, ҡыштарын аҡҡа сорналып ултырған йөҙйәшәр ағастар араһында һәр кем төрлө миҙгелдә лә күңеленә ятышлы шөғөл таба ала. Бында тәмле сәйҙәр эсергә лә, ҡымыҙҙан ауыҙ итергә лә мөмкин. Балалар өсөн майҙансыҡтар һәм аттракциондар ҙа ҡаралған күп парктарҙа. Халыҡты алдап булмай, күңеле ятмаған ергә ул йөрөмәй. Ә парктарҙа һәр саҡ кешенең күп булыуы уларҙың популяр урын булыуын асыҡ дәлилләй.

Бына ошондай күп төрлө, шул уҡ ваҡытта һәр урамы таныш һәм яҡын Өфө. Артабан да үҫ, ҡеүәтлән, һәр яҡлап алдынғылар рәтендә бул.

**Рәфил ЗАМАНОВ.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ҠАР КӨРӘЙЕК!

**Арбаңды - ҡыш, санаңды йәй әҙерлә, тигән мәҡәлде иҫкә төшөрөп, әле ҡар күп булмағанда, былтыр уның Яңы йыл байрамдарында һәм унан һуң ер өҫтөн күмеп ҡуйыу тәжрибәһенән сығып, "Ҡар яуғандан һуң, көрәк тотоп, исмаһам, йорт ихатаһында машинаң ултырған урынды көрәп ҡуйырға ни ҡамасаулай? Ни өсөн халыҡ граждандарлыҡ әүҙемлеге күрһәтмәй?" тигән һорауға яуап эҙләйбеҙ. Бөгөн уға Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН яуап бирә.**

- Быйылғы ҡыш ысын ҡышҡа оҡшамаған: ҡарҙары ла, бурандары ла юҡ. Әммә алда тағы ла ике ай ярым ваҡыт бар һәм коммуналь хеҙмәттәр эшһеҙ ултырмаҫ, тип уйлайым. Шулай уҡ баш ҡала былтырғы ҡар коллапсын да кисермәҫ тигән өмөттәмен. Тик һуҙем был турала түгел. Былтыр ҡала хеҙмәттәренең ҡар таҙартыу эшен башҡарып сыға алмауҙары тураһында бәхәстәр күп булды. Ләкин социаль селтәрҙәрҙә ултырып, төкөрөктәрен сәсә-сәсә мәрияны тәнҡитләүселәргә ярты сәғәткә булһа ла гаджеттарынан айырылып, йылы фатирҙарынан һәм өйҙәренән сығып, үҙ ихаталарын таҙартырға кем ҡамасауланы? Тәнҡитләргә һәр кем оҫта, шул уҡ ваҡытта ярты сәғәт саф һауала эшләп инеү бер кемгә лә зыян итмәҫ ине. Был сәләмәтлек өсөн дә яҡшы, үҙең йәшәгән йорт ихатаһы ла таҙарып ҡала.

Беҙ ҡаланан ситтә йәшәйбеҙ, шуға күрә шәхси ихатаны, йорт алдын үҙебеҙ таҙартабыҙ һәм бынан бары тик оло ҡәнәғәтләнеү генә алабыҙ. Әйткәндәй, был эш төрлө кире уй-фекерҙәрҙән арындырып ҡына ҡалмай, бушлай фитнес та, бер ниндәй клубтар ҙа кәрәкмәй.

Минеңсә, хәҙер ҡаланан ситтә йәшәүселәр әүҙемерәк. Улар барлыҡ проблемаларын чиновниктар килеп хәл итеренә өмөтләнмәй. Мәҫәлән, беҙҙең Жилин ауылында, үҙебеҙ аҡса йыйып, машина табып, асфальт ҡалдыҡтарын һатып алдыҡ һәм юлдарҙы рәтләп ҡуйҙыҡ. Ауыл менән аҡса йыйып, балалар өсөн майҙансыҡ эшләнек һәм хәҙер ул төрлө күңел асыу сараларын үткәреү урыны булып тора. Алдағы йылға ла пландарыбыҙ бар. Шуға күрә, күктән бәхет яуыуын көтөп йәки район, ҡала хакимиәтенә генә ышанып ятыуҙан мәғәнә юҡ. Беҙ йәшәгән урыныбыҙ, уның тирә-яғы өсөн яуап бирергә тейешбеҙ, шул ваҡытта аҡса түләйбеҙ икән, тейешле хеҙмәтләндереү ҙә талап итә белергә тейешбеҙ.

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ШЫРШЫНЫ ХӘҮЕФҺЕҘ БИҘӘНДЕРӘЙЕК!

**Йәшел шыршы - хуш еҫле һәм тәбиғиме ул, әллә яһалмаһымы - Яңы йылдың иң төп символы булып тора, унһыҙ тейешенсә байрам кәйефе лә тыумайҙыр. Яңы йыл байрамдарында көтөлмәгән күңелһеҙ осраҡтарға тарып, кәйефтәрегеҙ боҙолмаһын өсөн, ҡайһы бер иҫкәртеү саралары хаҡында ҡыҫҡаса ғына кәңәштәребеҙгә ҡолаҡ һалһағыҙ ине, ҡәҙерле уҡыусыларыбыҙ.**

Иң тәүҙә шыршы һайлау хаҡында бер-ике һүҙ. Әгәр уның яһалмаһына өҫтөнлөк бирәһегеҙ икән, утҡа сыҙам материалдан эшләнгәнен һайлағыҙ. Унан пластик тауарҙарға хас еҫ аңҡып тормаһын. Полипропилен шыршылар составында зыянлы матдәләр булыуын да иҫтә тотоғоҙ, сөнки улар әкренләп туплана барып, торлаҡ һауаһын, кеше организмын ағыулау ихтималы бар. Ҡытайҙың лавсан шыршыларына ла ҡыҙыҡмағыҙ: улар тиҙ тоҡаныусан һәм бик шәп яна. Гирлянда сылбырынан ут сығып, ҙур янғын була күрмәһен. Тәбиғәт һөйөүселәр хуплап бөтөрмәһә лә, тәбиғи шыршы яҡшыраҡ, әлбиттә. Тик уны ла һайлап ала белергә кәрәк. Бының өсөн уның бәләкәй генә ботағын һындырып ҡарағыҙ: еңел һынып, мурт булһа, тимәк, ул күптән киҫелгән. Йәш үлән төҫөндәге хуш еҫе әнәләне алығыҙ. Әйтелеүенсә, гирляндалар менән дә һаҡ булығыҙ. Хаҡына ҡарамай, сәнәғәт етештереүе продукцияһына өҫтөнлөк биреү дөрөҫ булыр. Лампочкалары сылбыр ыңғайына тоҡаныусан, 12 Вт көсөргәнешле, ҡеүәте 25 ваттан да артмаһын.

Йыш ҡына хәүеф сығанағына әүерелеүсән тағы бер яңы йыл символы - пиротехника менән үтә һаҡ булырға кәрәклекте лә хәтерегеҙҙән сығармаһағыҙ һәм ошоға бәйле айырыуса бала-сағаны ныҡ иҫкәртеп торһағыҙ ине. Бенгал уттарын, фейерверк һәм башҡа шартлаҡтыс тауарҙы сауҙа селтәрҙәренең һатыу лицензияһына эйә булған махсус магазиндарынан ғына алығыҙ. Арзан хаҡына ҡыҙығып, уларҙы урам киоскыларынан йә булмаһа, осраҡлы кешеләр ҡулынан һатып алыуҙан тыйылығыҙ. Сит илдән килтерелгән тауарҙың рус телендә бирелергә тейешле инструкцияны барлығы-юҡлығы менән ҡыҙыҡһынығыҙ. Унда шулай уҡ тауарҙы ҡулланыу буйынса кәңәштәр, һаҡлау шарттары, әҙерләп сығарылған айы, йылы, ҡулланыу мөҙҙәте, етештереүсе предприятиеның атамаһы, реквизиттары һәм сертификаты хаҡында тулы мәғлүмәт булырға тейеш. Һаҡланыу сараларына ҡарамаҫтан, ниндәй ҙә булһа бәләҡазаға тарыған хәлдә, Ҡотҡарыу хеҙмәтенең берҙәм телефоны буйынса был турала кисекмәҫтән хәбәр итегеҙ: 112. Ә иң яҡшыһы - байрамдарыбыҙ матур үтһен, иҫән-һау сәләмәт булайыҡ!

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Матур булайыҡ

❖ С витаминын организмға ҡартайырға ирек бирмәй. Етмәһә, вареньс ашарға яратһағыҙ, уны лимон менән кивинан ҡайнатып алығыҙ. 1 кг киви, 1 лимон, 1 лимон һуты, 900 грамм шәкәр. Лимонды щетка менән йыуып, йоҡаҡ итеп турарға. 100 грамм шәкәр һәм 100 мл һыу менән бергә кәстрүлгә һалырға, 10 минут бешерергә. Кивины таҙартып, түңәрәкләп ҡырҡып, кәстрүлгә өҫтәргә. Лимон һуты менән ҡалған шәкәрҙе ҡушырға. Ҡайнау хәленә еткерергә. Керамика һауытҡа ҡойорға ла, тоңғолоҡҡа бүлмә температураһында ҡалдырырға. Икенсе көнөнә вареньены кире кәстрүлгә һалырға, 20 минут ҡайнатырға, болғап торорға. Стерилле банкаларға һалырға, һыуынғас, ҡараңғы һалҡын урынға ҡуйырға.

### Иммунитет өсөн

❖ Иртән гәҙәти сәй урынына корица ҡушылған сәй эсегеҙ. Ул организмды таҙарта һәм иммунитетты нығыта. Ҡайнар һыуға 1 киҫәк лимон һәм бер семтем корица һалырға, һыу бер аҙ һыуынғас 1 ҡалаҡ бал болғатып эсәбеҙ.

❖ 2 лимондың тышын ҡырғыста ҡырырға, 200 грамм шәкәр ҡушып болғатырға. 4 лимондың һутын һығырға, шәкәрҙе ҡушып, болғатырға. 4 йомортҡаны вилка менән күпертмәй генә туҡырға, һутҡа өҫтәргә һәм ярты сәғәткә ултыртып торорға. Һәҙәргә һәм кәстрүлгә ҡойорға, 40 грамм аҡ май өҫтәргә, талғын утта 3-5 минут ҡуйырғансы ҡайнатырға. Һыуытырға һәм һыуытҡысҡа ҡуйырға. Лимондың ҡабығында С витамины күп, ул капиллярҙарҙың торошон яҡшырта. Лимон бауыр эшен көйләй, йомортҡала холин бар, ул шулай уҡ бауырға файҙалы. Аҡ майҙа А витамины күп. Был лимонлы майҙы вирустар әүҙемләшкән мәлдә ҡулланыу тағы ла яҡшы.

### Тире ҡоро булһа

❖ Тире ҡоро булып, ярылып торһа, ярты стакан һыуҙа 3 ҡалаҡ глицерин, бысаҡ осонда ғына бура (натрий тоҙо), 1 балғалаҡ нашатыр спирты һәм бал өҫтәп, иртәле-кисле тирегә һөртөргә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Яңы һуғышҡа әҙерләнеү

Бәҙәр һуғышынан һуң Мәҙинәлә йәшәүсе монафиҡтар ҙа, йәһүҙи динен тотоусылар ҙа борсола башлай. Мөхәммәт бәйғәмбәр яҡлыларҙың көсәйеүен теләмәй улар. Көстәрен берләштереп, Мәҙинә халҡы араһында ҡотҡо эшмәкәрлеген әүҙемләштерәләр, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе яҡлашҡан осраҡта Мәҙинә оазисы бөтөнләй юҡҡа сығасаҡ, тип янайҙар.

Мәккәнең үҙендә иһә еңелеүгә ҡайғыралар, тик ҡурҡыуға бирелмәйҙәр. Киреһенсә, барыһы ла мосолмандарға ҡаршы көрәшкә дәррәү ҡаршы сығырға теләк белдерә. Бөтән нәселдәр ҙә ҡарымта үсе менән яна.

Әбү Джәхел һәләк булғандан һуң ҡөрәйш ырыуы аҡһаҡалдары менән нәсел башлыҡтары Әбү Суфиянды үҙҙәренең юлбашсыһы итеп таный. Ә ауырып ятҡан Әбү Ләһәб Бәҙәр һуғышындағы ҡыйралыш тураһында ишеткәндән һуң бер нисә көн үткәс, донъя ҡуя. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең уны ҡәһәрләүе ысынбарлыҡҡа тура килә - бик ауыр үлемгә дусар була ул. Ниндәйҙер билдәһеҙ ауырыу арҡаһында терелә серей, туғандары, уның ауырыуы йоғошло тип уйлап, янына килергә лә ҡурҡа.

Һәләтле һәм тәжрибәле яу башлығы Әбү Суфиян Бәҙәр һуғышы тураһында уйланып, шундай һығымтаға килә: ҡөрәйш мәжүсиҙәре яугирҙары Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең көстәрен баһалап еткермәү арҡаһында ҡырыла. Шуға күрә, нәсел башлыҡтарының тиҙерәк барып үс алырға кәрәклеге тураһындағы талаптарын кире ҡағып, һуғышҡа ныҡлап әҙерләнә башлай. Тәжрибәле яугирҙар Мәккә ирҙәрен йыйып, ҡорал менән эш итеү һөнәрен камиллаштыра, аттары булғандарын һыбай, ҡалғандарын йәйәү сафтарҙа һуғышырға өйрәтә. Яу төркөмдәре башлыҡтарын билдәләгәндә нәселенең затлығына, байлығына түгел, ә хәрби тәжрибәһенә өҫтөнлөк бирелә. Мосолмандарҙан ҡурҡмауын һәм үҙҙәрен еңелеүсе тип танымауын күрһәтеү өсөн ике йөҙләгән кеше менән Мәҙинә оазисына барып һөжүм итә лә, финик ағастарын киҫләп яндыра, юлда осраған бер нисә мосолман да үлтерелә. Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәскәре менән уға ҡаршы сыға, тик ҡөрәйш мәжүсиҙәренең яугирҙары был ваҡыт кире боролоп ҡайтып киткән була. Мосолмандар уларҙы ҡыуа төшә, тик тап итә алмай.

Мосолмандар иһә Мәҙинәлә бик ныҡ көсәйә, үҙҙәре менән барыһын да иҫәпләшергә мәжбүр итә. Бер тапҡыр ҡойнаҡ (Бану Ҡайнуҡа) ырыуының йәш кенә ир кешеһе мосолман ҡатынын шаяртырға уйлай - теге ултырған ваҡытта итәген энә менән яғаһына эләктереп ҡуя. Мосолман ҡатыны урынынан торғанда итәге күтәрелеп, арт яғы күренә. Ҡойнаҡ ирҙәре ҡысҡырып көлә башлай. Быны иман нигеҙендә тәрбиә алған мосолман егете күреп ҡала ла, был күренеште ҡатынға ҡарата мәсхәрәләү тип һанап, көләп торған йәһүҙиҙәргә ташлана. Һуғышта һәләк була ул, ләкин ҡатынды мәсхәрәләүсе ирҙе лә үлтереп өлгөрә.

**(Дауамы бар).**

ӘЙТӘГҮР!

# ЯҢЫ ЙЫЛ ҺҮҘЕ...

## сабыйҙар телендә һәм...



**Яңы йыл байрамы хужаһы Ҡыш бабай барлығына бәләкәстәр ышанамы? Уны ниндәй итеп күҙ алдына килтерә? Унан бүләккә нимә һорай? Был һорауҙарға яуапты түбәндә табырһығыҙ.**

***Гүзәл МАНАПОВА, 4 йәш:*** Ҡыш бабай беҙгә боландарҙа килә. Әллә аттамы икән? Мин күргәнем юҡ былай. Тик уның бүләктәр һала торған ҙур санаһы барҙыр, тип уйлайым. Ҡыш бабайҙың һаҡалы ныҡ оҙон һәм ул ап-аҡ. Ҡыш бабайҙың курткаһы күк йәки ҡыҙыл төҫтә һәм ул ергә тейеп тора. Мин магазинда ундай кейем күргәнем юҡ, уға әсәһе тегеп биргәндер, моғайын. Быймаһы ла ҙур. Билендәге ҡайышы бауҙан эшләнгән. Хәтәр ҡыҙыҡ бабай ул. Тағы ла уның матур ғына Ҡарһылыуы бар, беҙҙең балалар баҡсаһындағы тәрбиәсегә оҡшап тора. Кем атай-әсәһен тыңламай, ныҡ шаяра, уларға бүләк эләкмәй. Робот-эт алғым килә бүләккә, тип хат яҙып һалдым Ҡыш бабайға, шуға атай-әсәйемде тыңлап ҡына йөрөйөм әлегә. Илсаф ҡустыма машина һораным. Өйҙә уйынсыҡтарҙы йыйырға кәрәк һәр ваҡыт. Атайым йәки әсәйем иҙәндә ятҡан уйынсыҡҡа баҫып, аяғын ауырттырһа, "Гүзәл уйынсыҡтарын йыймай", тип Ҡыш бабайға әйтергә мөмкиндәр. Ә ул асыуланһа, күүүп итеп ҡар яуҙыра, көндө ныҡ һыуыта һәм беҙ тышҡа сыға алмайбыҙ. Өләсәйем: "Ҡыш бабай әҙерәк ауырыған, шуға быйыл ҡар оҙаҡ яуманы", - ти. Бал менән сәй эсер кәрәк уға, мин гел шулай итәм.

***Искәндәр УСМАНОВ, 5 йәш:*** Ҡыш бабай бар, мин уны күрҙем. Тик ул ҡышҡыһын терелә лә, яҙ еткәс, кире мәмерйәһенә инеп, үлеп ятып тора. Ҡыш бабай ҡарҙан эшләнгән, шуға йәйгеһен ҡояш ныҡ ҡыҙҙырғас, ireп бөтмәҫ өсөн мәмерйәһенә инеп китә. Ул ирәһә, мин илайым да ҡуям, сөнки ул һәйбәт бабай. Минең олатайыма оҡшаған. Өйөбөҙгә Ҡыш бабай килә, тиһәләр, олатайым тиҙ генә сығып китә. Ул бәләкәй сағында шыршы уйынсығын ярған, шуға Ҡыш бабайҙан ҡурҡа. Быны миңә өләсәйем әйтте.

Әле мин ун ғына хәреф беләм. Шуларҙан Ҡыш бабайға хат яҙҙым. "Бөтә нәмә аңлашылып тора", ти әсәйем. Улай булғас, мин һораған машина уҙышыу трассаһын шыршы төбөнә һалып китер, тип көтөп йөрөйөм. Ҡустым минең трассаға талашмаһын өсөн, уға ла шундайҙы килтерергә заказ бирҙем. Эх, ҡасан ғына ҡар ҡоймаһы бейеклек көрт һала инде, шул ваҡытта Ҡыш бабай киләсәк бит.

***Нурия ӘМИНЕВА, 3 йәш:*** Ҡыш бабай миңә кәнфит һәм мандарин бирә. Уның тылсымлы таяғы бар, шуға ул бөтә балаларға ла теләгән бүләктәрен эшләп бирә ала. Әлегә тиклем мин Ҡыш бабайҙы күргәнем юҡ. Былтыр өйгә килгән, ә мин ул ваҡытта йоҡлаған булғанмын. Шуға быйыл иртәрәк килһен ине, тип теләйем. Йәнһүрәттәге Ҡыш бабайҙың сәсе лә, һаҡалы ла, ҡаштары ла ап-аҡ. "Ҡыш бабай - минең кеүек ҡарт бабай", ти олатайым. Ә ни өсөн улай булғас Ҡыш бабай күҙлек киймәй икән? Күҙе күрмәйенсә, бүләктәрҙе бутап бөтмәһә ярар ине, тип ҡайғырам. Шыршыны күптән ултырттыҡ, башына йондоҙ ҡуйҙыҡ. Йондоҙ янып тормаһа, Ҡыш бабай өйөбөҙҙө тапмай ҡуйыуы бар, шуға уны көнө-төнө яндырабыҙ.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА тыңланы.**

## ...атайҙар телендә

**Күптәр бынан тиҫтә йылдар элек бер генә Яңы йыл байрамының да "Ант" төркөмөнөң "Яңы йыл" йырынан башҡа үтмәгәнен иҫләйҙер: олоһо ла, кесеһе лә йырланы. 2017 йылды оҙатҡанда уның авторы Алмас Ғафаров менән ҡабат шул йылдарға сәфәр ҡылдыҡ...**

➔ **Алмас, "Ҡарһылыу менән бергә Ҡыш бабай идет, Яңы йыл килә беҙгә - значит Новый год!" тигән һүҙҙәр булған йырығыҙ заманында хитҡа әйләнде. Бер яҡтан ҡараһаң, ул башҡорт телен белмәүселәргә пародия ла кеүек, икенсе яҡтан, ул һәр кемдең күңеленә хуш килде...**

- Әгәр мин үҙем сәнғәт кешеһе булмаһам, музыка, ундағы йүнәлештәр, төрҙәр һ.б. тураһында китаптар, сығанаҡтар, энциклопедиялар уҡымаһам, мин дә шулай тип уйлар инем. Әммә сәнғәттә быңдай күренештәр күҙәтелә һәм ул ыңғай ҡабул ителә. Мәҫәлән, "Кавказ әсире" фильмында Юрий Никулин солтан тураһындағы йырҙы берәй көнсығыш телендә йырлаһа, ул популяр булмаҫ ине. Ә көнсығыш музыкаһына рус телендә йырлағас, уны барыһы ла белә. Өҫтәүенә, беҙ интернациональ тәрбиә алған быуын, бар халыҡ та тигеҙ һәм тиң, тип үҫтек. Шуға, был йыр илдәге интернационаллектең бер сағылышы ла булды, хатта башҡортса белмәгән кешеләр ҙә уны йырланы. Параллель һүҙҙәрҙе ҡулланыу хатта ниндәйҙер кимәлдә башҡортса белмәүселәр өсөн әлифба булып та торҙо әле. Быйыл менән нимә әйтмәксемен - башҡорт телен һаҡлайбыҙ, уны үҫтерәбеҙ, тибеҙ икән, төрлө ысулдарҙы ла ҡулланырға кәрәк. Мәҫәлән, концерт менән Күмертау районының бер мәктәбенә саҡырғайнылар, шунда ошо йырҙы башҡарғанда хатта 1-се синыф уҡыусылары ла ҡушылып йырлап ултыра. Ә бит хәҙерге йырҙарҙың күпселеген бөгөн йырлайҙар, иртәгә онотаһың...

➔ **Үҙегеҙҙең бала сағығыҙҙағы Яңы йылдарҙың иң иҫтә ҡалғаны...**

- Мине беренсе тапҡыр Яңы йылда конькиҙа йүгереүсе костюмына кейендерҙеләр. Ул хәҙерге кеүек әҙер түгел - күк төҫтәге ябай спорт костюмы, башта бәйләнгән шапка, муйында шарф. Мин шулай кейенеп, аяҡтарым, ҡулдарым менән конькиҙа шыуған хәрәкәттәр яһарға тейешмен. Шул тиклем килештергәнмендер инде, Ҡыш бабай эргәмә килеп, эй маҡтаны, эй маҡтаны - минең танау күккә сөйәлдә. Ҡыш бабай, тигәс тә, ул замандарҙа башҡорт балалар баҡсаһы булманы, Ҡыш бабай ҙа русса һөйләшә ине.

➔ **Ә үҙегеҙҙе Ҡыш бабай ролендә һынап ҡарағанығыҙ булдымы?**

- Ҡыҙым йөрөгән 240-сы балалар баҡсаһында башҡорт төркөмө бар. Шәп төркөм, тәрбиәселәре лә һоҡланғыс. Шунда бер йыл Ҡыш бабай тапмайбыҙ, тигәс, байрамда ҡатнашырға булдым. Кейендем, һаҡал-мыйыҡ йәбештерҙем. Тамаша башланды, бер ваҡыт ҡыҙым миңә текләп-текләп ҡарай. Мине танырлыҡ түгел, күрәһең, тауыш таныш тойолалыр инде. Шулай уның Ҡыш бабайға шиғыр һөйләр ваҡыты етте. Балаларҙың һәр береһенең эргәһенә сүгәләп, уларҙы ҡосаҡлап тыңлай бит инде олатай. Ҡыҙым минең эргәгә килеп баҫты ла, шым ғына итеп: "Атай, был һинме ул?" - тип һорай. Һуңынан миңә үпкәләп йөрөнө. "Ҡыш бабай ауырып киткән дә, шуға ул һауыҡҡансы мине саҡырҙылар. Балаларҙы байрамһыҙ ҡалдырып булмай бит", - тип саҡ ыңғайлатып алдым.

➔ **Ҡыш бабай булып эшләү тәжрибәгеҙ бар, ҡабат ошо ролгә инеп, гәзит уҡыусыларға ниндәй теләктәрегеҙҙе еткерерһегеҙ?**

- Иң беренсе һаулыҡ теләр инем. Һаулыҡ булһа - барыһы ла булыр. Икенсенән, уяуыраҡ булырға кәрәк. Телебеҙгә, мәҙәниәтебеҙгә, тарихыбыҙға ҡарата, сөнки, нимә генә тимәйек, күп нәмә үҙебеҙҙән тора һәм үҙебеҙгә бәйле. Әлбиттә, тышҡы сәбәптәр ҙә бар, әммә халҡыбыҙ аҡыл, төплө фекер менән эш итһә, эштәребеҙ алға китәсәк. Шулай уҡ киләсәк быуынға иғтибарлы булырға, уларға дөрөҫ юл күрһәтергә тейешбеҙ. Өсөнсөһө - һәр кем матди хәлен нығытыу тураһында ла уйларға тейеш. Ғөмүмән, был өс йүнәлеш тә бер-береһенә бәйле. Шундай заманда йәшәйбеҙ, аҡса булмаһа - ҡыйын, ҡыйын булһа - кәйеф тә юҡ, дәрт тә юҡ, илһам да юҡ. Ә улар булһын өсөн милләттәштәрем йәш ваҡыттан уҡ киләсәген уйлап, дөрөҫ йүнәлеш алырға, йәш ваҡыттан уҡ алдағы көнөн күҙаллаларға өйрәнһен ине.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА әңгәмәләште.**

ТАРИХ АУАЗЫ



# ИБН ФАҘЛАН ЭҘЕНӘН

**Ибн Фаҙлан сәйәхәтнамәһен тикшереү һөҙөмтәһендә тағы шулар асыҡланды: Кесе Бығаулыҡ ерендә (уның төньяҡ өлөшөндә) илселәрҙең юлы һулға ауыша һәм улар Һамар, Кинәл, Сок (Сух) һәм Ҡондорса йылғалары аша үтә.**

Ибн Фаҙлан, Ҡондорсаны аша сыҡҡас, Башҡорт иле башлана, тип яҙа. Ғәжәп, илселәр бит башҡорт ерендә Байһун йылғаһының уң яҡ ярында уҡ аяҡ баҫа. Шуныһы ла аңлашылып бөтмәй: Ҡондорса йылғаһының исеме Ибн Фаҙлан сәйәхәтнамәһендә Кджлуа тип теркәлгән. Был гидронимдың дөрөҫ яҙылышы, моғайын, Ҡыҙыл өйө, йәғни Ағиҙел өйөләр. Халҡыбыҙ йырҙарында Каманың атамаһы Ағиҙел икәнлеген иҫәпкә алып, тағы ике дәлилгә нигеҙләнеп (был хеҙмәтемдә уларын күрһәтмәйем, хәҙергә сер итеп ҡалдырам), ошондай фекергә киләм: башҡорт теленең тарихи фонетика ҡанундары Ағиҙел өйө төшөнсәһенең (һүҙбәйләнешенең) тышҡы формаһын ошо рәүештә лә үҙгәрткән: Ағиҙел өйө - Әйасғол өбө - Сағил өбө - Саклаб. Бына ҡайҙа ятҡан ул серле саклаб этнонимының семантик хәбәре!

Ағиҙел йылғабыҙҙың исеме, баҡһаң, Ҡыҙыл ҡом (сүллек исеме) һәм Ҡыҙыл Орда (кала исеме) географик атамаларына ла туранан-тура бәйле икән (Оғуз йылға - Оғуҙ-ғол - Ағиҙел - Ҡыҙыл). Һәм был асышыма ҡарата бер ни ҡәҙәр аңлатма рәүешендә әйтеп үтәм: Ҡыҙыл ҡом һәм Ҡыҙыл Орда топонимдарының тәүге компоненты, йәғни "ҡыҙыл" лексик берәмеге, ошо ике атама составында төҫтө түгел, ә фәҡәт этнонимды белдерә (был этник терминдың архаик бер варианты - хаҙлаж).

Ҡондорса йылғаһының икенсе исеме Ҡыҙыл өйө, йәғни Ағиҙел өйө булыу ихтималлығына мин хәлифәт илселәренең саклабтарға барған юлын (уның төньяҡ өлөшөн) махсус өйрәнеү маҡсатында фәнни экспедицияға йүнәлгәс төшөнә башланым. Сәфәргә көҙҙең салт аяҙ бер көнөндә, 31 сентябрҙә, Өфө ҡалаһы аша юлландым. Сәйәхәтем ваҡытындағы сағыштырмаса оҙайлы тәүге туҡталышым - Татарстандың иң көньяғындағы Норлат ҡалаһы булды.

Ҡалаға иртәнге поезд менән килеп төштөм. Бында мин өс уңыш-табышҡа юлыҡтым. Беренсенән, был ҡаланан биш кенә саҡрым алыҫлыҡта Изгеләр шишмәһе барлығын белдем (ә Изгеләр шишмәһе хаҡындағы был мәғлүмәт шуға ишара яһай: тимәк, Ҡондорса буйындағы ауылдарҙа боронғо башҡорттарҙың, йәғни был тарафтарҙа Ибн Фаҙлан күреп киткән мәжүси башҡорттарҙың варистары йәшәй).

Табышымдың икенсеһе: Оло Сәрмәсән йылғаһының уң яғынан, ярҙан ике саҡрым алыҫлыҡта боронғо вал, дошман яуынан һаҡланыу валы үтә икәнлеген ишеттем. Миңә ул ҡомартҡы тураһында Норлатта йәшәүсе эшҡыуар, крайҙы өйрәнеүсе Вәгиз Сибғәтуллин һөйләне. Вәгизден фекеренсә, тиҫтәләрсә саҡрымдар оҙонлоғондағы был валды болғарҙар түгел, Оло Сәрмәсәндең һул ярында көн иткән ырыу-ҡәбиләләр ҡаҙған.

Өсөнсө табышым: Татарстандың ҙур масштаблы географик картаһы. Уны миңә район гәзите редакцияһында бирҙеләр.

Инде бик ҡуптәндән эҙләгән ул карта ярҙамында мин шул уҡ көндөң кисенә Аллағолға - Ульяновск өлкәһенең иң көньяҡ-көнсығыш ауылдарының береһенә - аңһат ҡына барып еттем. Һөйләше мишәр диалектына тартым был ҙур ауылдың (унда 350-нән ашыу йорт) халҡы үҙен татар милләтенән тип иҫәпләй. Мәктәптәрендәге музейҙары менән танышам. Документтарҙың береһендә ауылдың икенсе исеме Аҙнағол тип әйтелә. Был күркәм музейҙы байытыуға хәтһеҙ тырышлыҡ һалған уҡытыусы, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Нурмөхәмәт ағай Шакировҡа һорау менән мөрәжәғәт итәм:

- Ауылығыҙға нисә йәш, тип иҫәпләйһегеҙ?

- Аллағол ауылының ҡасан һалынғанын һаман да белә алмайбыҙ. Һамар архивына (1851 йылда Сембер губернаһының Аллағол ауылы Һамар губернаһы составына индерелә - **Р.И.**) ла яҙып ҡараныҡ, ләкин беҙгә кәрәкле мәғлүмәт унда ла юҡ икән, - тип яуап бирҙе уҡытыусы-ветеран.

Ағайҙан Аллағол ерендә боронғо атрибуттарын һорашам. Бәлки, әйләнә-тирәләге ерһыуҙар тураһында риүәйәт һөйләр, тип уйлағайным. Әммә Аллағол ерендә Ыйыҡ тау ҙа, Кирәмәт ағас та, Изгеләр ҡәберe лә, убалар ҙа юҡ икән. Уйымдан ғына һығымта яһайым: ауыл сағыштырмаса ҡуптән түгел Волга арьяғынан күсенеп килеп ултырған булһа кәрәк.

Әйткәндәй, мин был уй-фаразымды шул уҡ көндө бер аҙ үҙгәрттем. Димитровград - Аллағол маршрутындағы киске автобус ауылға яртылаш тиерлек буш килде. Салондан иң тәүҙә бер ҡыҙ менән бер апай төштө. Мин уларға: "Һеҙ ошо ауылданмы?" - тип һүҙ ҡуштым. Бындағылар икән. Үҙемдең кем һәм ҡайҙан икәнлекте әйттем дә, апайға һорау бирҙем:

- Һеҙҙең ауыл ниндәй тауға хәйер бирә?

- Парау ауылының Ҡыҙҙар тауына, - тине апай.

- Парау? Ул ҡайҙа?

- Парауға беҙҙән алтмыш саҡырым. Уны Парау ҙа, Боровка ла тиҙәр.

Ә Боровка миңә картанан таныш. Әлбиттә, Боровкаға мотлаҡ барасаҡмын. Ләкин хәҙер түгел, ә икенсе килгәнемдә. Ә был юлы иһә Үрән йылғаһы буйындағы Үрәнбаш ауылына барып етергә ниәтләгәнмен, ә Үрәнбаштан артабанғы юлым - Өсҡүл ауылына.

Информатор апайҙың исемфамилияһын юл дәфтәремә яҙып алдым. Нурмөхәмәтова Нурия икән ул. Нурия апайға Ҡыҙҙар тауы тураһындағы мәғлүмәте өсөн рәхмәттәр әйтәм һәм, һаубуллашып, автобусҡа инәм. Бына бит ҡалай була был фани донъяла! Ярай әле, тимен, Нурия апайға тау тураһында һорау бирергә булдым. Ә бит ул һорауҙың бирелмәй ҡалыуы ла бик мөмкин ине, сөнки Аллағолдоң әйләнә-тирәһендә тип-тигеҙ дала йәйрәп ята...

Өсҡүл ауылында ла миңә уңыш юлдаш булды. Болғар ҡалаһынан (Татарстандың элекке Куйбышев ҡалаһы, район үҙәге) 8 саҡрым көньяҡтараҡ урынлашҡан был ауылға иртәнге сәғәттәрҙә үк килеп етелде. Төйәктә урыҫтар йәшәй икән. Һәм бик ҡуптәндән - баярҙар, стрелецтар заманынан бирле. Ауылдың өс күле бар. Исемдәре: Атамановский, Чистый, Безымянный. Уларҙың икеһе - Атамановский һәм Чистый - яҙ көндәрендә бергә тоташып, бер күл була. Рәсми фән фекеренсә, ошо өс күлдең элек дөйөм атамаһы ла булған һәм Ибн Фаҙлан сәйәхәтнамәһендә ул гидроним Халджаһ формаһында инеп ҡалған.

Халджаһ тураһында илселек сәркәтибе Ибн Фаҙлан дәфтәренә ошоларҙы теркәгән: "Беҙ батша янына барып еткәндә уны Халджаһ тигән һыу буйында осраҡтайныҡ, ул өс күлдән ғибәрәт, икәүһе ҙур, берәүһе бәләкәй; уларҙың береһендә лә төбөнә етә алырлыҡ урын юҡ. Был урын һәм саклабтарҙың ҙур йылғаһы араһындағы алыҫлыҡ яҡынса бер фарсах, ул Итил йылғаһы тип атала һәм хазарҙар иленә дингеҙгә ҡоя. Был урында бер баҙар бар, ул һәр ваҡыт ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа эшләп ала, унда бик ҡуп нәфис тауарҙар һатыла". Был өҙөктә анығ әйтелгән: Халджаһ менән Итил йылғаһы, йәғни хәҙерге Волга араһы яҡынса бер фарсах. Әммә ғәмәлдә был өс күлдән Волга йылғаһына иң яҡын ара - 12 саҡрым, тимәк, теүәл 2 фарсах. Шулай булғас, Халджаһ һыуын икенсе бер географик нөктәнән эҙләргә кәрәк. Ҡайһы нөктәнән? Бәлки, боронғо Шәһре Болғар ҡалаһы хәрәбәләре яғынандыр?

Фәнгә яҡшы билдәле: Шәһре Болғар менән Иҙел (Волга) аралығында алыҫ замандарҙа уҡ зәңгәр күлдәр булған. Шул күлдәрҙең береһе Галан атамалы икәнлеге мәғлүм. Бында шуға ла иғтибар итеү мотлаҡ: Шәһре Болғар хәрәбәләренән 7 саҡрым алыҫлыҡта Волгаға кес кенә Вихлән (Милән) тигән бер йылға ҡоя. Әйткәндәй, Галан да, Вихлән дә, Куйбышев ГЭС-ы төҙөлгәс, һыу һаҡлағыс аҫтында ҡалды.

Үрҙә килтерелгән өс гидронимдың да (Халджаһ, Галан, Вихлән) фонетик төҙөлөшө буйынса бер-береһенә шаҡтай яҡын икәнлеге күҙгә ташлана. Ә бит ул атамаларҙың семантик мәғәнәләрендә лә үҙ-ара яҡынлыҡ юҡ түгел (Халджаһ < Халжа < Әйле һыуы; Галан < Әйле -һун < Әйле кеше; Вихлән < Вийәлән < Әйәлән < Әйле-һун < Әйле кеше).

Был өс гидронимға ҡарата бына ошондай дәлилдәр. Әлбиттә, уларҙы саклабтар тарихын, этногенезын өйрәнгәндә дөрөҫ итеп файҙалана алһаҡ, еңел генә түбәндәге һығымталарға килергә мөмкин: 922 йылда саклабтар батшаһы Алмуш, Ғәрәп хәлифәте илселеген ҡаршы алғас ҡына, йәйләүгә йүнәлә. Алмуш батшаның даими ҡышлау һәм яҙлау урыны - Шәһре Болғар (ул заманда - Болғар ауылы).

Был көҙгө экспедициямда ирешкән тағы бер уңышым - Ибн Фаҙлан сәйәхәтнамәһендә ҡыҫҡаса ғына телгә алынған Джавшар йылғаһының хәҙерге атамаһы Яуширмә икәнлеген иҫбатланым. Ә ул юҫыҡтағы ғилми тикшеренеүҙәремдә саклабтарҙың ярым күсмә тормош алып барыуҙарының төп үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып башланым. Ә ул үҙенсәлектәр ошолар: июнь башында йәйгә әйәреп, иләү ашыҡмай ғына көньяҡтан төньяҡҡа табан күсенә башлай; йәйләүгә сыҡҡан илдең төньяҡҡа табан күсенеү юлы (йәйләү юлы) ҙур йылғалар аша түгел, башлыса, һыу айырғыс тау, ҡалҡыулыҡтар буйлап үтә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Экспедициянан Ҡаҙан ҡалаһы аша урау юл менән ҡайттым. Шундай ҡарарға килендә: Ҡондорса, Сәрмәсән йылғалары яҡтарында боронғо Башҡорт илен эҙләүҙе дауам итергә, уны Оло Сәрмәсәндең уң яҡ ярындағы боронғо валды буйынан-буйына үтеүҙән һәм Боровка ауылының Ҡыҙҙар тауы атамаһы серенә төшөнөүҙән башларға кәрәк. Ихтимал, бында ла Ҡыҙҙар тауы нигеҙенә оғуз этномимы һалынғандыр. Әгәр тарихи дөрөҫлөк нәҡ шул икән, тимәк, минең иң ҙур, иң ҡатмарлы фәнни концепциям (башҡорт һүҙенең тамыр өлөшөн боронғо өбөйәс этнонимы, йәғни оғуз этнонимының бер варианты тәшкил итә, тигән һығымтам) тағы бер өҫтәмә дәлил менән ҡеүәтләнәсәк.**

**Рауил ИСЛАМШИН.**

**(Аҙағы. Башы 51-се һанда).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Иштәктәр

Урал (б.э.т. 4 мең йыл) Балҡандың ике яғындағы халыҡтарҙы берләштерә һәм был тауҙар уның хөрмәтенә Уралтау тип атала башлай. Ҡубарҙың улы Ишем Иҙелдә тороп ҡала, икенсе улы Иштәк үҙенең кешеләрен Етейылға (Алтай) яғына алып китә. Уларҙы иштәктәр (уғырҙар) тип атай башлайҙар. Иштәктең улдары Уралтауҙың ике яғын биләй, уларҙан ҡуп кенә башҡорт ҡәбиләләре барлыҡҡа килә. Иштәктең дүртенсе улы Бикәтундан бикәтин ырыуы тарала. Бикәтундың Байлар һәм Юрмый тигән улдарынан да шул атамалағы ырыуҙар барлыҡҡа килә. Беҙҙең эраның 1-се меңйыллығы аҙағында бикәтиндәрҙе истәктәр йәки иштәктәр тип атағандар.

Истәк (иштәк) этнонимы башҡа ҡәбиләләр менән мөнәсәбәт һәм йәшәгән еренә ҡарап төрлөсә үҙгәрештәр кисергән. Г. Ю. Клапрот фекеренсә, иштәк (остяк) Обь йылғаһының уғырса әйтелешендә "Обь халҡы" тигәнде белдерә. Г. Вамбери иштәк "өсҡө өлөш" тигәнде аңлата тип иҫәпләй. Башҡа авторҙар иштәктәрҙе хан исеме менән бәйләй. Рона-Таш уларҙы башҡорт еренең аборигендары тип һанаһа, М. З. Зәкиев уларҙы көнбайыш Себер, Пермь татарҙары һәм башҡорттары тип белдерә. Истәк, иштәк атамаларын көньяҡ Уралға әйләләр тарата. Ҡырғыҙҙар менән ҡаҙаҡтар бөгөн дә башҡорттарҙы истәк тип атай.

Ҡол Ғәлиҙең шәжәрәһенә иғтибар иткәндә лә беҙ иштәк, шибәк, әйле, болгарлыҡ-иштәк тигән атамаларҙы осратабыҙ. Һәр хәлдә, истәктәр (иштәктәр) башҡорт ырыуҙарының барлыҡҡа килеүендә ҙур роль уйнағаны бәхәсһеҙ, шуның өсөн дә ҡуп кенә халыҡтар башҡорттарҙы истәк, иштәк, остяк, уштяк тип белә.

## Унлар

Унлар ырыуының боронғо тарихы һундарға барып ялғана. Был унлар ырыуы атамаһында һәм топонимикаһында сағыла. Һундарҙы өйрәнеүсе ғалимдар "унлар" башҡорт этнонимының "онгут" монгол ҡәбиләһенең калькаһы тигән фекерҙә. Ун ҡәбиләһе башҡорттары үҙҙәренең ҡәбиләһен "һунарсы" тип атай.

Ун ҡәбиләһе төньяҡҡа күсенгәнгә тиклем Ағиҙел йылғаһы буйында таныптар менән күрше йәшәгән. XI быуатта Өфө ҡалаһы тәңгәл сәбәпле уларҙың йәшәгән ере үҙгәрә. Таныптарҙың бер өлөшө Ағиҙел йылғаһы буйында тороп ҡала. "Биш-унғарҙарҙы урындағы башҡорттар һун башҡорттары тип атаған. Һундарға төрки телле ҡәбиләләр ингән, уларҙы он-уйғыр тип атағандар. Унлар башҡорттар составына бик иртә инеп, боронғо башҡорттар Уралға күскәндә уларҙан айырылған", - тип яҙа М.Өмөтбаев.

**(Дауамы бар).**

*✓ Әлбиттә, барыһы ла юғары белем алһа, яҡшы булыр ине. Заман башҡорто булыу өсөн, үҙеңә ҡарата хөрмәт булһын өсөн кәрәк был. Шулай уҡ был сит илгә сығып тәжрибә алыу, тәжрибә уртаҡлашыу өсөн дә мөһим шарт.*



# БАЙЛЫҒЫМ, ДАНЫМ, башҡортса һөйләшкән

**Мәктәп йылдарында физика уҡытыусыһы уны мотлаҡ физик булырға өндәй, ә тарих уҡытыусыһы тарих юлын һайларға өгөтләй. Тарих егетте үҙенә нығыраҡ ылыҡтыра һәм ул мәктәптән һуң Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетында белем алыуын дауам итә. Әммә яҙмыш уны бөтөнләй икенсе тармаҡҡа - мәғлүмәт өлкәһенә алып килә. Бөгөн ул Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары буйынса агентлыҡ етәксеһе урынбаҫары. Сираттағы әңгәмәсебеҙ - политология фәндәре кандидаты Марат Әсхәт улы ҒӘЗИЗОВ.**

**Марат Әсхәт улы, һуңғы ваҡытта ҡала башҡорто, Өфө башҡорто, ауыл башҡорто тигән һүҙбәйләнештәр телмәребеҙҙә йышыраҡ ишетелә башланы. Һеҙҙеңсә, Өфө башҡорто башҡа башҡорттарҙан ни яғы менән айырыла?**

- Кеше кешенән айырыла инде ул. Был айырма уның кейенеү, йәшәү рәүеше, туҡланыуы, ҡайҙа эшләүе, эш хаҡының күләмендә сағылырға мөмкин. Әммә был бит кемдеңдер өҫтөнөрәк, икенсеһе түбәнерәк булыуын аңлатмай. Шуның кеүек, башҡорттоң да төрлөһө булыуы мөмкин. Минеңсә, башҡорт - ул ҡымыҙ эсеп, ҡурай тартып, күп итеп ит ашап йәки ит ашамай йәшәүсе түгел. Хатта бәғзеләр башҡорт телен камил белмәһә лә, филология факультетын тамамлағандарға ҡарағанда ла башҡортораҡ булыуы мөмкин, сөнки башҡортлоҡ - ул йөрәктә йәшәй. Ул белем кимәле менән генә баһаланмай. Бәлки, кемдер меңдәрсә башҡорт һүҙен белә, телмәрен ҡойоп ҡуя, матур итеп һөйләй beләләр, әммә халҡы өсөн бер нәмә лә эшләмәгәндер, ауылдан килеп ярҙам һораған яҡташына ярҙам итеү өсөн ҡыл да ҡыбырлатмағандыр.

Шуға күрә, башҡорт булыу өсөн иң элек кешелә рух булырға тейеш, тип һанайым. Шул ваҡытта уның ҡайҙа йәшәүе мөһим түгел. Ул барыбер халҡын яратасаҡ, уның яҙмышы, киләсәге өсөн уйланасаҡ, янып-көйәсәк, балаларын да ошо мөхиттә тәрбиәләйәсәк, улар менән башҡортса һөйләшәсәк.

Ҡала башҡорто ни яғы менән айырыла? Ул заманса технологияларҙы ҡулланыу мөмкинлеге киңерәк булған мөхиттә йәшәй. Бында миҫал өсөн хатта Башҡортостандан ситтә йәшәгән егет-ҡыҙҙарҙы килтерер инем: улар ҡырҙабыҙ тип тормайҙар, йәмәғәт ойошмалары ойоштора, башҡорт шрифттары, андроидтар өсөн ниндәйҙер ҡулланмалар эшләй һәм бөтөн был эштәрҙе үҙ инициативалары менән башҡара. Улар йөҙәрләгән милләт йәшәгән мегаполистарҙа башҡорт халҡына файҙа килтерә, уның имиджын күтәрә. Шуға күрә, минеңсә, башҡортлоҡ - ул һинең йөрәгеңдә, күңелеңдә, рухыңда булырға тейеш; ул һине тотоп торған арҡа һөйәге. Ә ҡалғандары: матур кейем, ялтырауыҡ һүҙҙәр - улар бары тик тышлыҡ ҡына.

**Бер ваҡыт шағир Риф Тойғон "Башҡорт булыу өсөн күп кәрәкмәй" тип яҙһа, Рәшит Шәкүр уға "Башҡорт булыуы өсөн бик күп кәрәк" тип яуапланы. Һеҙҙең ҡарашҡа, башҡорт булыуы өсөн аҙ кәрәкме, күп кәрәкме?**

- Бында бөтөн нәмә лә кешенең теләгенән тора. Әгәр ҙә бер милләттәш яҡшы ғәмәлдәре менән башҡа халыҡтар араһында башҡорттарҙың абруйын күтәрергә теләй икән, әлбиттә, башҡорт булыу өсөн күп кәрәк. Теләйһеңме, теләмәйһеңме, һин һәр саҡ күҙ уңында. Беҙ, ҙур ҡалала булһынмы, бәләкәй ауылдамы - күп милләтле ҙур йәмғиәттә йәшәйбеҙ. Бөгөн донъя берҙәм, глобалгә әүерелде. Һәм һине һәр саҡ кемдер баһалай, бәлки, хатта ыңғай йәки кире өлгө лә алалыр. Ә бөгөн заманса технологиялар дәүерендә Ер шарының теләһә ҡайһы мөйөшөндә йәшәгән һәр кемдең видео аша бөтөн донъяға танылыу мөмкинлеге бар. Ошоно һәр саҡ иҫтә тотоп, һәр саҡ йыйнаҡ булырға кәрәк. Әгәр, мин - башҡорт, тиһең, башҡорттар тураһында юғары фекер тыуҙырырға теләйһең икән - тәү сиратта был талапҡа үҙең яуап бир: уйҙарың, ғәмәлдәрең, кейемең һ.б. менән. Был ниндәй рангта булыуына ҡарамаҫтан, һәр кемгә ҡағыла.

Мәҫәлән, әрмелә хеҙмәт иткән башҡорт егеттәре тураһында һәр саҡ йылы һүҙҙәр генә ишетергә тура килә, сөнки улар яуаплы, ышаныслы, һәр саҡ таянырға мөмкин. Өлкән улымдың ант ҡабул итеүенә барҙыҡ та, Башҡортостандан икәнлекте белгәс, командирҙарының: "Иң ышаныслы егеттәр - Башҡортостандан", - тиеүе күңелгә май булып яғылды.

90-сы йылдарҙа, "Башҡорт ниндәй булырға тейеш?", тигәнгә: "Ул башҡортса һөйләшергә, шәжәрәһен белергә, милли музыка ҡоралдарында уйнарға тейеш", - тигәнерәк дәлилдәрҙе килтерерҙәр ине. Бөгөн замандар үҙгәрә, башҡорт заман менән бергә, типә-тиң атларға тейеш. Әлбиттә, барыһы ла юғары белем алһа яҡшы булыр ине, әммә был донъяла һәр кемдең тәғәйен урыны бар: кемдер иген үҫтерә, кемдер икмәк бешерә, шуға ҡарамаҫтан, бөгөн тракторист булып эшләгәндә лә камиллыҡҡа, белемгә ынтылырға кәрәк. Заман башҡорто булыу өсөн, үҙеңә ҡарата хөрмәт булһын өсөн кәрәк был. Шулай уҡ был сит илгә сығып тәжрибә алыу, тәжрибә уртаҡлашыу өсөн дә мөһим шарт. Телдәр белеү ҙә мөһим.

Яңы технологияларҙы белеү өйҙә генә ултырып, сит илдәге ҡәрҙәштәрең, таныштарың, дуҫтарың менән һөйләшеү, аралашыу мөмкинлеге бирә. Әлеге ваҡытта беҙҙең мәҙәни, философик нигеҙҙәр үткәндәргә йүнәлтелгән, үткәндәр менән ғорурланабыҙ, ләкин киләсәк менән ғорурланырлыҡ итеп тә йәшәргә кәрәк бит. Тарихҡа, үткәндәргә таянырға, уны белергә кәрәк, шул уҡ ваҡытта алға ҡарарға һәм киләсәктәге моделде күҙалларға тейешбеҙ.

**Һеҙ үҫкәндә Өфөлә башҡорт мөхите булдымы?**

- Мине әсәйем - Ғәзизова (Таулыҡаева) Зәйтүнә Сабир ҡыҙы тәрбиәләне. Уның төп сығышы Хәйбулла районының Айыулы ауылынан. Картәсәй беҙҙең менән йәшәне. Ҡалала йәшәһәк тә, йәй һайын мөмкинлек сығыу менән әсәйҙең тыуған яҡтарына, уның өлкән ағаһы йәшәгән Йәнтеш ауылына ҡайтып йөрөнөм. Ул яҡтарҙы яҡшы беләм, йәй һайын бала сағым Һаҡмар буйы тәбиғәтенә һоҡланып, бесән сабышып үтте, тип әйтә алам. Өйҙә лә, ауылда ла тик башҡортса аралашҡас, мәктәпкә барғанға тиклем рус теленә ҡарағанда башҡортса яҡшыраҡ һөйләшә инем. Белем биреү рус телендә алып барылған 100-сө мәктәптә уҡыным. Заманы шундай ине бит: беҙҙең башҡорт мөхите ғаилә һәм ауыл менән сикләнде. Хатта уҡыу йылдарында, ҡыҙыҡһынып, класс журналын ҡарағанда 42 бала араһынан 4 кенә башҡорт булыуын белдем.

Милләт-ара аралашыу теле, тип, ул ваҡытта балаларына күберәк рус телен өйрәтергә тырыштылар. Әммә мин тел проблемаһын тойманым, сөнки өйҙә тик туған телдә һөйләштек. Шуға был мәсьәләне етешһеҙлек кеүек күрмәнем. Бөгөн шул йылдарға анализ яһағанда, әлбиттә, ул ваҡыттағы мөхиттең тарлығын аңлайым.

**Өләсәй-олатай менән үҫкән балалар шул тиклем бәхетле, сөнки улар халҡыбыҙҙың бай фольклоры менән тәүге таныштырыусы ла, үҙҙәренең үткәндәрен әкиәт кеүек итеп тәфсирләп һөйләүсе лә, әкиәттәр, китаптар уҡыусы ла…**

- Өләсәй әкиәттәр һөйләй ине, тип әйтә алмайым, боронғоларҙы, үҙе күргән-кисергәндәрҙе, Ҡөрьән тәфсирҙәрен һөйләй торғайны. Таҡмаҡтар ҙа әйтеп ебәрә торғайны. Ә бына әсәйемдең Аҡъяр эргәһендәге Ҡараһыу ауылында йәшәгән өлкән апаһы Фирҙәүес Тапаҡова башҡорт фольклорын бик яҡшы белде, хәтерендәге меңләгән таҡмаҡ араһынан, кәрәкләһен мәлен, урынын тура килтереп, әйтеп ҡуя ине. Уның таҡмаҡтары төпһөҙ инеш кеүек, урғылып сығып торҙо. Ошо инәйҙе белеүселәр һаман да уның тураһында йылы хәтирәләр һаҡлай. Ошондай мөхиттең дә йоғонтоһо булғандыр инде минә.

**Бөгөн шундай бәхәстәр бара - башҡорт телен уҡытыуҙы ҡыҫалар, тел мәктәптә уҡытылмаһа, бөтәсәк, йәнәһе. Бәғзеләр телде һаҡлап ҡалыуҙың юлын ғаиләлә аралашыуҙа, ғаиләлә башҡорт мөхите булдырыуҙа күрә. Икенсенән, телде һаҡлау өсөн теләк кәрәк, тиҙәр. Һеҙ мәктәптә башҡорт телен бөтөнләй уҡымағанһығыҙ, әммә әсә телен онотмағанһығыҙ, башҡорт рухын һаҡлағанһығыҙ. Бөгөнгө хәл-торошто баһалап, нимә әйтерһегеҙ?**

- Дөрөҫ әйтәһегеҙ, тәрбиә, рух башы - ғаилә. Ул яңы кешегә генә түгел, рухҡа ла, туған телгә лә ғүмер бирә, ошо ҡиммәттәрҙең инеш башы булып тора. Әгәр сығанаҡ, тамыр юҡ икән, тыштан күпме генә һыу ҡойма, үҫенте үҫмәйәсәк. Юҡҡа ғына, баланы түгел, башта үҙегеҙҙе тәрбиәләгеҙ, тимәйҙәр атай-әсәйҙәргә. Әгәр бала ғаиләлә, атай-әсәйендә туған телгә ихтирам тоя икән, үҙе лә уны ихтирам итәсәк.

Бөтөн илдәрҙә 3-4 тел белеү нормаль күренеш. Күпме тел беләһең - һин шул тиклем кеше, тип тә әйтеүҙәре урынлы. Тормош шулай булғас, хәҙер күптәр русса һөйләшеү генә түгел, хатта русса уйлай. Шуға ҡарамаҫтан, рус теле рус булмаған милләттәр өсөн сит тел. Шулай булһа ла, уны туған телебеҙгә ҡарағанда нығыраҡ һәм яҡшыраҡ беләбеҙ. Ул беҙҙең туған телебеҙгә әйләнеп бөткән. Йәғни рус булмаған халыҡтарға туған теленән башҡа ике-өс телде белеү шулай кәрәк тип ҡабул ителә икән, башҡа милләттәр ҙә ғәҙәти күренешкә әйләнгән был матур өлгөгә эйәрә ала.

Ҡалала башҡорт теле проблемалары буйынса социологик һорау алыуҙар үткәргәндә, күпселек өфөләрҙең был мәсьәләгә бик тыныс ҡарауы аптыратты. Йәғни, улар телдәр өйрәнеүгә тыныс ҡарай һәм аңлап ҡабул итә. Кемделер ҡәнәғәтләндермәй икән, был да аңлашыла - кешегә ай ҙа, ҡояш та ярамаған кеүек, ундайҙарҙың үҙҙәренең ихтыяжы. Ләкин телдәр белеү - ул бит ауырлыҡ түгел, ә байлыҡ. Ни тиклем күп тел беләһең, эргәңдә йәшәүселәрҙе, уларҙың психологияһын шул тиклем нығыраҡ аңлайһың һәм бынан тормош тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ ҡына. Башҡортостан халҡы бит иңгә-иң терәшеп, биш быуат самаһы татыу һәм дуҫ йәшәй, беҙҙең дуҫлыҡ быуаттар буйына формалашҡан. Ошо ваҡыт эсендә ниндәй генә тулҡындар үтмәгән. Әммә генетик кимәлдә бер-береңә, мәҙәниәтеңә, тарихыңа толерант мөнәсәбәт һаҡланып ҡалған һәм әле лә һаҡлана.

**Ваҡытында һеҙ Төркиәлә магистратура тамамланығыҙ. Ситтә белем алғандарҙың йәки йәшәгәндәрҙең кемеһенән генә һорама, хатта улар иң үҫешкән илдәрҙә ғүмер итһә лә, барыбер Башҡортостанды, Өфөнө һағыныуын йәшермәй. Һеҙ баш ҡаланы - тыуған ҡалағыҙҙы һағына инегеҙме?**

- Дөрөҫөн әйткәндә, тыуған ереңде ни тиклем яратыуыңды бөтөн йөрәгең, йәнең-тәнең менән ситтә булғанда нығыраҡ тояһың һәм аңлайһың. Ситтә бөтөнләй икенсе мөхит, икенсе телдә һөйләшәләр, мәҙәниәт, традициялар, ғөрөф-ғәҙәттәр башҡа. Яйлап ошо мөхиткә өйрәнәһең, шул уҡ ваҡытта тыуған ил ҡәҙерен ысынлап аңлайһың..

Әлбиттә, белемең, һөнәрең, теләгең бар икән, сит илгәме, Рәсәйҙең башҡа төбәгенәме барып эшләп ҡайта алаһың, әммә үҙ илең барыбер үҙеңдеке булып ҡала.

**Өфөлә үҫеүселәр, әлбиттә, баш ҡаланы арҡырыһынан-буйына йөрөп, уның һәр мөйөшөн тикшереп бөткәндер инде, шулай ҙа иң яратҡан урынығыҙ ҙа барҙыр?**

- Иң яратҡан урын, әлбиттә, бала сағым үткән ерҙәр. Әсәй Урал дәүләт консерваторияһын тамамлағандан һуң ғүмер буйы бер генә урында эшләне - уның хеҙмәт кенәгәһендә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры тигән бер генә яҙыу тора. Диплом алыу менән Башҡортостандан саҡырыу булып, шунда уҡ фатир биргәндәр һәм сабый сағым Новостройка районында үтте. Күпселеген Октябрь проспектында йәшәргә тура килде. Юл буйында 5 ҡатлы йорттар тора, ә ихата эсендә - ағас өйҙәр. Ауылдағы кеүек, бар бабайҙар, әбейҙәр, дуҫ малайҙар шул ихатала була торғайныҡ. Әлбиттә, ошо урындар ғүмер буйы ҡәҙерле иҫтәлек булып йөрәк түрендә йәшәйәсәк. Мәктәпкә барған юлдар, малайҙар менән өй баштарына менеп, уҡтан атып йөрөгән ваҡыттар йылы хәтирәләр булып һаҡлана.

**Ваҡытында Өфө ҡала хакимиәтендә лә эшләнегеҙ, баш ҡаланы ябай граждандар кеүек тыштан ғына түгел, уны эстән дә - проблемаларын, нескә урындарын - яҡшыраҡ беләһегеҙ. Мөмкинлегегеҙ булһа, нимәне үҙгәртер инегеҙ?**

- Үҙгәртеүҙең мәғәнәһе бармы икән? Крайҙы өйрәнеүселәр юҡҡа ғына теге бинаны һүттеләр, бынығын емерҙеләр, аллея урынына юл һалынған, тип һөйләмәй. Бер яҡтан, уларҙың һүҙендә ниндәйҙер консервациялау фекере ятҡан кеүек: бер нәмәгә лә тейергә ярамай. Икенсе яҡтан, бәғзеләр Өфөнөң етерлек кимәлдә уңайлы, тейе-

***✓ Башҡортостандың баш ҡалаһы булараҡ, уның милли йөҙө булырға һәм ул һаҡланырға тейеш. Яңы төҙөлгән йорттар үҙенең стиле менән айырылып торһон, урамдар, парктар милли колорит менән эшләнһен, рух һаҡланһын ине.***

# ДӘРӘЖӘМ - балаларым!



шенсә заманса булмауын билдәләй һәм нимәлер ҡуйырға йәки алырға, нимәнелер үҙгәртергә тәҡдим итә. Был ике фекер бер-береһенә ҡаршы килә. Брендҡа әйләнгән Өфө йүкәләрен һаҡларғамы, әллә юлдары тура, тығынһыҙ, инфраструктура үҫешкән заманса Европа кимәлендәге ҡалала йәшәргә теләйбеҙме? Беҙ теләйбеҙме, теләмәйбеҙме, үҙгәрештәр булып тора һәм ҡала ла һәр ваҡыт үҙгәрәсәк. Әлбиттә, тарихи архитектура өлгөләре, тәбиғи, милли-мәҙәни ҡомартҡылар ҡалырға, мәҫәлән, Нияз Мәжитов асып, бөтөн донъяға күрһәткән "Өфө-2" башҡорт ҡалаһы һәм шуға оҡшаш археологик ҡомартҡылар мотлаҡ һаҡланырға тейеш. Ул - донъя әһәмиәтендәге һәйкәл. Ә башҡалар яйлап барыбер ҙә үҙгәрә - йорттар ҙа, юлдар ҙа, парк-аллеялар ҙа. Эволюция ҡанундарына ярашлы, һәр нәмә үҙгәрә. Әммә беҙ Европа-Азия сигендә урынлашҡанлыҡтан, баш ҡаланың үҙенең йөҙө булыуы зарур. Сөнки бында көнсығыш мәҙәниәте лә, Европа мәҙәниәте лә сағылыш табырға, шул уҡ ваҡытта уның Башҡортостандың баш ҡалаһы булараҡ, үҙ милли йөҙө булырға һәм ул һаҡланырға тейеш. Йәғни яңы төҙөлгән йорттар үҙенең стиле менән айырылып торһон, урамдар, парктар милли колорит менән эшләнһен, рух һаҡланһын ине.

**Өфөлә, һеҙҙең ҡарашҡа, милли стиль, милли колорит бармы?**

- Һуңғы ваҡытта әҙ-мәҙ күренә башланы: йорт фасадтары милли орнамент менән биҙәлә. Был тема хәҙер республика етәкселегенең дә иғтибар үҙәгендә. Ниндәй генә ҡаланы алып ҡараһаҡ та, уның үҙенсәлекле, онотолмаҫ урындары була. Мәҫәлән, Мәскәү - ул Кремль, Ҡыҙыл майҙан, Санкт-Петербург - Эрмитаж, Ҡышҡы һарай. Шуның кеүек, Өфө лә үҙенең мотлаҡ булырға тейешле йөҙө менән тартып, ылыҡтырып торһа, насар булмаҫ. Ул хатта ҡала төҙөлөшөнөң генераль планы үҙгәртелгәндә лә үҙгәрешһеҙ ҡалырға тейеш.

Әле шундай тренд барлыҡҡа килде - артыҡ сығым талап итмәгән һәйкәлдәр, композициялар, яҙыусыларҙың, композиторҙарҙың бюстары урынлаштырыла, һәйкәлдәр ҡуйыла. Шулай уҡ урамдарға ла арҙаҡлы башҡорттарҙың исеме бирелә - былар барыһы ла яҡшы күренеш. Үкенескә күрә, Өфө парктар күләме буйынса бик маҡтана алмай: быны дүрт бала атаһы булараҡ әйтәм, сөнки баш ҡалала балалар менән прогулкала йөрөү еңел түгел. Шуға, халыҡ ял итһен өсөн тейешле урындар күберәк булыуын теләргә ҡала. Улар ҙа билдәле бер стилистика менән эшләнергә, үҙҙәренең милли йөҙө булырға тейеш.

**Был йәһәттән баш ҡалала "Урал батыр" эпосы, "Төньяҡ амурҙары", эпос батырҙары, башҡа геройҙар һәйкәлдәре урынлаштырылған аллеялар, комплекстар, ансамблдәр эшләү тураһында идеялар булып тора, әммә улар идея кимәлендә генә ҡала килә. Ошо тәҡдимдәр буйынса фекерегеҙ?**

- Әлбиттә, ыңғай ҡарайым, әммә шул уҡ ваҡытта аңларға ла кәрәк: идеялар, фантазиялар күп, ләкин ҡаланың маҡсат-бурыстары ла бихисап - транспорт ваҡытында йөрөһөн, урамдар ҡышҡыһын таҙа булһын, урамдарҙа ут янып торһон һ.б. Әлбиттә, әлеге ваҡытта мөмкинлектәр ныҡ сикле. Шул уҡ элекке урамдың исемен яңы атамаға алыштырыу өсөн генә лә күпме сығым кәрәк: алтаҡтаны ғына алмаштырҙың да бөттө түгел, бөтөн документтарҙы, штампмисәттәрҙе, шул урамда йәшәүселәрҙең паспорттағы теркәлеү урынын - барыһын да алыштырырға кәрәк. Был тиҫтәләрсә миллион сығым талап итә. Әгәр аҡсаны башҡа нәмәгә тотонорға кәрәкмәй икән, урамдарҙың исемдәрен алыштырырға мөмкин. Ә беҙгә светофорҙар ҡуйырға, ҡайҙалыр асфальт түшәргә, икенсе нәмәләр эшләргә кәрәк. Яңы урамдарға исем ҡушыу иҡтисади күҙлектән ҡарағанда, осһоҙораҡ. Хәҙер һәр урамдың исемен алыштыра башлаһаҡ, һуңынан ҡала етәкселеген аҡсаны елгә осороуҙа ғәйепләйәсәктәр. Шуға ҡарамаҫтан, ҡаланың үҙ йөҙө булырға һәм беҙ ситтән килеүселәрҙе һоҡландырырға тейешбеҙ. Бөгөн нимә менән һоҡландыра алабыҙ: тарихыбыҙ, мәҙәниәтебеҙ, телебеҙ менән. Бөтөн донъяла шулай. Хәҙерге глобалләшеү ваҡытында Таиландта ла, Ҡытайҙа ла компьютерҙар эшләйҙәр. Ә илдең, дәүләттең үҙенсәлеге нимәлә: халҡында, мәҙәниәтендә, тарихында, телендә. Шуға, ҡайһы ғына илгә барып төшһәң дә милли мәҙәниәттәре, аш-һыуы менән таныштырасаҡтар, шуларҙы тәҡдим итәсәктәр. Ошо үҙенсәлектәр халыҡ араһында иғтибарға лайыҡ та. Шуға ошоларға нығыраҡ иғтибар бүлергә кәрәк.

**Өфөнөң имиджын үҫтереү, уны киңерәк таратыу буйынса етерлек эшләнәме? Сөнки сит илдәрҙә генә түгел, хатта Рәсәйҙең ҡайһы бер төбәктәрендә лә башҡорттарҙың кем икәнен, Башҡортостандың ҡайҙа урынлашҡанын белмәйҙәр, тиҙәр...**

- Был - тормошҡа ашырыу йәһәтенән бик ҡатмарлы мәсьәлә. Территориаль маркетинг тигән төшөнсә бар, йәғни, төбәкте күрһәтеү. Ул тотош тикшеренеү проблемаларын үҙ эсенә ала. Мәҫәлән, республиканы йәки баш ҡаланы ниндәй өлкәлә, ниндәй маҡсаттан сығып күрһәтергә теләйһең? Сит илдәрҙән туристар килһен өсөнмө, әллә инвесторҙар килһен типме? Мәҫәлән, мең ярым ҡытай экскурсияға килде икән, ти. Уларҙы ҡайҙа урынлаштырырға, ҡайҙа алып барырға? Әле, Аллаға шөкөр, ШОС һәм БРИКС илдәре саммиттарына Европа кимәлендәге ҡунаҡханалар төҙөнөк. Хәҙер илдәге күп конгрестар Өфөлә үтә. Бындай ҡунаҡханалар баш ҡалала ғына. Килгән ҡунаҡтарға нимә күрһәтә алабыҙ: Салауат Юлаев һәйкәле, Конгресс-холл, Дуҫлыҡ монументы һәм Ләлә мәсете. Артабан ҡайҙа алып барырға? Райондарға алып сығыу өсөн ҡунаҡханалар, экологик ҡаласыҡтар, туристик маршруттар, сувенир продукцияһы, ете телгә тәржемә итә алған гид-тәржемәсе кәрәк. Эйе, беҙ туристарҙы саҡыра алабыҙ, әммә улар килеп, төбәкте тейешле кимәлдә күрһәтә алмаһаҡ, кире имидж ғына эшләйәсәкбеҙ. Ҡунаҡ саҡырғас, итең бешергә тейеш, итең бешмәһә, битең бешә.

Икенсе мәсьәлә: Өфөнө ҡайҙа күрһәтергә теләйбеҙ - Рәсәйҙәме, әллә донъяламы? Үҙебеҙ өсөн асыҡлағас, ниндәй ҡалаларҙа икәнлеген билдәләргә кәрәк. Был маҡсатлы алып барылған мәғлүмәт кампанияһы булырға тейеш. Ниндәй маҡсат менән пиар-кампания башларға теләйбеҙ - шул аудиторияға мөрәжәғәт итергә, шуларға сығырға кәрәк. Был эш етди сығымдар талап итә. Беренсенән базарҙы тикшереү зарур, икенсенән, ниндәй һөҙөмтә көтәһең: туристар килһенме, инвесторҙармы, спортсылармы, ағас эшкәртеүселәрме, сәнәғәтселәрме... Әлбиттә, мәғлүмәт тә булырға тейеш. Мәҫәлән, фольклориада үткәрәбеҙ икән, был хаҡта бөтөн донъя беләсәк. "Апимондия", Бөтә донъя балалар уйындары - был йәһәттән баш ҡаланы һәм республиканы күрһәтеү бара, иң мөһиме, һөҙөмтәне үҙебеҙ күҙалларға тейешбеҙ. Нимәлер эшләрҙән алда, уны ни өсөн эшләгәнеңде үҙең аңларға, ҡыҙыҡһыныу белдергән аудиторияны өйрәнергә, кәрәк икән, уларға мөрәжәғәт итергә тейешһең. BBC күрһәткән фильм менән үҙең хат таратыу бер түгел. Әле эш алып барыла, киләсәктә һөҙөмтәһе лә булыр тип ышанайыҡ.

**Бөгөн республика гәзиттәре заманға яраҡлашырға тырыша, үҙенең юлын һайлай, ҡайһыларылыр электрон варианттарға күсә. Беҙ үҙебеҙҙең менталитет менән электрон гәзиттәргә күсергә әҙербеҙме?**

- Донъяла баҫма матбуғат ҡаламы, әллә уларҙы электрон матбуғат баҫма ҡыҫырыҡлап сығарамы, тигән бүленеш юҡ. Республикала ла ундай хәл булмаясаҡ, сөнки беҙ донъя буйынса ҡарап, күҙәтеп торабыҙ. Донъялағы баҫма матбуғат бөгөн үҙен Рәсәй баҫма матбуғатына ҡарағанда, проблемалары булһа ла, ышаныслыраҡ тоя. Европала баҫма матбуғаттың иҡтисади, матди хәле яҡшыраҡ. Шулай уҡ Бөйөк Британияла шундай тенденция күҙәтелә, халыҡ электрон гаджеттарҙы ҡулланыуҙы кәметеп, баҫма матбуғатҡа яҙыла, һөҙөмтәлә, тираж арта. Финляндияла интернет бынан 10 йыл элек тулыһынса үтеп бөтөүенә ҡарамаҫтан, халыҡтың 90 проценты урындағы гәзит-журналдарға яҙыла. Әлбиттә, улар эшләгән иҡтисади шарттар - уныһы икенсе мәсьәлә. Германия, Франция, Англия кеүек үҫешкән илдәрҙә баҫма матбуғатҡа дәүләт ярҙамы күберәк күрһәтелә - субсидиялар, һалым ташламалары бирелә.

Мәҫәлән, Францияла 18 йәшкә еткән һәр йәш кеше теләгән гәзитенә бушлай яҙыла ала, ә Германияла "Мәктәптәге журналдар" программаһы эшләй һәм уның буйынса 30 балалар журналынан торған комплектҡа бушлай яҙылырға була. Голландияла һәр студент биш йыл дауамында бер журналды бушлай алдырыу мөмкинлегенә эйә.

Рәсәйҙә иһә әлегә ошо яңылыҡтарҙы ҡарап, күҙәтеп баралар һәм Хөкүмәткә ярҙам һорап мөрәжәғәт итәләр, тәҡдимдәр индерәләр. Хатта милли матбуғат өсөн. Әле бына саха коллегалар инициативаһы менән Рәсәйҙә Милли киң мәғлүмәт саралары ассоциацияһы ойошторолдо. Милли баҫмалар баҙарға яраҡлашып китә алмай, реклама биреүсе баҙар ҡеүәте ҙурыраҡ булған мәғлүмәт сараһына, йәғни рус телле баҫмаларға йөҙ тота. Уларҙы милли һәм балалар баҫмалары ҡыҙыҡһындырмай. Ләкин милли киң мәғлүмәт сараларының тәғәйенләнеше социаль йүнәлешле - тел, мәҙәниәт, ғөрөф-ғәҙәттәр, йолалар, балалар өсөн рухи тәрбиә биреү һ.б. Шуларҙы иҫтә тотоп, уларға айырым ҡараш булырға тейеш. Быны Хөкүмәт тә аңлай һәм мөмкинлектән сығып, милли баҫмаларға ярҙам күрһәтелеп тора.

Электрон киң мәғлүмәт сараларының баҙарҙа үҙ урыны бар, әммә видеомагнитофондар барлыҡҡа килгәс, барыһы ла, тиҙҙән театрҙарҙың, кинотеатрҙарҙың кәрәге лә ҡалмаясаҡ, улар ябылып бөтәсәк, ти ине. Видеокассеталар DVD-дисктарға алышынды, улары флешкаға күсеп бөттө, телевизор бар, интернет бар, театрҙарға, кинотеатрҙарға халыҡ барыбер йөрөй. Быныӊ менән нимә әйтергә теләйем: матбуғаттың йәмғиәттә үҙенең урыны бар һәм ул урын юғалмаҫ, тип уйлайым һәм өмөтләнәм.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмәне йомғаҡлап, "Ғүмерегеҙҙең бер артылышына еттегеҙ, артҡа боролоп ҡарап, үҙегеҙ өсөн ниндәй һығымталар яһай алаһығыҙ, нимәләрҙе һәйбәт эшләнегеҙ, нимәләрҙе эшләп еткермәнегеҙ... Эх, тип үкенгән ваҡыттарығыҙ булдымы?" - тигән һорауға Марат Әсхәт улы түбәндәгесә яуап ҡайтарҙы: "Үткән юлыма үкенмәйем, һайлаған һөнәремдән ризамын. Тарихҡа тартылдым, саҡ ҡына үҙгәртеп, гуманитар тарафҡа йүнәлеш алдым. Ләкин иң ҙур ҡаҙанышым - минең дүрт балам. Ғүмерҙә лә, ҡалала йәшәп, дүрт бала атаһы булырмын, тип уйламағайным. Шуға, кешенең был донъяла ҡалған иң мөһим эҙе - уның балалары, тип уйлайым. Сөнки байлыҡ, дан, дәрәжә - улар бөгөн бар, иртәгә юҡ. Минең байлығым, даным, дәрәжәм - башҡортса һөйләшкән балаларым!"**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

**✓ *Тыңлаусыларҙың береһе лә: "Ҡайҙан белә ине Ворошилов һине?" - тип һорарға баҙнат итмәне. Шулай ҙа бер аҙҙан олатайҙың "Ворошиловский стрелок" тигән ҡушаматы барлыҡҡа килде.***



Хәйҙәр ТАПАҠОВ

# Ҡыш Бабай бүләге

(Моңһоу юмореска)

Яҡын дуҫым, институт йылдарындағы һабаҡташым Фәрит Юлмөхәмәтов Белорет районында йәшәй. Минең менән бергә уҡытыусы һөнәрен үҙләштереп, диплом алһа ла, күптән инде икенсе йүнәлештә һайлап, урман эштәре менән шөғөлләнә, лесничий. Ҡатыны Разия ғүмере буйы алыштырғыһыҙ почта мөдире. Яныраҡ, туғандарынан ҡунаҡтан ҡайтышлай, Юлмөхәмәтовтар юл яҙлыҡтырып, беҙгә һуғылды. Күңелле табын артында тормош хәлдәре хаҡында гәпләшкәндә Разия ханым үҙе менән булған бер ваҡиғаны һөйләне.

- Хәҙерге ауыр заманда кешегә ярҙам итке лә килә, әммә ҡайһы саҡ күрһәткән игелегеңде аңлап еткермәйҙәр, тейешенсә ҡабул итмәйҙәр, баһаламайҙар, бер һүҙ менән әйткәндә, ҡылғандарың халыҡ мәҡәлендәгесә "Ит изгелек, көт яуызлыҡ"ҡа ҡайтып ҡала. Хәйер, 10-11 йәшлек малайҙы ҡайһылайтып белекһеҙлектә ғәйепләмәк, битәрләмәк кәрәк, - тип башланы Разия ханым хикәйәһен. - Былтыр декабрь баштарында почтаға Ғәзинур исемле малай килеп инде. Ата-әсәһе аварияға эләгеп, бер төптән үлеп киткәс, ул иç белгәндән бирле өләсәһе менән йәшәй. Ҡартлыҡ һәм етемлек буйынса пенсия-пособие алһалар ҙа, айлығын әүеш-тәүеш итеп, осто-осҡа ялғап көн итәләр. Малай ҡасаба мәктәбендә уҡый, йоҡа ғына куртка, йәйге кросссовкалар кейеп йөрөгәнлектән, уҡыуға китешләй йә кире ҡайтҡанында беҙгә, почта бүлексәһенә йылынырға инә. Сәй эскән сағыбыҙға тап килһә, Ғәзинурҙы ихласлап янымыҙға саҡырабыҙ, кеçәләренә тәмтом тултырып оҙатабыҙ. Ул алдына ҡуйылған һыйҙан да, төрөлгән күстәнәстәрҙән дә баш тартмай, мәгәр үҙен ипле, тыйнаҡ тота. Был юлы малай нишләптер һуңға ҡалған, мин дә шәмбе көн таратаһы гәзит-журналдарҙы әҙерләп маташам.

- Разия апай, инергә мөмкинме? - Ҡунағым, уңайһыҙлангандай, ишек төбөндә туҡтап ҡалды.

- Бәй, һорап торған буласы, әйҙә, үт! Кисҡорон ныҡ һалҡынайта, өç-башың да йоҡа, - тип һөйләнеп ҡаршыланым.

- Конверт килтергәйнем. Йәшниккә һалайым тиһәм, эстә ут күренгәс, тиҙерәк китһен, тип, бында индерҙем.

"Кемгә икән? Уның бит яҡын туғандары юҡ хисабында. Ошоғаса хат яҙғаны ла, ситтән сәләм алғаны ла булманы..."

- Ҡана, хатыңды бир ҙә, ултырып, әҙерәк йылынып сыҡ!
- Эргәмдән урын күрһәттем.

Ғәзинур оҙаҡ мөштөрҙәгәндән һуң, түш кеçәһенән таушалып бөткән конверт килтереп сығарҙы ла, ҡәҙерле нимәләй күреп, ҡулында әйләндергеләне, тапшырырғамы-юҡмы тигәндәй, икеләнеп торҙо:

- Иртәгә китерме икән?
- Таң менән почта машинаһы килә, башҡа корреспонденцияларға ҡушып һалырмын.
- Ә улар күпме?
- Хәҙер бит башлыса телефон аша ғына хәбәрләшәләр, шулай ҙа хат та яҙалар ҡайһы саҡ. Етерлек. - Өçтәл өçтөндәге өйөмгә ымлайым.
- Апаруҡ икән шу... Ошоноса ҡағыҙҙар араһында минеке юғалып-нитеп ҡуйһа, ҡайһылайтырмын?
- Юғалмаç, ҡиммәтле хатҡа тәғәйен маркалар йәбештерермен, - тип тынысландырҙым Ғәзинурҙы.

Малай сығып киткәс, конвертҡа күҙ һалдым, ундағы тапшырылаһы адрес тапҡырына ҙур хәрефтәр менән "Ҡыш бабайға Белорет районында йәшәүсе Юламанов Ғәзинурҙан", тип яҙылған. Аныҡ билдәләнешһеҙ нимәнең бер ни тиклем ваҡыттан һуң сүп һауытына ырғытыласағы көн кеүек асыҡ.

Үҙеңә төбәлмәгән нәмәне уҡыу әҙәпһеҙлек, рухи бурлыҡ иçәпләнһә лә, асып ҡарарға йөрьәт иттем. Унан "Яңы йылда бар теләктәр ҙә тормошҡа ашһын!" тигән ҡанатлы һүҙҙәр, ҙур тоҡ йөкмәп урманҡырҙар ҡыҙырып килгән Ҡыш Бабайҙың төçлө ҡәләмдәр менән альбом битенә эшләнгән һүрәте килеп сыҡты. Ҡушып һалынған ус аяһылай сәләм кисәгенең эстәлеге былайыраҡ: "Хөрмәтле, ҡәҙерле, йомарт, игелекле Ҡыш Бабай! Минең һинән башҡа мөрәжәғәт итер, ярҙамға килер бер яҡыным да юҡ. Өләсәйем менән икәү генә йәшәйбеҙ. Ул һәйбәт, аҡыллы кеше. Бәләкәй генә пенсияға ҡарап торабыҙ. Ә аҡса көн һайын аҙыҡ-түлек, йорт өсөн кәрәк-яраҡ алыуҙан үтмәй. Тормош көтөү ҡиммәтләнде, тиҙәр ололар. Миңә тәмлекәстәр ҙә бик һирәк эләгә. Шулай, ҡыуаныстар кисермәй, яҡшыға ымһынып көндәр үтә. Ҡыш етте, яңы йыл яҡынлаша. Ҡағыҙҙан матур ҡар бөртөктәрен семәрләп эшләп, түбә таҡтаһына йәбештереп, аллы-гөллө сылбырҙарҙы тәҙрә өçтәренә элеп, ҡаршыбыҙҙа йәшәгән Фәйзулла олатай килтергән урман ҡупшыҡайын биҙәп, түргә урынлаштырып, байрамға әҙерләндем. Өйөбөҙгә яҡтылыҡ, йәм ингәндәй булды. Көн һайын иртә таң менән йоҡонан уянғас та берәй нимә ятмаймы, тип шыршы төбөн ҡарайым. Бүләккә өмөт иткән балалар бик күп шул, уларҙың һәр береһенә барып өлгөрә лә алмайһығыҙҙыр. Ә бына класташым Илһамдың шыршы төбөнә тау саңғыһына ҡушып, ҡыш көнө кейә торған спорт костюмын һалып киткәнһегеҙ икән. Була бит ҡотло, ырыçлы йәндәр, ә ундай ҡиммәтле әйберҙәр яңылыш ҡына төшөмә лә инмәй хатта. Мин дә яҡындарыма хәлемдән килгәнсе, мөмкинлектәремдән сығып, сюрприздар әҙерләнем; өләсәйемә арнап күркәм шиғыр яҙҙым, ижадымды төнгө 12-лә шыршы төбөнә баçып һөйләп ишеттерергә йыйынам, ә Аҡбайға өлөш алданыраҡ эләкте, уға ҡалын таҡтанан оçталығым самаһында оя әтмәләнем. Этем ҡойроғон болғап, һикрәндәп ҡыуанды, ҡасандыр иркәләп үпкән әсәйемә оҡшатып, биттәремдән ялап-ялап алды. Башҡа балалар көн һайын дәрестән һуң шау-гөр килеп саңғы-сана шыуалар. Уларға күңелле, тик әлеге үтенесем икенсе нимә хаҡында. Көндәр һалҡынайҙы, дәү тоғоғоҙҙан йылы куртка, ҡолаҡсын кәпәс, килешле ботинкалар, дебеттән бәйләнгән бейәләйҙәр алып, шуларҙы миңә ебәрә алмаçһығыҙмы икән? Тағы күршемдә Раушания исемле һөйкөмлө ҡыҙ йәшәй. Өләсәйем ҙур үç тә уны мотлаҡ кәләш итеп ал, бигерәк егәрле, эшлекле, ярҙамсыл ҡыҙыҡай, ти. Уның әйткәндәре менән килешәм. Әгәр һорағандарыма өçтәп, сәскәле яулыҡ, көмөш балдаҡ та һалһағыҙ, уларҙы ун һигеҙ йәшем тулғас, хәҙерҙән күҙем төшкән кәләшемә кейәү егетенең бүләге итеп тапшырыр инем. Посылканы тура почтаға ебәрегеҙ, унда мине күргән-белгән апайҙар эшләй. Үтенес менән, Ғәзинур".

Шул юлдарҙы уҡығас, күҙҙәремә йәш төйөлдө, бала бит юҡтан бүләк көтә, тормошҡа ашмаçтайға өмөтләнә! Иртәгеһен башҡа почтальон ҡыҙҙар йыйылғас, Ғәзинурҙың хатын уҡып ишеттерҙем. Күмәкләп аҡса йыйып, малайға яңы йыл бүләге әҙерләргә ҡарар иттек. Ҡағыҙ йәшниктәге әйберҙәрҙең иң өçтөнә тәм-том, сәскәле яулыҡ менән көмөш балдаҡ һалырға ла онотманыҡ. Бер-ике көндән шартына тап килтереп, Ғәзинурға посылка килгәнлеген хәбәр итеп, ҡағыҙ киçәге ебәрҙем. Өләсәһе менән икәүләп килеп алдылар. Әбей беҙҙең тарафҡа ҡарап шиксел, ышанмайыраҡ ҡарап алһа ла, бер ни өндәшмәне...

Аҙна үтеүгә, Ғәзинур тағы күренде, ҡулына йәнә конверт тотҡан. Төбөнә төшөп төпсөнөп маташмай ғына тапшырҙы, сөнки хатының кәрәк ергә барып етеренә ышана ине ул. Хатты астым. Ҡағыҙ битенә ҡышҡы кейемдәге малай һүрәте төшөрөлгән. Ул алыçта күренгән Ҡыш Бабайҙы ҡулын болғап сәләмләй. Һүрәт аçтына яҙылғандарға күҙ йүгерттем: "Йомарт Ҡыш Бабай! Донъяла барлығыңа өмөтләнеп йәшәй инем, хәҙер инде тамам ышандым. Күктән төшкән байлығымды күргән малай-ҡыҙҙарҙың күҙҙәре шаҡмаҡтай булды. Юлай һеҙҙән кеçә телефоны, Рәсимә ноутбук, Рөстәм велосипед таптырып хат яҙырға йыйына. Һорағандарымдың барыһын да теүәлләп ебәргәнһегеҙ, бер нәмә лә онотолмаған. Ҡыш бабай, һеҙ белекле, әҙәм балаһының теләген һүҙһеҙ аңлаған мөғжизәле тылсым эйәһе. Ҡышҡы кейемдәргә ҡушып, моғайын, хәтәр шәп шарф та һалғанһығыҙҙыр әле, тик уныһы килеп етмәне. Уны, моғайын да, юлда берәй почтальон сәлдергәндер. Пуштыла эшләгәндәргә ышаныс самалы хәҙер!.."

Хатты уҡып, ҡыҙҙар менән рәхәтләнеп көлөштөк, тик ул көлөүҙә рәнйеш ауаздары ла сағылып ҡалды...

## АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




## МӘСЕТЛЕ РАЙОНЫ МӘҘӘКТӘРЕ

**Бынан 30-40 йыл ғына элек Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары районда байтаҡ ине. Уларҙың үҙ-ара һөйләшеүҙәре, үҙҙәрен тотоштары, ситтән ҡарағанда бик ҡыҙыҡ күренә торғайны. Бигерәк тә шаян, тапҡыр һүҙҙәргә маһир ине улар. Бөгөн шуларҙың бер нисәһен гәзит уҡыусыларға тәҡдим итәм.**

### Үҙ йүнеңде үҙең ҡара инде

Ике фронтташ, 80 йәшлек Ҡасим менән 70 йәшлек Миңлейәр, сельпо магазинының күтәрмәһендә осраша. Бер-береһен байтаҡ күрмәй торғандар, күрәһең, Ҡасим олатай иçе китеп һөрәнләй:

- Һин тереме ни, Миңлейәр?

Миңлейәр ағайҙың ҡуңырт йөҙөндә үпкәләү билдәләре сағыла.

- Мин нишләп үлергә тейеш, әле һин оло булып йөрөйһөң.
- Эй, Миңлейәр ҡустым, миңә ышанып йөрөмә, мин әллә үләм, әллә юҡ, үҙ йүнеңде үҙең ҡара!

Оҙаҡ ҡына өнһөҙ торған Миңлейәр бабай: "Ярай, улайһа", - тип, тыныс ҡына эйәген ҡаға ла, китеп бара. Ғүмере оҙон була ветеран Ҡасимдың, туҡһанын уҙып ҡына вафат булды ул.

### Ворошиловский стрелок

Ҡасим олатай фронтта булған ваҡиғалар тураһында бәйән итә:

- Бер заман, булып үткән ҡаты алыштан һуң, беҙҙең полкка Ворошилов үҙе килеп төштө. Артынан, оло ҡапсыҡ һөйрәп, ярҙамсыһы килә. Беҙҙе теҙеп ҡуйҙылар, маршал үҙе ҡапсыҡты асып, миҙал тарата башланы. Минең ҡаршыға ғына килеп туҡтағайны, миҙалы бөттө лә ҡуйҙы. Шунда күрәм, кителенән миҙалын сисеп алып, миңә табан килә. Данлыҡлы маршал: "Молодец, Ҡасим!" - тип, үҙенең миҙалын гимнастеркама ҡаҙап ҡуйҙы. Тыңлаусыларҙың береһе лә: "Ҡайҙан белә ине Ворошилов һине?" - тип һорарға баҙнат итмәне. Шулай ҙа бер аҙҙан олатайҙың "Ворошиловский стрелок" тигән ҡушаматы барлыҡҡа килде.

### Артиллерия - һуғыш аллаһы

Ветерандар Бөйөк Еңеүҙең 35 йыллығына мәҙәниәт йортона йыйылған. Өçтәлдәр тулы ашамлыҡ-эсемлектәр. Ике сәғәттән һуң мәжлес тамамлана. Бер аҙ ҡыҙып алған ветерандар фойелағы буфетҡа ашыға, этеш-төртөш китә. Шул ваҡыт: "Артиллерия - вперед, пехота - назад!" - тигән көслө тауыш яңғырай. Бер төркөм артҡа сигенеп, икенселәрен алға үткәрә. Сигенгәндәре "пехота" икән, улары инде "артиллерия"ның ҡуҙғалып киткәнен тыныс ҡына, оҙаҡ ҡына көтөп торҙо. Ысынлап та, "Артиллерия - һуғыш аллаһы икән", - тип хайран ҡалдым.

**Ғәлимйән КӘРИМОВ.**
**Мәсетле районы.**

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

**2006 йылда Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте "Рәсәй рухы" тигән премия булдырғайны. Йыл һайын был премия менән фольклор, йыр һәм бейеү, халыҡ музыка ҡоралдары ансамблдәре, оркестрҙар, сәсәндәр, биҙәү-ҡулланма оҫталары бүләкләнә. Быйыл Сибай сәнғәт колледжы ҡарамағындағы "Урал батыр" сәсәндәр мәктәбе етәксеһе, сәсәниә Асия ҒӘЙНУЛЛИНА конкурстың "Традицион халыҡ мәҙәниәте" номинацияһында билдәләнде. Ул республиканан был премияға лайыҡ булыусы дүртенсе шәхес. Был сәфәре хаҡында Асия Солтан ҡыҙы үҙе һөйләй:**

# МӘСКӘҮ СӘХНӘЛӘРЕН ЯУЛАП...

- Премия "Халыҡ көйө", "Халыҡ йыры", "Халыҡ бейеүе", "Традицион халыҡ мәҙәниәте" һәм "Халыҡ оҫтаһы" номинацияларында 15 сәнғәт эшмәкәренә тапшырылды, матур гала-концерт та булды. 10 йыл эсендә бөтәһе 165 премия тапшырылған.

Мәскәүгә "Рәсәй рухы" премияһын алырға барыу мәләнә тағы ла бер нисә сараны тура килтереп, был сәфәрҙе бик эшлекле кимәлдә үткәрҙек. Сибай ағинәйҙәре, "Талир тәнкә" төркөмө ағзалары - барыбыҙ 10 кеше юлландыҡ Мәскәүгә. Тәүге көндө үк Дәүләт Думаһында депутат Зариф Байғусҡаров менән осраштыҡ. Иртәгәһенә Башҡортостан Республикаһы вәкиллегендә "Урал батыр" эпосын презентациялау булды. Унда Мәскәү башҡорттары, Сибайҙа белем алған һәм бөгөнгө көндә баш ҡалала эшләп йөрөгән фольклорсылар, ғалимдар йыйылды. Был сараны Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге ойошторҙо. Оҫталыҡ дәрестәре үткәрҙек. Башҡорт милли ризыҡтары менән һыйланыҡ. Үҙебеҙ менән буҙа, ҡымыҙ, ҡаҙы, 5-6 төрлө ҡорот, май, эремсек, ҡурмас алып барғайныҡ. Йылҡы итенән бишбармаҡ бешерҙек. Барыны ла башҡорт ризыҡтарының төрлөләгенә хайран ҡалды.



Шул уҡ мәлдә Поленов исемендәге Дәүләт Рәсәй халыҡ ижады йортонда халыҡ ижады буйынса 10 көнлөк семинар бара ине. Унда мин "Урал батыр" эпосын презентациялап, шулай уҡ балалар фольклоры буйынса 45 минутлыҡ лекция менән сығыш яһарға тейеш инем. Сығышым 3 сәғәткә һуҙылды, сөнки материал бик ҙур ине. Унда бөтөн Рәсәйҙән фольклорсылар йыйылғайны. Тәнәфескә туҡталғанда ағинәйҙәрем тағы ла башҡорт милли аштарынан табын әҙерләп торҙо. Бишбармаҡһыҙ булһа ла, ҡатнашыусыларҙы ҡаҡланған ҡаҙылыҡ, ит, сәк-сәк, бауырһаҡ, ҡоймаҡ, буҙа, ҡымыҙҙан ауыҙ иттерҙек. Бынан тыш, биҙәнеү әйберҙәре - ҡашмау, селтәрҙәрҙән күргәҙмә ойоштороҡ. Барғанда үҙебеҙ тейәп алып барған хазиналарҙы күрһәттек. Был ижад йорто тарихында бер милләттең ошондай ҙур күләмле сығышы беренсе тапҡыр ойошторола, тине етәкселәр.

Сәфәребеҙҙең тағы ла бер маҡсаты - "Этно-эрато" Евразия милли костюм юғары модаһы конкурсында ҡатнашыу ине. Был бәйгелә мотлаҡ этнографик костюм күрһәтелергә тейеш. Шуға ла Мәскәүҙә йәшәгән милләттәшебеҙ Мәҙинә Илһамова беҙҙән ярҙам һорағайны. "Талир тәнкә" төркөмө улар менән бергә ҡатнашып, 228 бәйгесе араһында 3-сө урынға лайыҡ булдылар. Шуны ла әйткем килә, беҙ Мәскәүҙә әйберҙәребеҙҙе һөйрәп, метронан метроға йөрөмәнек. Башҡортостан вәкиллеге төркөмгә лә, миңә лә махсус машина биреп ҡуйҙы.

Ә был төп сарала - "Рәсәй рухы" премияһын тапшырыуҙа сәсәндәрҙән мин генә булдым. Бөтәһе 15 төбәктән килгәйнеләр, 2-әүһе биҙәү-кулланма сәнғәте оҫталары, ҡалғандары йырсылар, бейеүселәр, төрлө музыка ҡоралында уйнаусылар. Лауреаттар исеменән шулай уҡ мин генә рәхмәт һүҙе әйттем, режиссер шулай хәл итте. Һәр лауреат сығыш яһаны, бөтәһенә лә 2-шәр минут ваҡыт бүленде, миңә 10 минут сығыш яһарға рөхсәт иттеләр. "Урал батыр" эпосынан, "Алпамыша" эпосынан өҙөк һөйләнем, балалар фольклорынан һәтестәләп күрһәттем. Һәр сығышҡа унда нимә тураһында һүҙ барасағы тураһында бәләкәй генә анонстар эшләнем. Улым Баязит Ғәйнуллин сәхнәгә минең менән сыҡты, ҡумыҙҙа уйнаны, икәүләп өҙләнек тә. Бөрәү ҙә сабырһыҙланып, күп һөйләйһең, тимәне, мин сығыш яһағанда зал тып-тын булды.

Ғөмүмән, миңә ҡарата ихтирамлы ҡараштары, мөнәсәбәттәренән шуны аңланым: Рәсәйҙә, ысынлап та, сәсәнлек мәктәбе юҡҡа сыҡҡан. "Сәсән" тип иғлан иттеләр, экрандарға "сәсән" тип яҙҙылар, йәғни, быға тиклем улар ишетеп өйрәнгән аҡын тигән билдәләмәгә "сәсән" тигәне өҫтәлде. "Иғтибар менән тыңлағыҙ, был бейеү ҙә, таҡмаҡ та түгел, был - халыҡ сәсәне һүҙе", - тине режиссер ҙә репетицияла. Һәр бер һүҙемә ҡул саптылар, һәр һүҙемде күтәреп алып ултырҙылар. Мәскәүҙә бына шулай 6 төн йоҡлап, һәр көнөбөҙҙө уңышлы үткәреп, үҙебеҙ менән шул тиклем ҡәнәғәт булып ҡайтып индек.

АФАРИН!

# ҮҪМЕРҘӘР БЕР-БЕРЕҺЕНӘ...

## "Бирешмә!" тип өндәшә хәҙер



**Күптәр иғтибар иткәндер, 21 декабрҙән "Бирешмә!" тип аталған үҫмерҙәр өсөн беренсе башҡорт сериалы Башҡортостан юлдаш телевидениеһы экрандарына сыкты.**

Ниндәй генә ҡаршылыҡтар осраһа ла, хыялдарына тоғро ҡалырға хәл иткән үҫмерҙәрҙең тарихы йәштәштәренә генә түгел, өлкәндәргә лә оҡшаясағына шик юҡ. Төп ролдәрҙә "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы аша һәр беребеҙгә таныш йөҙҙәр - Гөлсәр Байғусҡарова, Гөлгөнә Баһауетдинова, Хәйҙәр Вәлиев, Данир Ғимаҙиев. "Бирешмә!" сериалын музыкаль фильм тиһәң дә була, һәр серияла төп геройҙар башҡарыуында бер нисә йыр яңғырай. Уларҙы Айҙар Хәмзин менән RNT яҙған, шулай уҡ билдәле башҡорт йырсылары репертуарынан да йырҙар бар. "Тамыр" телеканалы директоры Гөлназ Ҡолһарина әйтеүенсә, сериалды төшөрөү мәлендә ошо йәштәрҙән торған вокал төркөм барлыҡҡа килгән һәм ул, әлбиттә, "Бирешмә" тип аталған. Йыл дауамында төркөм төрлө бәйгеләрҙә, концерттарҙа ла ҡатнашҡан һәм йыл һуңында "Йәшлек-шоу"ҙа еңеүсе булған. Гөлсәр Байғусҡарова "Алтын" Беренсе йәштәр премияһында "Йыл йырсыһы" тип танылған. Гөлгөнә Баһауетдинова ошо көндәрҙә Өфөлә үткән "Башҡортостан гүзәле" конкурсында еңеп сыҡҡан.

Һәр серия менән тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына күренгән тарих төрлө ваҡиғалар менән байый бара. Һауа шарында осоу булһынмы, дауахана реанимацияһымы - һәр береһе геройҙарҙы яңы яҡтан аса. Һәр геройҙың үҙенең тарихы, ғаиләрендәге мөнәсәбәттәр ҙә үҙенсәлекле. Шулай ҙа йәш актерҙарға был тәүге тәжрибә нығ оҡшаған, "Беҙ үҙебеҙҙе уйнаныҡ, шуға еңел булды", - ти Хәйҙәр менән Данир.

Айгөл Ибраһимованың геройын да тамашасы яратып өлгөргәндер. Үкенескә күрә, Айгөл тормошта ла ошондай ауыр һынауға дусар. Уның әсәһе, "Әсә йөрәге" Әсәләр советы рәйесе Гөлшат Ибраһимова билдәләүенсә, "Тамыр"ҙарҙың ошондай үҙенсәлекле балаларҙы үҙҙәренең проекттарына йәлеп итеүе хуплауға лайыҡ. "Беҙҙең ғаиләөсөн ҡыҙымдың сериалда төшөүе етди аҙымға әтәрҙе - беҙ операция эшләтергә ризалаштыҡ. Бирешмә, тип бер-беребеҙҙең кәйефтәрҙе күтәреп алабыҙ йыш ҡына", - ти Гөлшат Әхәт ҡыҙы.

Сериалда ҡатнашыусы профессиональ артистар иһә балаларҙың һәм проектты тормошҡа ашырыусыларҙың ихласлығынан мөкиббән киткән. Башҡортостандың халыҡ артисы Илдар Ғүмәров әйтеүенсә, артистар үҙҙәрен мөғжизәле донъяға килеп ингән кеүек тойған. "Йәмәғәт, - тине Илдар Ибраһим улы сериалды презентациялау сараһында тамашасыларға мөрәжәғәт итеп, - әгәр ҙә йәнегеҙҙе дауаларға теләһәгеҙ, тап ошо мөхиткә эләгергә тырышығыҙ. Ошо мөхиттә үҙемдең йәшемде лә, кемлегемде лә оноттом, улар менән бергә бала сағыма әйләнеп ҡайтып, ошо сихри мәлдәрҙе кисерҙем".

- "Тамыр" каналы бөгөн ҙур уңыштарға өлгәшә, үҫмерҙәр өсөн махсус сериал төшөрөү ҙә ошоноң күрһәткесе. Төп геройҙар "Сәнгелдәк" тапшырыуында башлаған юлын бөгөн сериалда дауам итә. Был эшкә күп көс һалынған һәм уға ҙур өмөттәр ҙә бағлайбыҙ. Элек "контент" тигән һүҙҙе эшмәкәрлеге телевидение менән бәйле кешеләр генә ҡуллана ине, бөгөн контенттың нимә икәнен һәр бала белә. Телевизорҙа ла, интернетта ла төрлө темаға контент күп, кем нимә менән шөғөлләнә, үҙенә кәрәклеһен табып, ҡарай ала. Ошо бай контент араһында "Бирешмә!" сериалы үҙенең тамашасыларын табып, лайҡтар йыйып, телевидениеның рейтингын күтәрһен, - тине БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты Эльвира Ринат ҡыҙы Айытҡолова ла проектта ҡатнашыусыларҙы ҡотлап.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Тамыр" телеканалының йәш быуынды тәрбиәләүҙәге, уларҙың күңелен үҫтереүҙәге эшмәкәрлеге тураһында күп тапҡырҙар яҙғаныбыҙ булды. Ғөмүмән, уларҙың һәр эше оло баһаларға, хуплау һүҙҙәренә лайыҡ. "Башҡортостан" дәүләт теле-радио компанияһы директоры Рөстәм Зарафетдинов юҡҡа ғына "Тамыр" - ул Бөтөн Рәсәй телевидениеһы киңлегендә сифат билдәһе булараҡ ҡабул ителә", тигән баһа бирмәгәндер уларға. Ә был сериал иһә үҫмерҙәр араһында башҡорт теле мөхитен киңәйтеү йәһәтенән дә, бер-береһен "Бирешмә!" тип хуплау буйынса ла ҙур эш башҡарасаҡ әле.**

**"Ҡомар" битендәге материалдарҙы Ләйсән НАФИҠОВА әҙерләне.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙОҠО КЕМГӘ КӘРӘГЕРӘК?

■ Астма менән аллергия ҡайнатылған һөт эсеүҙән барлыҡҡа килеүе ихтимал, тип раҫлай немец ғалимдары. Ҡайнатылмаған һөттә бактериялар күп тиеүселәргә уларҙың дәлилдәре лә бар. "Таҙа" ризыҡтар һәр ваҡыт организм өсөн файҙалы булмауы ла бар. Иммунитет барлыҡҡа килһен өсөн организм бактериялар менән осрашырға тейеш. 6 йыл дауамында барған тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡайнатылмаған һөт эсеүсе балалар астма менән һирәк ауырыған. Иммунологтар әйтеүенсә, быны һөттәге Омега-3 тәьсире менән аңлатып була. Ул ҡайнатылған, майһыҙландырылған һөткә ҡарағанда, яңы һауылған һөттә күберәк була.

■ Табиптар әйтеүенсә, оҙон ғүмер кисерер өсөн сәләмәт йәшәү рәүеше алып барырға кәрәк. Ә бына "Forbes" журналы 100 йәштән уҙған кешеләрҙән һорау алып, уларҙың оҙаҡ йәшәү серен асыҡларға тырышҡан. Баҡтиһәң, 100 йәшлек иң сәләмәт кешеләр Японияла йәшәй икән, сөнки улар йәшелсәне, балыҡты күп ашай. Йөмортҡа, ит, һөт аҙыҡтары бында аҙыраҡ ҡулланыла. Оҙаҡ йәшәүселәр көнөш итеүенсә, газлы эсемлектәр сәләмәтлеккә зыян килтерә. Уның урынына һыу, мүк еләге һуты, һөт йәки сәй эсергә кәрәк. Ҡәһүә һәм алкоголле эсемлектәр тыйыла. Шулай уҡ ҡайһы берҙә үҙеңә яратҡан аҙыҡтарыңды ашарға рөхсәт итергә кәрәк, ти табиптар. Көн һайын нимә менәндер шөғөлләнеү шулай уҡ ғүмерҙе оҙайта. Телевизор алдында ултырыуға ҡарағанда хәрәкәт итеү күпкә яҡшыраҡ. Баҫҡыстан йәйәү менеү, урамда йөрөп килеү шулай уҡ сәләмәтлек сығанағы икән. Баш мейеһе лә ял итергә тейеш түгел. Бының өсөн иң ябай юсул булып кроссвордтар сисеү тора. Берәй музыка ҡоралында уйнау ҙа мейене йәш һаҡлай. Оло кешеләр өсөн доғалар уҡыу ҙа кәрәк, был уларҙы тынысландыра һәм оҙайлы йәшәүгә булышлыҡ итә. Психиатр Гэри Кеннеди раҫлауынса, йәштәр менән аралашыу, уларҙы тәрбиәләү шулай уҡ үҙеңдә кәрәкле итеп тойорға мөмкинлек бирә.

■ Дархэм университеты неврологы Аманда Эллисон белдереүенсә, ир-ат ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда һалҡын тейҙереү һәм киҙеү симптомдарын ауырыраҡ кисерә. Доктор әйтеүенсә, ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егеттең баш мейеһе үсешенең бер осоронда айырмалыҡтар барлыҡҡа килә. Күп күрһәткестәр, шул иҫәптән, тән температураһы өсөн яуап биреүсе баш мейеһе өлөшө ир-егеттәрҙә тестостерон бүленеп сығыу һөҙөмтәһендә тиҙерәк үсешә. Мейенең был өлөшө организмға инфекция инеүенә шунда уҡ тәьсир итә һәм үҙенең эшен башлай, һөҙөмтәлә, тән температураһы күтәрелә. Тимәк, ирҙәрҙә дәүмәл ағынан ул ҙурыраҡ булыу сәбәпле, улар нығыраҡ сирләй.

■ Бөйөк Британия ғалимдары билдәләүенсә, ҡатын-ҡыҙға ир-егеттәргә ҡарағанда оҙайлыраҡ йоҡо талап ителә. Баҡтиһәң, ҡатын-ҡыҙҙың баш мейеһе бер юлы төрлө мәсьәләләрҙе хәл итеүгә һәләтле һәм көн дауамында көсөргәнешлерәк эшләй. Баш мейеләренең "ҡатмарлы" булыуы сәбәпле, ҡатын-ҡыҙға оҙағыраҡ йоҡлау талап ителә. Йоҡлаған саҡта мейенең хәтер, уйҙар, тел-мәр өсөн яуап биргән өлөшө хис-тойғолар тыуҙырған көсөргәнештән арынып, ял итә икән. Быға тиклем ғалимдар артыҡ йоҡлауҙың да зыян булыуы хаҡында белдергәйне. Йоҡо туймау йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшмәкәрлегенә, ҡан баҫымына йоғонто яһай, ә артыҡ йоҡлау йөрәк сирҙәренә алып килә.

ЙОЛА ТОТҠАН - ЯҘЛЫҠМАҪ

# БАЙРАМ ӨҪТӘЛЕНДӘ...

## Һуғым аштары һәм... ...ҡаҙ түшкәһе



**Халҡыбыҙҙың бөгөнгәсә һаҡланып килеп еткән һәм теүәл үтәлгән йолаларының береһе ул - һуғым һуйыу. Алдан уҡ инселәп, итен ҡышын ашау өсөн махсус һимертеп салынған малды һуғым тиҙәр, көндәр ныҡлап һыуытҡас, туған-тыумаса йыйылышып башҡара был эште. "Һуғым һуйыу - үҙе бер байрам инде ул", тиҙәр Ғафури районы Ҡолҡан ауылында йәшәүсе Резеда менән Наил РӘХИМОВтар ҙа. Был йәш ғаилә ауылда төпләнеп, ата-бабаларҙан ҡалған һөнәрҙәр һәм йолаларға тоғролоҡ һаҡлап йәшәй, ҡыҙҙары Айгөл менән улдары Илһамды ла ошо мөхиттә тәрбиәләй. Йорт хужабикәһе Резеда Миңләхмәт ҡыҙы менән тап ошо йола үҙенсәлектәре тураһында һөйләшәбеҙ.**

**➔ Ауыл тормошона күптәр ҡыҙыҡһа ла, унда йәшәргә атлығып тороусылар һирәк барыбер. Ауылда йәшәүҙең йәмен нимәлә тояһығыҙ?**

-Тыуған ерем - Сәйетбаба ауылы, килен булып төшкән ерем Ҡолҡан. Төшкән ер ҙә тыуған ер кеүек, ҡәҙерле була. Ҡайһы саҡта бер минут ултырып ял итергә ваҡыт табылмай китһә лә, ауыл тормошо үҙенсә ҡыҙыҡлы. Балаларға ла ҡулайлыраҡ, һауа ла саф, ризыҡ та үҙеңдеке. Ғөмүмән, тыуған ер кешегә көс бирәлер, тип уйлайым. Юҡһа, ситтә йәшәүселәр тыуған ауылын һағынып һарғаймаҫ ине.

Үҙем Сәйетбаба урта мәктәбендә уҡытыу буйынса директор урынбаҫары булып эшләйем. Тормош иптәшем Наил элек колхозда эшләй ине, хәҙер умартасылыҡ менән шөғөлләнә. Колхоз тарҡалғас, ҡортсолоҡ ғаиләнең төп шөғөлө һәм килем алыу юсулы булып ҡалды. Ҡайным менән ҡәйнәмдең өс улына ла өйрәткән һөнәре ул, бәләкәйҙән уларға эйәреп, ҡорт ҡарап үҫкәс, яратып эшләйҙәр. Ҡәйнәмә 73 йәш, ул әле лә ҡорт ҡарарға ярҙам итә, үҙ ихатаһында мал да тота. Йыл һайын тауыҡын да, ҡаҙын да алырға тырышабыҙ. Һыйырҙың ағын эшкәртеп, майын эшләп, ҡоротон ҡайнатып ҡуям. Күстәнәскә биреп ебәрергә лә йәтеш, үҙең дә йыл әйләнәһенә тәмле ризыҡтан өҙөлмәйһең. Малды ла күпләп торорға тырышабыҙ.

**➔ Быйылғы ҡыштың ғәҙәттәгенән һуңлабыраҡ килеүе арҡаһында ауыл халҡының саҡ ныҡлап һуғымға тотонған мәле. Һеҙ был йоланы атҡарып өлгөрҙөгөҙмө?**

- Ер туңып, ҡар ятмайынса, һуғым һуйырға тырышмай ул ауыл халҡы. Ай башында ғына һуғым һуйып, һуғым ашына саҡырып алдыҡ. Туған-тыумаса бергәләшеп һуя беҙҙең ауылда, көн һайын тигәндәй береһенә йөрөйһөң. Кулы йомшаҡ, тип, Сәғит ағай Хәйруллиндан салдырырға тырышалар. Шул уҡ көндә һуғымды һыйыусыларҙы, эсәк йыуыусыларҙы ашҡа саҡыраһың. Өлөшләп ит биреп ҡайтарыу йолаһы бар. Мул ғына итеп бешерелгән итте өлөшләп, алдан әҙерләп ҡуяһың, бер өлөшөн табынға картуф, кишер менән ҡуяһың. Өлөштәрҙе ҡунаҡтарыңды оҙатҡан саҡта бирәһең. Уңған хужабикәләр тултырма тултырып, уны бешереп тә өлгөрә. Ҡәйнәмдең, күршеләремдең һуғым ашы табынында гел тултырма була. Беҙҙең яҡта тултырманы һыйыр эсәгенән тыш, йылҡы эсәгенә лә тултыралар. Ул бигерәк тәмле килеп сыға. Бына шулай үҙенә күрә байрамға әүерелә һуғым һуйыу. Ауылда айырыуса күңел күтәренкелеге һиҙелә, шулай булмайынса, көткән малыңдың имен-аман ҡураға инеүе лә шатлыҡ.

**➔ Яңы йыл байрамын ниндәй өмөт-хыялдар менән ҡаршылайһығыҙ?**

- Яңы йылды бигерәк тә балалар түҙемһеҙләнеп көтә, тырышып уҡыйҙар. Икеһе лә уҡыусы, уҡыуҙары ла, тәртиптәре лә яҡшы. Быйыл "Кейекбаев уҡыуҙары" фәнни-ғәмәли конференцияһының район этабы беҙҙең ауылда үтте, унда Айгөл дә, Илһам да призлы урындар алдылар. Улыбыҙ атаһының шөғөлө - умартасылыҡ тураһында сығыш яһап, беренсе урын яуланы. Был эшләнеү эшен үҙенең тәжрибәһенән сығып яҙҙы, үҙе лә ҡорттан ҡурҡмай, атаһына ярҙамлашып йөрөй. Корттоң һарығанын күҙәтеү - уның бурысы. Ә беҙҙең бар өмөт-хыялдарыбыҙ балалар менән бәйле, уларҙың шатлыҡтарына, бәхеттәренә беҙ ҙә ҡыуанабыҙ. Барыбыҙ ҙа имен-һау булайыҡ, рух күтәренкелеге, яҡшы кәйеф юлдаш булһын.

**Яңы йыл алдынан, ҡырпағайҙа үткәрелгән һуғым, ҡаҙ өмәһе йолалары халҡыбыҙҙа ныҡлы тамырланған. Улар ҡүмәк көс менән атҡарыла, матур бер байрам төҫөн ала торған йолалар.**

Әле лә ҡырпағай көндәренең береһендә беҙҙең Мансур ауылы ағинәйҙәре Сәләхова Разияның йортона ҡаҙ өмәһенә йыйылды. Йола тәртибен бер аҙ һүрәтләп китәйем. Эште башлар алдынан: "Икендегә етмәһен, көнө уҙып китмәһен, эшебеҙ еңел булһын!" - тип теләк теләп алды арабыҙҙағы иң олоһо - 78 йәшлек Хәлимә апай. Өмәгә йыйылыусы ағинәйҙәр артабан эште еңеллләштереү маҡсатында ҡаҙҙарҙы ҡайнар һыуға тығып алды ла, ҡалын туҡымаға урап, бер аҙ ғына быҡтырып тоттолар. Унан инде түшкәнән мамыҡты еңел генә һыпырып алдылар. Ҡаҙ йолҡоусы апайҙар әсәйҙәренең элек былай ысулды ҡулланмауын, йолҡоу эшенең мәшәҡәтлерәк булыуын иҫкә төшөрҙө. Шунан ҡаҙ түшкәләрендәге өлтәкәйҙе - май биҙе өҫтөндә үҫкән йомшаҡ ҡына мамыҡ суғын - ҡыртышы менән ҡырҡып алып, мейескә йәбештерҙеләр. Кипкән өлтәкәйҙе баланың башлығына теҙеп кенә тегергә мөмкин. Өлтәкәйҙәр баланы күҙ тейеүҙән һаҡлай, тигән инаныу йәшәй беҙҙең яҡтарҙа.

- Мендәр яһау өсөн түш мамығын ғына тотоналар, - тип һөйләп алды Рәүзимә Нәҙершина. - Ә шул мамыҡҡа ҡауырһындан һыҙырылғанын өҫтәгәндә, мендәр ҡупшы булып ҡабарып тораса. Элек әсәйҙәр ошо һыҙырылған ҡауырһындың бер нисәһен ҡушып бәйләп, таба, икмәк өҫтөн майлау өсөн ҡулайлама эшләп алалар ине...

Ҡаҙ ҡанатын һепертке итеп ҡулланалар бит инде. Ул таҙа итеп һеперә. Тышҡы йорт баҫҡысын һепергәндә бигерәк ҡулайлы. Шуға бөгөн дә ул ҡулланылышта. Боронораҡ уны ишле итеп, күрше-тирәгә лә таратҡандар. Һынар итеп бирергә ярамаған. Өмәгә килеүселәр ҡанатты хужаға күрһәтмәй генә алып китергә тырышҡан. Бының да бер ырымы булғандыр инде.

Һимеҙ ҡаҙҙарға ҡарап, апайҙар: "Арпа, һоло ашатҡанда, ҡаҙ шәп һимерә шул. Алма ашатҡанда, ите тәмле була. Бәрәңгене тоҙлап бешереп ашатһаң, ите һутлы була", - тип тә әйтеп ҡуйҙы.

Ҡаҙ йолҡҡан арала таҡмаҡтарын да әйтеп, төртмәле һүҙҙәрен дә һөйләп өлгөрҙөләр. Һуңғы ҡаҙын йолҡоп бөткән хужабикәнең әхирәте Зөлфирә алъяпҡыс кеҫәләрен күрһәтеп: "Мамығы кеҫәмә лә тулған, мендәрҙәрем бушап киткән ине, алып ҡайтып өҫтәй һалайым әле",- тип шаяртып алды.

Йолҡонған, өтөлгән ҡаҙҙарҙы сайып алғас, ҡатын-ҡыҙҙар уларҙың эсен таҙалау эшенә тотондо. Бында инде эштең рәтен белгән, таҙа тотонған кеше кәрәк. Эсәк ара майын иретеп, көнбағыш майына ҡушып, табала бешереүе өсөн май эшләп алаһың. Тос эс майын инде фаршҡа ҡушып ебәрһәң, билмәндәрең, мантыларың ауыҙҙа ирепторасаҡ.

Ҡаҙ итен өлөштәргә бүлеү тураһында һүҙ башланды. 41 өлөшкә бүлә белеү онотолған икән. "Нисек шунса өлөш сығармаҡ кәрәк икән", тип аптырап ҡуйҙылар барыһы ла. Ә минең бала саҡ хәтеремдә шул ҡалған: киске ашҡа йыйылғас, аралағы оло ҡатын алдына батмусҡа һалынған бешкән ҡаҙҙы ултырталар. Ул, еңдәрен һыҙғанып ала ла, ҡаҙ түшкәһен матурлап 41 өлөшкә бүлә.

Өмәселәр ҡаҙҙарҙың эсәктәрен таҙалап бөткәс, Миңзәлә йәшерәктәргә шундай һабаҡтарын бирҙе: "Эсәктәрҙе ҡаҙ тәпәйҙәренә ошолайтып урайһың да, бешкәндә таралмаһын өсөн, кәләптәп ҡуяһың..."

Ҡаҙҙарҙы көйәнтәгә элеп, һалҡын һыуҙа сайҡарға алып барғанда, йола буйынса, тирә-яҡҡа ҡаҙ ҡауырһындары һибергә лә онотманылар. Һыу буйында гармунсының матур көйөнә ҡушылып йырлап та, бейеп тә алды өмәселәр. Ауылға бер йәм өҫтәлде ул көндә.

Һыу буйынан ҡайтыуға, хужабикә аш-һыуҙан һығылып торған табынын әҙерләп ҡаршы алды. Табынға фатиха биргәндән һуң: "Эше күптең ашы күп. Бер ҡыйындың - бер рәхәте. Үҫтергәндә еңел булмаһа ла, ҡыш балаларың, ейәнейәнсәрҙәрең, ағай-энең менән рәхәтләнеп ашарға яҙһын", - тигән изге теләктәрен теләй-теләй, өмәселәр ҡаҙ ите менән һыйланды, ҡоролап һалмалы аш ашаны. Һәр өмәсегә башынан да, бүркәтәүенән дә, тәпәйҙәренән дә өлөш әҙерләнгәйне.

Ә башҡа яҡтарҙа ҡаҙ өмәһе, һуғым өмәләре нисек атҡарыла икән? Гәзитебеҙ биттәрендә үҙ йолаларыбыҙ менән уртаҡлашып торайыҡсы әле.

**Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА,**
**Учалы районы "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе.**

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

**Күптән түгел Мәләүез районының Юлдаш ауылы мәктәбендә Рәсәй Федерацияһының маҡтаулы мәғариф хеҙмәткәре, уҡытыусы, директор, йәмәғәт эшмәкәре Миңлебай Байсуриндың тыуыуына 85 йыл тулыу айҡанлы Хәтер кисәһе үтте. Был көндә Советтар Союзы Геройы Зөбәй Үтәғолов иҫтәлегенә ҡуйылған таҡтаташ янында тағы ике мемориаль такта барлыҡҡа килде. Шуның береһе мәктәптең беренсе директоры Әмин Әлмөхәмәтовка, икенсеһе Миңлебай Байсуринға арналды.**

# ҮРГЕ ЮЛДАШТАР...

## арҙаҡлы шәхестәрҙе ҙурлай белә

Уларҙың икеһе лә районлағы тәүге башҡорт мәктәбе тарихында мөһим урын биләүе бөтәһенә лә мәғлүм. Ике шәхес тә рәхмәтле ауылдаштары, райондаштары, элекке хеҙмәттәштәре, сығарылыш уҡыусылары күңелендә һаҡлана. Хәтер кисәһе барышында сараға килгән һәр кеше күңел һандығында һаҡланған иҫтәлектәре менән бүлешергә ашыҡты. Ә тойғолар иһә кисәнең башынан аҙағына тиклем ағылды ла ағылды...

Иң тәүҙә Әмин Ҡолмөхәмәт улының вариҫтары - улы, хеҙмәт ветераны, Рәсәй химия сәнәғәтенең маҡтаулы хеҙмәткәре Илдар Әлмөхәмәтов, ейәндәре - Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры директоры Ильмар Әлмөхәмәтов, "Госстрой" төҙөлөш компанияһы генераль директоры урынбаҫары Азамат Әлмөхәмәтов атай-әсәйҙәре һөйләгәндәр буйынса хәтирәләре менән уртаҡлашты. Балалары ғына түгел, уҡыусылары ла тәүге директорҙың кешелекле, ғәҙел, ярҙамсыл кеше булыуы хаҡында телгә алды. Уҡытыусылар, ауыл халҡы Әмин Ҡолмөхәмәт улының 1998 йылда - 90, 2008 йылда 100 йәшен билдәләп, тантаналар үткәргән. 2009 йылдан балалары атайҙары исемендәге премия булдырып, һәр йыл 1 сентябрҙә мәктәптең алдынғы уҡыусыларына тапшыра. Быйыл бүләкләнеүселәр һаны 18-гә еткән.

Мәктәптең үткәненә, бөгөнгөһөнә байҡау яһағанда, уның Әмин ағайҙан һуң директор булып эшләгән Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары Хәснулла Алтынғужин, Ғәбит Ғүмәровтарҙың да яҡты иҫтәлектәре телгә алынды.

Бөйөк шәхестәрҙең күбеһе тарихта фамилия менән генә һаҡланған: Жуков, Суворов, Шайморатов, Кутузов, Хоҙайбирҙин һәм башҡалар. Миңлебай Әхмәтдин улын да ауылдаштары, хеҙмәттәштәре, райондаштары Байсурин тип йөрөткән һәм әле булһа ла уны хөрмәтләп, фамилия менән генә атайҙар. Мәктәп, ауыл тарихында уның да өлөшө баһалап бөткөһөҙ.

Миңлебай Байсурин уҡыусылары, хеҙмәттәштәре, етәкселек һәм халыҡ араһында иң беренсе кеселеклеге, ярҙамсыллығы, зирәк аҡылы менән ихтирам ҡаҙанды. Фиҙаҡәр хеҙмәте менән генә түгел, ғаилә тормошо буйынса ла башҡаларға өлгө күрһәтте. Хәләл ефете Әминә Сәхиулла ҡыҙы менән биш баланы лайыҡлы тәрбиәләне, яҡындарына, туғандарына һәр ваҡыт терәк булды. Был хаҡта Ейәнсура районы Байдәүләт ауылынан килгән уның туғандары Фәниә һәм Фәтхулла Байсуриндар ҙа үҙ сығыштарында билдәләп үтте.

Миңлебай Әхмәтдин улының уҡыусылары, хеҙмәттәштәре иҫтәлектәре менән бүлеште. "Ағай беҙҙе бик күп нәмәгә өйрәтте. Уға ҡарап, нисек үҙебеҙҙе тотоуҙан алып, нимә әйтергә лә унан өйрәндек", - тине улар. Педагогика хеҙмәте ветерандары Люция Ғүмәрова, Наилә Камаловалар уның эшһөйәр, уңған етәксе булыуын билдәләне. Ғөмүмән, сара барышында сығыш яһаған "Юрматы ырыуы" ҡоро етәксеһе Риф Иҫәнов, йәмәғәт эшмәкәрҙәре Сәйфулла Әмиров, Юнир Аҙнаголовтар, ауылдаштары сығышынан уларҙың бөтәһенең дә күңелдәрендә яратҡан уҡытыусылары, ғаилә дуҫтары, күршеләре хаҡында тик сағыу хәтирә һаҡланғаны белдек.

Кисәне алып барыусы Ләлә Мөслимова Хәтер кисәһен Байсурин ағайҙың һүҙҙәре менән тамамланы: "Бына шулай, үҙең дә белмәй ҡалаһың, ғүмер үтә лә китә икән. Ә һеҙ, уҡытыусылар, ауырымай ғына, матурлап, тырышып эшләгеҙ. Бәхет һеҙгә". Беҙ ҙә ошо һүҙҙәргә ҡушылабыҙ.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**




*Сараны үткәреүгә ҙур көс һалған Байсуриндар ғаиләһе.*




*Әмин Әлмөхәмәтовтың вариҫтары.*

ҺЫНАМЫШТАР

# ҠАР КҮП ЯУМАЙМЫ?

**Мәләүез районынан 13 йәшлек Наилә Яҡупова бына биш йыл инде тәбиғәт күренештәрен өйрәнә, көн һайын һауа торошон күҙәтә, температураны, елдең йүнәлешен, яуым-төшөмдө, аномаль күренештәрҙе графикка теркәп бара.**



Ошо ваҡыт эсендә Наилә меңдән ашыу төрлө халыҡ һынамыштарын өйрәнгән. Йөҙгә яҡынын үҙе һынап ҡараған һәм улар йөҙ процентҡа ысынбарлыҡҡа тап килә. Мәҫәлән, ул 2016 йылдың йәйе - һалҡын, йәйҙең икенсе яртыһы, айырыуса, август айы эҫе буласағын дөрөҫ әйткән. Быйыл йәй иһә көҙ көнө мул уңыш аласаҡтары тураһында фаразын раҫланы.

Ҡыш башланыр алдынан ул алдағы миҙгелгә үҙ фаразын әҙерләне. Халыҡ синоптигы һүҙҙәренсә, быйыл һауа торошо яҡынса бер айға "күсә". Быға Наиләнең яҙ һәм йәй көндәрендәге күҙәтеүҙәренә нигеҙләнгән үҙ аңлатмаһы бар. Мәҫәлән, 7 август иртәһе һалҡын булһа, ҡыш та һалҡын булыр. Был көндә аяҙ һәм +15 градус булған, тимәк, ҡыш иртә килмәй. 8 сентябрҙә иртән һалҡын икән - һыуыҡ ҡышҡа, тип юрайҙар. Ләкин был көндә иртән +13 градус теркәлгән. Тағы ла шундай һынамыш бар: ҡырмыҫҡа иләүе ҙур булһа, ҡыш һалҡын килә, әммә бындай хәл күҙәтелмәгән.

Кескәй синоптиктың түбәндәге күҙәтеүҙәре быйылғы ҡыштың ниндәй буласағы тураһында һөйләй. 14 майҙа көн һалҡын торһа - һыуыҡ ҡышҡа, ә был көндә аяҙ һәм 22 градус йылы була. 16 августа өйөрмә ел иҫһә, ҡыштың һыуыҡ булыуын көт тә тор, әммә көн аяҙ һәм 26 градус йылы булған. 18 сентябрҙә миләштең япраҡтары һарғайһа, көҙ ҙә, ҡыш та иртә килер - япраҡтар һарғайманы. Уҡыусы фекеренсә, ошо һәм башҡа һынамыштар буйынса, көҙҙөң оҙайлы булыуын, декабрь аҙағында ғына ҡар ятыуын билдәләргә мөмкин. "Халыҡ һынамыштарына ярашлы, ҡыш һуңлап килә, ҡарҙың иһә уҙған йылға ҡарағанда аҙыраҡ яуыуы көтөлә", - ти Наилә.

**Гөлфиә АКУЛОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

Тормош шундай. Барыбыҙҙың да "йәндә көйҙәргән иерархия"һы бар һәм әлеге ваҡытта башҡа нәмәләргә ҡарағанда өҫтөнлөгө ҙурыраҡ булған нәмәләр тураһында борсолабыҙ. Аягынды һындырһаң, баш ауыртыуына иғтибар ҙа итмәйһең... Аяғың төҙәлгәнгә тиклем. Ирегеҙҙең хырлауы йоҡо бүлмәһендә янғын сыҡҡанға тиклем йәнегеҙгә тейә.

Ә нисек итеп иғтибар итмәҫкә? Бары тик барлыҡ стрестарҙың үҙебеҙ уйлап тапҡан ҡағиҙәләрҙән килеп сыҡҡанын аңларға ғына кәрәк. Әгәр был ҡағиҙәләрҙе бер аҙ йомшартҡанда йәки уларҙан бөтөнләй баш тартҡанда, бәхетлерәк булырға мөмкин, уларҙы тирә-яҡтағылар даими боҙа икәнлегенә иғтибар бирмәгеҙ.

Аңлы ҡарар ҡабул итеү зарур: "Бөгөн берәү ҙә минең көнөмдө боҙа алмай". Үҙегеҙ менән тормошоғоҙҙо алдағы 24 сәғәттә берәү ҙә боҙа алмаҫына килешеү төҙөгөҙ. Донъяла барған ваҡиғалар фонында магазинда һатыусы менән һүҙгә килешеү - ҙур драма түгел икәнлеген иҫегеҙҙән сығармағыҙ. Ҡыҫҡаһы, асыуға һәр саҡ алмаш бар. Асыуланыу урынына аптырарға йәки көлөргә мөмкин. Тормоштоң нисек булырға һәм тирә-яҡтағыларығыҙ үҙҙәрен нисек тоторға тейешлеге тураһында башығыҙҙа ҡағиҙәләр әҙерәк булған һайын бәхетле булыу еңелләшәсәк.

### Ни өсөн уйҙарығыҙ менән идара итергә өйрәнергә кәрәк?

Бының өсөн ике сәбәп бар:

- Тирә-яҡ мөхит йәки һауа торошо менән идара итә, башҡаларҙың беҙгә мөнәсәбәтен, уларҙың беҙҙең хаҡта нимә уйлауын контролдә тота алмайбыҙ. Беҙ үҙебеҙҙең уйҙарыбыҙға ғына хужа һәм был иң мөһиме.

- Бәхет - тышҡы донъяның һөҙөмтәһе түгел, ә эске донъяғыҙҙың торошо!

Әлбиттә, "Әгәр шул-шул нәмәм булһа, бәхетле булыр инем", тип әйтергә мөмкин. Дөрөҫ түгел. Бер тәүлек ҡыуандың да икән ти, һуңынан тағы ла мыжырға һәм асыуланырға сәбәп табасаҡһың... Аллаһы Тәғәләнән "Порше" һорайһың, ул уны ей алдына килтереп ултыртып ҡуя. Ҡыуанысыңдың сиге юҡ! Һуңынан ошо хыялыңдағы машинала магазинға бараһың. Кире сыҡҡансы ниндәйҙер маңҡа танау уға ҡаҙаҡ менән яман һүҙ сыймаҡлап киткән... Башыңда инде икенсе уйҙар ҡайнай: "Ошо бәләкәй генә яуызды тапмайынса, бәхетле булмаясаҡмын!"

Эске ҡарашығыҙ менән үткән аҙнаға күҙ һалығыҙ һәм күңелегеҙҙе ҡырған берәй ваҡиғаны табығыҙ. Иҫегеҙгә төшөргәс, ваҡиғаның үҙе түгел, ә уның буйынса үҙегеҙҙән уйҙарығыҙ борсоғанын аңлағыҙ. "Минең урында барыһы ла асыуланыр ине", - тиерһегеҙ. Яңылышаһығыҙ. Барыһы ла түгел, ә бары тик күпселек. Беҙҙе ғүмер буйы тирә-яҡ мөхитте һәм ундағы ваҡиғаларҙы билдәле уйҙар менән ҡабул итергә өйрәтәләр. Тап ошо уйҙар беҙҙе бәхетһеҙ итә лә инде. Әммә беҙ уларҙы үҙгәртә алабыҙ. Ҡыҫҡаһы, тормош сифатын уйҙар ҙа үҙгәртергә мөмкин, сөнки улар беҙҙең хис-тойғоға һәм эмоцияларға йоғонто яһай.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**



### 1 ЯНВАРЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 "Новый год на Первом" (16+).
07.00 "Три аккорда". Новогодний выпуск (16+).
08.55 "Новогодний календарь".
10.00 Новости.
10.15 "Служебный роман". Худ. фильм.
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Служебный роман". Продолжение фильма.
13.10, 15.15 "Главный новогодний концерт".
15.50 "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика". Комедия.
17.10 "Иван Васильевич меняет профессию". Комедия.
18.40 "Клуб веселых и находчивых". Высшая лига. Финал (16+).
21.00 "Время". Спецвыпуск. 50 лет в эфире.
21.30 Церемония вручения народной премии "Золотой граммофон" (16+).
24.00 "Великолепная Семерка". Худ. фильм (16+).
02.00 "Ночь в музее". Худ. фильм (12+).
03.45 "Обезьяньи проделки". Худ. фильм (12+).
05.20 "Россия от края до края".

### РОССИЯ 1

05.45 "Доярка из Хацапетовки". Сериал (12+).
08.55 "Ирония судьбы, или С легким паром!" Худ. фильм.
12.25 "Джентльмены удачи". Комедия.
14.00, 20.00 "Вести".
14.20 "Песня года".
16.20 "Бриллиантовая рука". Комедия.
18.05 "Юмор года". Юмористическая программа (16+).
20.30 "Последний богатырь". Фэнтези (12+).
22.35 "Притяжение". Фантастика (12+).
00.45 "Моно". Юбилейный концерт Ирины Аллегровой.
02.50 "Новогодние сваты".

### БСТ

**07.15 "Зимние мелодии" (12+).**
**08.00 "Ученик Санты".**
**09.30 "Сказание о Сельме". Сериал (12+).**
**11.00 "Звездная "Гора новостей".**
**11.15 "Бирешмә!" Сериал (12+).**
**12.15 "Тайна Амангуль". Худ. фильм.**
**13.00 "Дарю песню". Концерт по заявкам телезрителей (12+).**
**14.30 "Башкорт йыры-2017" (12+).**
**18.00 "Байык-2017" (12+).**
**22.00 "Из Уфы с любовью". Худ. фильм (12+).**
**23.45 "Новогодний брак". Худ. фильм (6+).**
**01.30 Ф.Буляков. "Море мечты" (12+).**
**03.15 "Накануне волшебства". Концерт (6+).**
**04.15 "Восхождение к любви" (12+).**
**04.45 "Ак мондар". Концерт (12+).**
**05.15 "Замандаш" (6+).**
**05.30 "Соседи". Сериал (12+).**
**06.30 "Весело живем" (12+).**

### 2 ЯНВАРЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10, 11.40 Новогодний "Ералаш".
06.35 "Садко". Худ. фильм.
08.10 "Млечный путь". Худ. фильм (12+).
10.10 "Морозко". Худ. фильм.
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Один дома". Комедия.
14.10 "Один дома-2". Комедия.
16.25 "МаксимМаксим". Новогодний выпуск (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. Новогодний выпуск.
19.50 "Поле чудес". Новогодний выпуск (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Аватар". Фантастика (16+).
00.15 "Шерлок Холмс: знак трех". Детективный сериал (12+).
02.00 "Ночь в музе-2". Худ. фильм (12+).
03.55 "Прогулка в облаках". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.05 "Городок". Лучшее.
06.05 "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". Сериал (12+).
09.00, 11.10 "Сердце не камень". Сериал (12+).
11.00, 20.00 "Вести".
12.50 "Песня года".
15.50 "Ликвидация". Детективный сериал (16+).
17.40 "Последний богатырь". Фэнтези (12+).
20.40 "Вести-Башкортостан".
20.55 "Солнце в подарок". 1-5-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
01.15 "Братья по обмену-2". Комедийный сериал (12+).
03.45 "Наследие". Драматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Зимние мелодии" (12+).**
**07.45 "Ролли и Эльф: невероятные приключения" (12+).**
**09.30 "Сказание о Сельме". Сериал (12+).**
**11.00 "Звездная "Гора новостей".**
**11.15 "Бирешмә!" Сериал (12+).**
**12.15 "Умырзая". Худ. фильм.**
**13.00 "Дарю песню" (12+).**
**14.15 Муз. фильм "Ургала".**
**16.00 "Весело живем" (12+).**
**16.30 "Играй гармонь, звени мой курай". Концерт Сибайской государственной филармонии.**
**18.30 Новости (на башк. яз.).**
**19.00 "ЮлдашХит-2017". Заключительный концерт хит-парада радио "Юлдаш".**
**21.30, 06.30 Новости.**
**22.00 "Домочадцы". Сериал (12+).**
**23.00 "Обитаемый остров". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30"Автограф" (12+).**
**02.00 "Парад планет". Финал-2010 (12+).**
**03.30 М.Гимранов. "Зимние новогодние приключения" (12+).**
**04.45 "Ак мондар". Концерт (12+).**
**05.15 "Замандаш" (6+).**
**05.30 "Соседи". Сериал (12+).**

### 3 ЯНВАРЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Модный приговор".
07.10 "Морозко". Худ. фильм.
08.35, 04.30 "Берегите мужчин". Худ. фильм.
10.15 "Смак". Кулинарное шоу (12+).
10.55 "Москва слезам не верит". Рождение легенды" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Концерт, посвященный 75-летию Муслима Магомаева.
13.45 "Нагиев - это моя работа" (16+).
14.45 "Аффтар жжот" (16+).
16.45 "Угадай мелодию". Новогодний выпуск.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Сальса". 1-я и 2-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
23.20 "Что? Где? Когда?" Финал года.
00.55 "Шерлок Холмс: его последний обет". Детективный сериал (12+).
02.45 "Ночь в музее: секрет гробницы". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.05 "Городок". Лучшее.
06.05 "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". Сериал (12+).
09.00, 11.40 "Сердце не камень". Сериал (12+).
11.00, 20.00 "Вести".
11.20, 20.40 "Вести-Башкортостан".
13.35 "Юмор года". Праздничный дайджест фестиваля "Юрмала-2017" (16+).
16.30 "Ликвидация". Детективный сериал (16+).
20.55 "Солнце в подарок". 5-9-я серии (12+).
01.15 "Братья по обмену-2". Комедийный сериал (12+).
03.45 "Наследие". Драматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Зимние мелодии" (12+).**
**07.45, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Нико".**
**09.30 "Сказание о Сельме". Сериал (12+).**
**11.00 "Звездная "Гора новостей".**
**11.15 "Бирешмә!" Сериал (12+).**
**12.15 "Сулпан". Худ. фильм.**
**13.00 "Дарю песню". Концерт по заявкам телезрителей (12+).**
**14.15 "Знакомые незнакомцы-1". Фильм-концерт (12+).**
**16.00 "Моя Республика. Итоги-2017" (12+).**
**16.30 "Любовь - душа мелодии". Концерт Загира Исанчурина".**
**19.00 Итоговый вечер телепроекта "Йөрәк һүҙе" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Домочадцы". Сериал (12+).**
**23.00 "Обитаемый остров. Схватка". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "История одной любви" (12+).**
**01.45 "Весело живем" (12+).**
**02.00 "Парад планет". Финал-2011**

### 4 ЯНВАРЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Модный приговор".
07.10 "Сказа о Царе Салтане". Худ. фильм.
08.35 "Ледниковый период".
10.15 "Смак". Кулинарное шоу (12+).
10.55 "Кавказская пленница". Рождение легенды" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Концерт Аниты Цой.
13.40 "Михаил Галустян. "Понять и простить" (12+).
14.45 "Аффтар жжот" (16+).
16.45 "Угадай мелодию". Новогодний выпуск.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Сальса". 3-я и 4-я серии (16+).
23.25 "Шерлок Холмс: скандал в Белгравии". Сериал (12+).
01.15 "Роман с камнем". Худ. фильм (16+).
03.10 "Жизнь хуже обычной". Худ. фильм (16+).
05.00 "Россия от края до края".

### РОССИЯ 1

05.05 "Городок". Лучшее.
06.05 "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе" (12+).
09.00, 11.40 "Сердце не камень". Сериал (12+).
11.00, 20.00 "Вести".
11.20, 20.40 "Вести-Башкортостан".
13.35 "Новая волна-2017". Гала-концерт.
16.20 "Ликвидация". Детективный сериал (16+).
20.55 "Солнце в подарок". 9-14-я серии (12+).
01.15 "Братья по обмену-2". Комедийный сериал (12+).
03.45 "Наследие". Драматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Зимние мелодии" (12+).**
**07.45, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "От винта".**
**09.30 "Сказание о Сельме". Сериал (12+).**
**11.00 "Звездная "Гора новостей".**
**11.15 "Бирешмә!" Сериал (12+).**
**12.15 "Волшебный хвостик". Худ. фильм.**
**13.00 "Дарю песню" (12+).**
**14.15 "Знакомые незнакомцы-2". Фильм-концерт (12+).**
**16.00 "Моя Республика. Итоги-2017" (122+).**
**16.30 "Благодарю тебя..." Юбилейный концерт Гузель Асадуллиной (12+).**
**18.50 Хоккей. КХЛ. "Спартак" (Москва) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**21.30, 06.30 Новости.**
**22.00 "Домочадцы". Сериал (12+).**
**23.00 "Мой парень ангел". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Сказка странствий" (12+).**
**01.45 "Весело живем" (12+).**
**02.00 "Вот так случилось..." (12+).**
**04.15 "Хочется верить в чудеса" (12+).**
**05.15 "Замандаш" (12+).**
**05.30 "Соседи". Сериал (12+).**

### 5 ЯНВАРЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Модный приговор".
07.15 "Марья-искусница". Худ. фильм.
08.30 "Ледниковый период-2: глобальное потепление".
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Любовь и голуби". Рождение легенды" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Праздничный концерт к Дню спасателя.
13.45 "Татьяна Васильева. Кошка на раскаленной крыше" (12+).
14.45 "Аффтар жжот" (16+).
16.45 "Угадай мелодию".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Сальса". 5-я и 6-я серии (16+).
23.25 "Шерлок Холмс: собаки Баскервиля". Детективный сериал (12+).
01.15 "Жемчужина Нила". Худ. фильм (16+).
03.10 "Вне поля зрения". Худ. фильм (16+).
05.20 "Россия от края до края".

### РОССИЯ 1

05.05 "Городок". Лучшее.
06.05 "Доярка из Хацапетовки. Вызов судьбе". Сериал (12+).
09.00, 11.40 "Сердце не камень". Мелодраматический сериал (16+).
11.00, 20.00 "Вести".
11.20, 20.40 "Вести-Башкортостан".
13.35 "Аншлаг и Компания". Юмористическая программа (16+).
16.20 "Ликвидация". Детективный сериал (16+).
20.55 "Солнце в подарок". 14-18-я серии (12+).
01.05 "Братья по обмену-2". Комедийный сериал (12+).
03.25 "Наследие". Драматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Зимние мелодии" (12+).**
**07.45, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Приключения Аленушки и Еремы" (6+).**
**09.30 "Сказание о Сельме". Сериал (12+).**
**11.00 "Звездная "Гора новостей".**
**11.15 "Бирешмә!" Сериал (12+).**
**12.15 "Карйондоз". Худ. фильм.**
**13.00 "Дарю песню" (12+).**
**14.15 "Знакомые незнакомцы-3" (12+).**
**16.00 "Моя Республика. Итоги-2017" (12+).**
**16.30 Новогодний фильм-концерт "Любовь и звезды" (12+).**
**18.00**
**18.00 "Йома".**
**19.00 Концерт Государственного академического ансамбля народного танца им. Ф.Гаскарова (12+).**
**20.30 "Тел аскысы". Новогодняя сказка.**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30, 06.30 Новости.**
**22.00 "Домочадцы". Сериал (12+).**
**23.00 XIV Международный форум боевых искусств (12+).**
**00.30 "Жара". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз).**
**02.30 Н.Гаитбаев. "Весело живем" (12+).**
**04.15 Концерт "Белые мгновения" (12+).**
**05.15 "Современник" (12+).**
**05.30 "Соседи". Сериал (12+).**

### 6 ЯНВАРЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Модный приговор".
07.10 "Золотые рога". Худ. фильм.
08.25 "Ледниковый период-3: эра динозавров". Полнометражный анимационный фильм.
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Рождество в России". Традиции праздника".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Концерт Льва Лещенко в Государственном Кремлевском дворце".
13.45 "Пелагея. "Счастье любит тишину" (12+).
14.45 "Аффтар жжот" (16+).
16.45 "Угадай мелодию".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.50, 21.20 "Сегодня вечером" (16+).
21.00 "Время".
23.00 "Рождество".
24.00 "Афон. Достучаться до небес" (12+).
01.00 Рождество Христово. Прямая трансляция из Храма Христа Спасителя.
03.00 "Путь Христа".
05.05 "Россия от края до края".

### РОССИЯ 1

04.30 "Один на всех". Худ. фильм (12+).
08.10 "Новогодняя жена". Худ. фильм (12+).
10.10 "Сто к одному".
11.00, 20.00 "Вести".
11.20 "Лачуга должника". Остросюжетный сериал (12+).
20.40 "Солнце в подарок". Заключительные серии (12+).
22.55, 03.00 "Дом спящих красавиц". Мелодрама (12+).
01.00 Рождество Христово. Прямая трансляция торжественного Рождественского богослужения.

### БСТ

**07.00 "Зимние мелодии" (12+).**
**07.45, 19.15 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Новые приключения Аленушки и Еремы" (6+).**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "Это мы!" (6+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.00 "Звездная "Гора новостей".**
**11.15 "Балкас". Худ. фильм.**
**12.00 "Тәмле" (12+).**
**12.15 "Орнамент".**
**12.30 "Үткән гүмер" (12+).**
**13.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Йондоз". Фильм-концерт (12+).**
**17.00 "Уфимская волна-2017". Финал музыкального конкурса радио "Спутник FM" (12+).**
**19.50 Хоккей. КХЛ. ХК "Динамо" (Рига) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**22.30, 06.30 Новости.**
**22.50 Рождественское богослужение из Кафедрального собора Рождества Пресвятой Богородицы г.Уфа.**
**01.00 Рождественский концерт (12+).**
**01.30 "Семейное Рождество". Худ. фильм (12+).**
**03.00 А.Островский. "Снегурочка" (12+).**
**05.00 "Мой путь". Концерт (12+).**
**06.15 "Современник" (12+).**

### 7 ЯНВАРЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Модный приговор".
07.10 "Огонь, вода и... медные трубы". Худ. фильм.
08.35 "Ледниковый период-4: континентальный дрейф".
10.15 "Тайная жизнь домашних животных" (6+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Зимний роман". Драма (12+).
13.50 "Рожденная любить, рожденная прощать". К юбилею Натальи Гвоздиковой.
14.55 "Роберт Рождественский. Эхо любви".
16.55 "Николай Чудотворец".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?"
19.50, 21.20 "Рождество-2018".
21.00 "Время".
22.40 "Пурга". Комедия (16+).
00.35 "Шерлок Холмс: Рейхенбахский водопад". Сериал (12+).
02.20 "Однажды вечером в поезде". Худ. фильм (16+).
03.55 "Брюс Спрингстин" (16+).
05.20 "Россия от края до края".

### РОССИЯ 1

04.25 "Снова один на всех". Худ. фильм (12+).
08.15 "Елки лохматые". Худ. фильм (12+).
10.10, 03.55 "Сто к одному". Телеигра.
11.00 "Вести".
11.20 Рождественское интервью Святейшего Патриарха Кирилла.
11.45 "Птица в клетке". Худ. фильм (12+).
15.35 "Золотце". Мелодраматический сериал (12+).
20.00 "Вести".
21.10 "Вторая молодость". Мелодрама (16+).
23.30 "Русское Рождество". Праздничный музыкальный марафон (12+).
01.15 "Чародеи". Муз. фильм.

### БСТ

**07.00 "Зимние мелодии" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Чудесное Рождество Карстена и Петры" (12+).**
**09.30 "Йома".**
**10.00 Рождественское послание митрополита уфимского и Стерлитамакского Никона.**
**10.15 "Рождество Христово" (6+).**
**10.45 "Орнамент".**
**11.00 "Звездная "Гора новостей".**
**11.15 "Камыр-батыр". Худ. фильм.**
**12.00 "Тәмле" (12+).**
**12.30 Итоги года (на башк. яз.).**
**13.30 "Дарю песню" (12+).**
**15.15 "Параллельные миры" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Человек года в спорте-2017" (6+).**
**17.30 Республиканская новогодняя елка.**
**18.45 Рождественский концерт (12+).**
**19.15 "Из Уфы с любовью". Худ. фильм (12+).**
**21.00, 06.00 Итоги года-2017.**
**22.00 "Семейное рождество". Худ. фильм (12+).**
**23.45 "Свидание с джазом" представляет (12+).**
**00.45 "Замерзшая из Майами". Худ. фильм (6+).**
**02.30 Г.Зайнашева. "Гайфи агай, женись давай!" (12+).**
**04.15 "Россия - душа моя" (12+).**
**05.45 "Современник" (12+).**

Республика халыҡ ижады үҙәге һәм Үҙәктең Мәҙәниәт йорто коллективтары Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, "Старушка" халыҡ вокал ансамбле етәксеһе

**Иҙрисов Валерьян Ғәлимулла улының**

вафаты сәбәпле, яҡындарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмдең.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ТУҒАН ТЕЛДӘ ҺӨЙЛӘШ ҺӘМ...

## мөғжизә тыуҙыр!



**Бала күңеле мөғжизә өмөт иткән мәл - Яңы йыл байрамы етә. Ә бит баласағаның хыялдарын тормошҡа ашырыусы төп кеше - атай-әсәй. Ҙур үҫкәнсе эскерһеҙ сабый күңелендә Ҡыш бабайға, мөғжизәгә ышанысты улар һаҡлап тора. Шулай уҡ тап атай-әсәй балаға туған телен өйрәтеп, халыҡтың бай рухи хазинаһына тәүге ишекте асыусы ла. Бөгөн глобалләштереү шарттарында йәшәгән халҡыбыҙ өсөн был да үҙе бер мөғжизәгә тиң күренешкә әйләнә бара бит. Әммә бына шундай аңлы ата-әсәләр, иҫ киткес матур балалары бар милләтебеҙҙең. Ошо көндәрҙә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ойошторған Башҡорт теле көндәре сиктәрендә үткән "Эй, ҡәҙерле башҡорт теле" байрам сараһында тап шундай ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән балаларҙы күреү бәхете тейҙе.**



"Эй, ҡәҙерле башҡорт теле" тип исемләнгән сараға бөтөн республиканан туған телендә шартлатып һөйләшкән төрлө йәштәге балалар йыйылды. Улар араһында шулай уҡ Башҡорт теле көндәре сиктәрендә уҙғарылған шиғриәт бәйгеһе, "Йәш әкиәтсе", "Башҡорт телендәге иң яҡшы фильм", "Халҡым теле миңә - хаҡлыҡ теле" темаһына эссе конкурстарында еңеүселәр ҙә бар ине. Был конкурстарға бөтәһе 400-ҙән ашыу эш килгән. Ойоштороусылар әйтеүенсә, бигерәк тә Хәйбулла районы һәм Сибай ҡалаһының балалар баҡсалары әүҙем ҡатнашҡан, Белорет, Бөрйән, Баймаҡ райондарынан шиғыр һөйләүселәр күп булған. Шулай уҡ Асҡын, Борай райондарынан да эштәр килгән.

- Был байрамға саҡырылған балалар менән алты майҙансыҡта мауыҡтырғыс уйындар үткәрергә ҡарар иттек һәм был эштә беҙгә Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернаты, Ишембайҙағы Ә.З. Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернаты, Өфөнөң Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһы, М. Искужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейы, М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы уҡытыусылары, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ студенттары ярҙам итте. Улар алты майҙансыҡта төрлө темаға мауыҡтырғыс уйындар, "Башҡорт теле" иленә сәйәхәт" тигән квест үткәрҙе. Мәктәптә башҡорт теле дәрестәрен гел уйын формаһында үткәреп булмай, ул етди предмет. Ә бындай сарала уҡыусылар ял итеп, туплаған белем кимәлен һынап ҡайта ала. Шулай уҡ ата-әсәнең һәм уҡытыусының да көндәлек эшен баһалай торған байрам был, - тине төп ойоштороусыларҙың береһе, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының секция бүлеге мөдире Рәйсә Кузбәкова.

Әйтергә кәрәк, балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәренән алып, юғары синыф уҡыусыларына тиклем төрлө йәштәге балалар "Үҙ уйыным", "Алтын тирмә" уйындарында башҡорт халҡының мәҙәниәте, тарихы, күренекле шәхестәре тураһында белемдәрен һынаһа, "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәрендә" мәҡәл ҡармаҡланылар, "Башҡорт телендә дөрөҫ һөйләшәйек!" майҙансығында уйын һорауҙарына яуап биреүҙән тыш, йырлап, шиғыр һөйләп, үҙ оҫталыҡтарын күрһәттеләр. Әүҙем ҡатнашып ултырған уҡыусылар, уйындар тамамланғас, күҙҙәре нурланып, йөҙҙәре балҡып килеп сыҡты.

Күңелле итеп уйнап алғандан һуң, үткәрелгән конкурстарға йомғаҡ яһап мәл етте. "Халҡым теле миңә - хаҡлыҡ теле" темаһына эссе конкурсында I урынды Баймаҡ ҡалаһынан Лиә Юлбарыҫова яуланы. "Башҡорт телендәге иң яҡшы фильм" конкурсында I урынға Ауырғазы районынан Алмаз Раяновтың документаль фильмы лайыҡ булды. "Йәш әкиәтсе" конкурсында ҡатнашыусылар йәш арауығы буйынса айырым бүләкләнде. Мәктәпкәсә йәштәге балалар араһында I урынға Сибай ҡалаһынан 5 йәшлек Айзель Әҙелбаева сыҡты, ә бына 1-4 класс уҡыусылары араһында ин шәп әкиәтсе тип Өфө ҡалаһынан Алһыу Абдуллина танылды. Шулай уҡ 5-9 класс уҡыусылары араһында Әбйәлил районынан Нияз Замалетдинов еңеүсе тип билдәләнде. Шиғыр һөйләүселәр бәйгеһендә Баймаҡ районынан Илүзә Уразгилдина I урынға сыҡты. Ойоштороусылар икенсе-өсөнсө урын алыусыларҙы һәм яҡшы һәҙәмтәләр күрһәткән ҡатнашыусыларҙы ла иғтибарҙан ситтә ҡалдырманы, һәр кемгә маҡтау ҡағыҙҙары, иҫтәлекле бүләктәр таратылды. Балаларҙың күңелен үҫтереп, маҡтау һүҙҙәре әйтергә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Әмир Ишемғолов, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев, филология фәндәре докторы Фәнил Кузбәков, Башҡортостан Яҙыусылар Союзы рәйесе урынбаҫары Рәшит Зәйнуллин, БР Мәғариф министрлығы белгесе Гөлназ Усманова килгәйне. Башҡорт телен белгән, яратып өйрәнгән, башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадын, тарихын, мәҙәниәтен һөйгән балаларға изге теләктәр, өгөт-нәсихәт яңғыраны, өмөттәр бағланды.

Тантана аҙағында Хәйбулла районынан килеп еткән дүрт йәшлек Ләйсән Мәмбәтова менән тап ошо турала һөйләшеп алдыҡ. "Мин Аҡъярҙан өләсәйем менән килдем, - тине ҡыҙ етди итеп. - Бында бөгөн ҡыҙыҡ булды, ошо этте әкиәт һөйләгән өсөн бирҙеләр. Мин әкиәттәрҙе күп беләм, әсәйем өйрәтә. Өйҙә мин башҡортса ғына һөйләшәм, йырларға яратам, физик күнекмәләр эшләй беләм". Үҙенән дә ҙур йомшаҡ уйынсыҡты саҡ күтәреп торған ҡыҙ бигерәк тә һүҙсән булып сыҡты, уның саф башҡортса матур итеп яуаптар ҡайтарыуын оҙаҡ тыңларға ла әҙер булыр инек, өләсәһе, ҡайтыу юлы алыҫ, тип ашыҡтырҙы. Сибай ҡалаһынан килгән Әҙелбаевтар ғаиләһе бындай сараларҙа ҡыҙҙарын гел ҡатнаштырыуы тураһында һөйләне. "Балаларҙың телмәрен үҫтерергә, рухын байытырға ярҙам иткән ошондай конкурстар һәр кеше өсөн әһәмиәтле. Туған телгә һөйөү ғаиләлә тәрбиәләнә, шуға беҙ тик башҡортса ғына һөйләшәбеҙ, шуға, балалар баҡсаһына йөрөһә лә баланың теле боҙолмай", - ти Лилиә Әҙелбаева.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт теле көндәре сиктәрендә үткәрелгән "Эй, ҡәҙерле башҡорт теле" байрам сараһына йыйылған балалар өсөн был юлы мөғжизәне ата-әсәләре, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты булдыҡ итте. Был балалар башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижадына, шиғриәткә, башҡорт теленә, тарихына арнап, ошондай байрамдар үткәреүҙе үҙҙәре лә матур ғәҙәт итеп алһа, милләтебеҙҙең нисә быуын йәштәре бөгөнгө кеүек күңелен үҫтереп йәшәйәсәк! Ни тиһәң дә, алыҫ төньяҡтан килгән Ҡыш бабай ҙа, тылсым әйәһе лә, алтын балыҡ та түгел, нәҡ үҙебеҙҙең берләшеү, ваҡыт һәм көс йәлләмәй тырышыу хыялдарыбыҙҙы тормошҡа ашырырға ярҙам итер.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Ғинуар (Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 (14) дүшәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:27 | 16:57 | 18:27 |
| 2 (15) шишәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:28 | 16:58 | 18:28 |
| 3 (16) шаршамбы | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:29 | 16:59 | 18:29 |
| 4 (17) кесе йома | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:31 | 17:01 | 18:31 |
| 5 (18) йома | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:32 | 17:02 | 18:32 |
| 6 (19) шәмбе | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:34 | 17:04 | 18:34 |
| 7 (20) йәкшәмбе | 8:09 | 9:39 | 13:30 | 15:35 | 17:05 | 18:35 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**30 декабрь, 3, 4, 5, 6 ғинуар** - 11.00, 13.00; **2 ғинуар** - 12.00 **"Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт 0+

**3 ғинуар "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия 12+

**4 ғинуар "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия 12+

**5 ғинуар "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**2-5 ғинуар "Пес Барбос и новогодний кросс"** (И. Казакова), бәләкәстәр өсөн Яңы йыл әкиәте. Башлана 12.00, 14.00 0+

**2-5 ғинуар "Щелкунчик"** (Н. Соболева), Яңы йыл әкиәте. Башлана 10.30, 13.00 0+

**4 ғинуар "Акса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**30 декабрь, 2-5 ғинуар "История одной снежинки"** (В. Аношкин), Яңы йыл спектакле. Башлана 11.00, 14.00, 17.00. **31 декабрь** - 11.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**30 декабрь, 2-5 ғинуар "Три богатыря и "Соловей разбойник"** (А. Зарипов), әкиәт 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**"Өфөнөң төп Яңы йыл тамашаһы"**

**2 ғинуар** - 14.00, 16.00; **3, 4 ғинуар** - 12.00, 14.00, 16.00; **5 ғинуар** - 12.00, 14.00 0+

ЙЫЛ ЙОМҒАҒЫ

# РӘХМӘТ ҺЕҘГӘ

**Рәхмәт! Йыл буйына өйөгөҙгә "Киске Өфө" гәзитенең сираттағы һаны килеүен көтөп алған, уны һәр хәрефен һөҙә-һөҙә уҡып сыҡҡан, мәғлүмәттәрҙе йә һоҡланып, йә күңел үҫтереп, йәиһә төңөлөп китеүҙән телендә тәңкит һүҙе уралтҡан, әммә битараф ҡалмаған уҡыусыларыбыҙға рәхмәт. Аҡ ҡағыҙ битендә уҡылғанға битараф ҡалыу уны яҙғандар өсөн ифрат ҡурҡыныс икәнен белә ижад кешеһе. "Киске Өфө" лә бына 15 йыл инде битараф ҡалдыра торғандарҙан түгел икәненә иманып, ошо маҡсатты тайпылмай үтәп ижад ителәбит.**



Ә уның ошондай йөкмәткеһенә гәзит редакцияһында эшләгән журналистар ғына түгел, авторҙарыбыҙ ҙа булышлыҡ итә икәне лә хәҡиҡәт. Гөмүмән, гәзит-журналдар редакцияларында элек-электән мотлаҡ үтәлергә тейешле шундай ҡағиҙә йәшәй: авторҙар йәлеп итеү, авторҙар менән эшләү, уларҙың яҙмаларын нәшергә әҙерләү. Беҙҙең "Киске Өфө" гәзите ҡарамағында ла бик тә эшлекле, зыялы, мәртәбәле авторҙар коллективы тупланған. Улар менән беҙҙең ике яҡлы бәйләнеш булдырылған һәм авторҙарыбыҙ гәзитебеҙҙең темаһына, форматына, йүнәлешенә, рухына тап килгән сығыштары менән беҙҙе лә, уҡыусыларыбыҙҙы ла ҡыуандырып тора. Беҙ уларға ла сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Бына улар, баҫмабыҙға матур йөкмәтке өҫтәгән, тормош һәм хеҙмәт тәжрибәһе менән уртаҡлашҡан, аҫыл һүҙе, алтын фекере менән гәзитебеҙҙе күтәрмәләгән авторҙарыбыҙ: Фәүзиә Яхина-Усманова, Эльза Мөхәмәҙиева, Әнүәрә Хәйбуллина-Монасипова, Таңһылыу Баһаутдинова, Айһылыу Гарифуллина, Радик Өмөтҡужин, Лена Хәйруллина, Лариса Абдуллина, Мәрйәм Бураҡаева, Зөлфиә Ханнанова, Иҙрис Ноғоманов, Зәкирйән Әминев, Шаһүрә Әхмәҙиева, Урал Мостафин, Нурия Ҡунысбаева, Мөҙәрис Багаев, Фәрзәнә Аҡбулатова, Байгилде Моталлап, Зилә Ниғмәтуллина, Мотал Рәмов, Миңһылыу Абдуллина, Йәмних Ҡашҡаров, Йәдкәр Бәширов, Нәзиә Бикбова, Әлфиә Батталова, Әлфиә Зәбдинова, Әлиә Исмәғилева, Таңһылыу Ҡарамышева, Радик Вахитов, Фәүзиә Йәнтилина, Миләүшә Юлдашбаева, Әхәт Сәлихов, Әмир Әминев, Шамил Иҫәнғолов, Клара Хәмизуллина, Гөлсәсәк Саламатова, Фәнил Күзбәков, Бәҙри Әхмәтов, Нурия Ҡунысбаева, Зөбәйҙә Ҡәләмова, Миңнур Ҡасимова, Айгөл Иҙелбаева, Йыһат Солтанов, Миләүшә Әхмәтйәнова-Ғүмәрова, Таңһылыу Вәлиева, Зилдә Хәмиҙуллина һ.б. Ошо исемлектең артабан да дауам итеүен, төрлө тарафтарҙан рухты, сәмде, ғәмде күтәрер фекерҙәр килеп, гәзитебеҙ биттәренә күсеүен теләйбеҙ.

● Йыл авторы тип иғлан итә торған әүҙем ҡәләм тибрәтеүсе - ул, әлбиттә, **Хәлил Һөйөндөков.** Уның мәҡәләләрен беҙ һәр һанда тиерлек уҡыйһығыҙ. Отставкалағы хәрби табип булараҡ, ул йә армия тормошондағы мөнәсәбәттәрҙе һүрәтләй, буласаҡ һалдаттарға кәңәштәр бирә, йә һаулыҡ һаҡлау серҙәре менән уртаҡлаша, йә милли һәм дини тәрбиә ысулдары тураһында фекерен еткерә.

Икенсе йыл авторы - ул яҙыусы, журналист **Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай.** Ул үтеп барған йылда барлыҡҡа килгән "Заман башҡорто" рубрикаһын алып барҙы, был әңгәмәләрҙе һәр кемдең күңеленә хуш килтереүгә өлгәште.

Тағы ла бер йыл авторы, ул, әлбиттә, Бөрйән районынан биология фәндәре докторы **Әгләм Шәрипов.** Ул башҡорт ҡорт балы тураһында бик күп серҙәр белә, тәбиғәт күренештәрен дә китаптарҙан уҡып түгел, үҙ күҙәтеүҙәре аша һүрәтләй. Һәр сығышы беҙҙең өсөн дә, гәзит уҡыусы тарафынан да көтөп алына.

Мәләүездән **Лена Абдрахмановны** ла йыл авторы тип нарыҡлайбыҙ. Баҫмабыҙ менән күп йылдар хеҙмәттәшлек итеүсе был хәбәрсе иһә кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе һүрәтләп, шул турала һығымталар яһап, "Тормош һабаҡтары", "Аңлағанға - ишара" рубрикаларын тулыландыра.

Гәзитебеҙҙә Башҡортостан автономияһының 100 йыллығына арнап, "Улар автономия яуланы" рубрикаһын алып барыусы тарихсы **Азат Ярмуллинды** шулай уҡ йыл авторы тип иғлан итәбеҙ.

● Белеүегеҙсә, баҫмабыҙҙа күп йылдар күренекле башҡорт яҙыусыһы, хикәйә оҫтаһы Сәғит Агиш исемендәге хикәйәләр конкурсы бара. Был бәйге барышында күп яңы исемдәр асылды, өмөтлө хикәйәселәр барлыҡҡа килеүенә шаһит булынды. Конкурс киләһе йылда ла дауам итәсәк. Тик шундай теләгебеҙ бар: авторҙар үҙ әҫәрҙәрендә заман һәм заманға ҡулайлашҡан, аҡыллы, көслө, лайыҡлы йәшәгән башҡорт кешеһе образын - бөгөнгө көн геройын һынландырһын ине. Был, әлбиттә, ҡәтғи шарт түгел. Ә шулай ҙа... Сәхнәлә, китаптарҙа, тормошта бөгөнгө көн геройы, лидерҙар күренмәй. Уларҙы беҙ әҙәби әҫәрҙәребеҙҙә булһа ла тыуҙырайыҡ. Ә тормошта беҙ һәр ваҡыт китаптарҙа яҙылған геройҙарға тиңләшергә тырышабыҙ. Шулай итеп, быйылғы лауреат:

**- Миләүшә Ҡаһарманова** - 16-28-се һандарҙа баҫылған **"Бетерә шаршыһы"** әҫәре өсөн.

**Барлыҡ уҡыусыларыбыҙҙы, авторҙарыбыҙҙы Яңы йыл менән ҡотлайбыҙ. Күңелдәрегеҙгә - рух, ҡот, тәнегеҙгә - ныҡлы сәләмәтлек, ижад ҡомары теләйбеҙ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АРЗАН ТАУАР...

## ярлы кешенең малын бөтөрә

Утыҙға тиклем үлем артында йөрөй, утыҙҙан һуң - алдында.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йыш күсереп ултыртылған ағас тамыр ебәрә алмай.

**(Ф. Рохас).**

Ышанмаусанлыҡ - ахмаҡтың ауырыу сифаты, ышаныусанлыҡ - аҡыллының йомшаҡ яғы.

**(Д. Дидро).**

Әгәр ҙә дөрөҫ йәшәй белмәйһең икән, дөрөҫ йәшәй белгәндәргә урын бир.

**(Гораций).**

Яҡшы кеше законһыҙ ҙа яҡшы, насарҙар законды ҡалҡан урынына ҡуллана.

**(Тәлғәт Абдрахманов).**

Камил булмау - дуҫтарыбыҙҙағы бына ошо сифат беҙгә оҡшай ҙа инде.

**(Филип Честерфилд).**

Кеше үҙенең ауырыуҙары тураһында һөйләшергә ярата. Ә үҙе өсөн ауырыуҙар тормошондағы иң ҡыҙыҡ булмаған ҡара тап.

**(Антон Чехов).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Йәшәгән, ти, ике аҡыл эйәһе. Берәүһе йыш ҡына яңылыша торған булған, ләкин башҡалар уның ысынлап та бөйөк кеше икәненә ысын күңелдән ышанған. Икенсеһе ысынлап та юғары белем эйәһе булған, әлбиттә, уға ышаныусылар ҙа аҙ булмаған.**

**Бер ваҡыт ике аҡыл эйәһе лә үҙ уҡыусылары менән бергә тәбиғәт ҡаҙаһына осрай һәм кеше йәндәрен тамуҡ менән охмахҡа ебәреүсе, хөкөм итеүсе ике фәрештә алдына барып баҫа. Фәрештәләр һәр берешәнән һорау ала һәм шулай тип ҡарар итә: беренсе аҡыл эйәһе һәм уға ышаныусы уҡыусылары - тамуҡҡа, икенсе аҡыл эйәһе һәм уның уҡыусылары ожмахҡа китә. Барыһы ла аптырашта ҡалған. "Ни өсөн улай?" тигән һорауға фәрештәләр шулай тип яуап биргән: "Ике аҡыл эйәһе һәм уларҙың уҡыусылары ла нимәгәлер ышана. Ләкин беренсе аҡыл эйәһе ниндәйҙер юғары көскә ышанам, тип уйлай, ләкин бары тик үҙенә генә ышана, ә уның артынан барыусылар Хәҡиҡәткә түгел, тимәк, уҡытыусыларына табына. Икенсе аҡыл эйәһе тик Хәҡиҡәткә ышана. Уның уҡыусылары ла Хәҡиҡәт эҙләүселәр, кешегә табыныусылар түгел. Үлемдән һуң йәшәү - ул Хәҡиҡәтте табыу. Уның ҡанундары кешеләр тарафынан уйлап сығарылһа, тарих бөтөнләй икенсе булыр ине. Шуға күрә беҙҙең ҡарарҙы башҡасаға үҙгәртеп булмай".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.**

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 29 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4677
Заказ - 2670/12